ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

27-3 июнь - июль (һөтай - майай) 2025

№25 (1169)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Һин нимә менән генә шөғөлләнһәң дә, ҡыйыулыҡ кәрәк. Сөнки һин нимә генә эшләмә, алға барыу өсөн ниндәй генә юлды һайлама, "Һин яңылышаһың" тип әйтә торған кеше барыбер осраясаҡ. Ауырлыҡтар булып тора, шуға ла һайлаған юлыңды тәнҡитләүсе менән тиҙ генә килешеүең дә бар. Үҙ маҡсатыңды булдырып, уға табан ныҡышмалы барыу өсөн дә ҡыйыулыҡ талап ителә. Донъяла күп еңеүҙәргә урын бар һәм ул еңеүҙәр һинең ҡыйыу эш итеүеңдә көтә.*

*Ральф Эмерсон.*


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Дәрестәр тәбиғәттә үтһен!



5

Салауат батырыбыҙҙың... ысын йөҙ-ҡиәфәте нисек булған?



7

Кем ул ир-ат?



8-9,11

Урал батыр варисҭары... йыйын йыйҙы



12


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ни өсөн замана йәштәре Хеҙмәт зали йәнәптәре менән дуҫ түгел?

***Муса ЮЛДАШЕВ, студент. Өфө ҡалаһы:*** Замана йәштәренең хеҙмәт менән дуҫ булмауы бер нисә сәбәпкә бәйле. Беренсенән, яңы технологиялар индереү процесында күп кенә эштәр автоматлаштырыла, был йәштәрҙе традицион хеҙмәттән алыҫлаштыра. Икенсенән, социаль медиа һәм интернет йәштәрҙең ваҡытын һәм иғтибарын башҡа өлкәләргә йүнәлтә, уларҙың эшкә булған ҡарашын үҙгәртә. Шулай уҡ йәштәрҙең күберәк ижадҡа һәм фекерләүгә нигеҙләнгән өлкәләрҙе өҫтөн күреүе традицион хеҙмәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы кәметә. Уларға үҙ мәнфәғәттәре, хыялдары һәм йәшәү рәүеше мөһим, был эш урынына талаптарҙы ла үҙгәрә.

Ғөмүмән алғанда, бөгөнгө көндә йәштәр аҡса эшләүҙең еңел юлын эҙләй. Әммә был миҙалдың бер яғы ғына, икенсе яғы быға ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ, тип әйтер инем. Һүҙем әлеге лә баяғы совет осоро тураһында. Ул саҡта кешеләр араһында эш йәһәтенән дә, матди планда ла тигеҙлек булған һәм ул системаның нигеҙ ташын тәшкил иткән. Тайпылыуға юл ҡуйылмаған. Бөгөн һәр кем, ниндәй социаль баҫҡыс биләүенә ҡарамай, өҫкәрәк ынтыла. Урыҫтар әйтмешләй, "каждый суслик агроном". Интернет селтәрҙәрендә, мәҫәлән, ул үҙе продюссер, үҙе блогер хәҙер. Шуның өсөн дә тир түгеп эшләү, көс һалып хеҙмәт итеү абруйҙа түгел.

## ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# ФӘН ЮЛЫ ЛА...

## мауыҡтырғыс һәм өмөтлө ул

**2 - 4 июлдә Өфөлә Йәш ғалимдар һәм студенттар ғилми йәмғиәттәре советтарының XIII Бөтә Рәсәй съезы үтә. Ошо ваҡиға айҡанлы физика-математика фәндәре кандидаты, доцент, Өфө фән һәм технологиялар университетының Физика-техник институты директоры Илдар Вәкиф улы ҠӘНӘФИН менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



(Дауамы 6-сы биттә).

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАЛАРҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ...

## тәмәке, зыянлы эсемлектәр йоғонтоһонан!



**Дәүләт Думаһы балалар баҡсалары һәм мәктәп биләмәләрендә тәмәке тартҡан өсөн яуаплылыҡты көсәйтергә тәҡдим иткән федераль закон проектын беренсе уҡыуҙа хупланы.**

Был закондар сығарыу башланғысының авторы - Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Бының өсөн әлеге 500-1500 һум штрафты 2000-3000 һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев фекеренсә, был бәлиғ булмағандар араһында тәмәке тартыуҙы иҫкәртеүҙең һөҙөмтәлелеген арттырырға мөмкинлек бирергә тейеш, сөнки күптәр мәктәптә уҡығанда уҡ тартып ҡарай. Проблема бик етди, мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәй уҡыусыларының яҡынса 60 проценты тәмәке тарта. Закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул иткәндән һуң төҙәтмәләр индерелә башланы, һуңынан документ икенсе уҡыуҙа ҡарала.

Шулай уҡ ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров алкоголһеҙ энергетиктар һатыуҙы тыйыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Закон Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары башланғысы менән ҡабул ителде. Ул 2025 йылдың 1 сентябренән көсөнә инергә тейеш. Закон мәктәптәр, университеттар, уҡыу һәм дауалау учреждениелары, театрҙар, физик культура һәм спорт учреждениелары эргәһендә урынлашҡан сауҙа нөктәләрендә алкоголһеҙ, шул иҫәптән энергетик эсемлектәрҙе һатыуҙы тулыһынса тыйыуҙы күҙ уңында тота. Ул республика халҡының әхлағын, һаулығын, хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлауға йүнәлтелгән, тиелә документта.

"Кешеләр дәртләнеү өсөн энергетиктар эсә, әммә уларҙы ҡулланыу эҙһеҙ үтмәй. Ваҡыт уҙыу менән йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы һәм аш һеңдереү эшмәкәрлеге менән проблемалар башланыуы ихтимал. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары, мәҙәниәт ойошмалары һәм спорт учреждениелары - кешеләрҙең йәшәү рәүешен билдәләй торған нормалар, ҡиммәттәр һәм ғәҙәттәр формалаштырыусы мөхит ул. Улар кешенең үҙ һаулығына аңлы мөнәсәбәте идеяһын трансляцияларға тейеш", - ти республика парламенты рәйесе Константин Толкачев.

Әйткәндәй, Рәсәйҙең Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексына тейешле үҙгәрештәр индерелде, тип хәбәр ителә Дәүләт Думаһы сайтында. Документҡа ярашлы, бәлиғ булмағандарға ошондай эсемлектәр һатҡан өсөн штраф граждандарға - 50 мең һумға, вазифа биләгән кешеләргә - 200 мең һумға, юридик шәхестәргә 500 мең һумға тиклем тәшкил итеүе мөмкин.

12+

**✓ Башҡортостанда йәшәп тә, урындағы йола һәм колориттарҙы яратмаған, уның ҡиммәттәрен баһаламаған, фәҡәт теләһә ниндәй сит ил рәүешенә теҙләнеүсе бахырҙар байтаҡ әле беҙҙә лә.**



КӨН ТЕМАҺЫ

# ҠӘҺҮӘХАНА ҠАЙҘА БУЛДЫ,

## йәғни Алтаҡталарҙағы сит һүҙҙәр аптырата ла, аҙаштыра ла.










**"Тел ҙҡмышы - ил ҙҡмышы", тип бик хаҡ әйтә халҡыбыҙ, сөнки телен оноткан илен дә, үҙен донъяға тыуҙырған әсәһен дә онотасаҡ. Ул ғына ла түгел, туған телен оноткан - үҙ йөҙөн, асылын юғалта, ә был уның яҡты донъяға кеше булып тыуыуының мәғәнәһен юҡҡа сығара. Ә кем ул - телһеҙ, илһеҙ, ата-әсәһеҙ, йөҙһөҙ, йөкмәткеһеҙ? Аллаһ һаҡлаһын, ул кеше түгел, ә дала ҡамғағы, тимәк.**

Дума депутаттары алдында сығыш яһап, билдәле режиссер Никита Михалков: "Берәй сит ил кешеһен машинаға ултыртып, Рәсәйҙең теләһә ҡайһы ҡалаһы буйлап йөрөтөргә тура килһә, ул үҙенең Рәсәйҙә икәненә ышанмаясаҡ та, сөнки урамдарҙағы алтаҡталар һәм магазин йәки ойошмалар атамаларының кәмендә 90 проценты латин хәрефтәре менән яҙылған инглиз һүҙҙәренән ғибәрәт", - тип бик дөрөҫ әйтте. Ысынлап та, бөгөн сит тел һүҙҙәре туған телебеҙҙе ҡыҫырыҡлай башланы түгелме? Ғөмүмән, бөгөн эшлекле даирәләрҙә генә түгел, хатта көнкүрешебеҙҙә лә (сөнки хәҙер сабыйҙарҙан алып, ауыл әбейҙәренә тиклем гаджет ҡуллана) сит ил һүҙҙәре менән аралашыуға күсте.

Әлбиттә, интернет ҡулланғанда дөйөм ҡабул ителгән сит ил һүҙҙәренән арынып булмағанда ла, тормошобоҙҙоң башҡа өлкәләрендә туған тел хазинабыҙҙы иркен файҙаланыу мөмкинлеген беҙгә бер кем дә тыймай, ләкин, йәнәһе лә, "уҡымышлы" һәм дә текә булып күренеү теләге еңә, күрәһең: бәғзе берәүҙәр күпселек өсөн аңлашылып етмәгән терминдар менән эш итеүҙе, йәғни сит һүҙҙәрҙе туған теленән өҫтөнөрәк ҡуя һәм әсә телебеҙҙә матур тәржемәһе, хатта бына тигән мәғәнәле, тасуири синонимдары булыуға ҡарамаҫтан, үҙ телен һанға һуҡмай маташа. Был үҙ-ара көндәлек аралашыуҙа ғына түгел, бигерәк тә эшлекле һәм фәнни даирәләрҙә, интернеттың яңылыҡтар таҫмаларында күҙ-ҡолаҡҡа сүп булып эләгеп кенә тора. Теге йәки был яңы ғына үҙләштерелгән "модалы" һүҙ аңлашылмаған хәлдә, уның рус теленә тәржемәһен ҡаранһаң, бына тигән аҫыл һүҙ хазиналарына тап булаһың.

Туған тел мөмкинлектәрен ҡыҫырыҡлаусы икенсе өлкә - әлеге алтаҡталар теле. Дөрөҫ, сит ил компаниялары Рәсәйҙән киткәс, улар тауар маркалары - фирма атамаларын да үҙҙәре менән алып китте, ләкин ватан етештереүселәре, һатыусылары һәм хеҙмәтләндереүселәре нишләптер ойошмаларын "серле" сит ил һүҙҙәре менән атап ҡырҡыша. Бының өсөн Рәсәйҙең ҙур ҡалалары урамынан үтеү ҙә кәрәк түгел, үҙебеҙҙең туған баш ҡалабыҙ Өфө урамдарына күҙ һалыу ҙа етә. Мәҫәлән, Өфө бизнесмендары Мәскәү коллегеларынан һис тә ҡалышмай. Башҡортостан баш ҡалаһында аҙым һайын беҙҙе "coffee", " open", "fresh", "sale" һәм "beer"ҙар саҡырып тора. Ә бит шул уҡ атамаларҙы матур һәм аңлайышлы итеп русса-башҡортса яҙып ҡуйырға була. Әллә, тейем, аптырағас, инглизса яҙһаң, кофе эсемлегенең тәме үҙгәреп, телде йоторлоҡ булып китәме икән? Әллә сит ил яҙыуы менән йәштәрҙе йәлеп итергә маташыуҙары микән? Ҡасандыр "Башҡортостан" ( тик хәҙер ул аңлашылмаған сәбәптәр менән "Башкирия" тип үҙгәртелде) сауҙа үҙәгендә "Ҡәһүәхана" ла эшләп тора ине лә бит, ул атаманы ла алып ташланылар.

Башҡортостанда йәшәп тә, урындағы йола һәм колориттарҙы яратмаған, уның ҡиммәттәрен баһаламаған, фәҡәт теләһә ниндәй сит ил рәүешенә теҙләнеүсе бахырҙар байтаҡ әле беҙҙә лә. Бахыр була инде, үҙ теленән баш тартып, туған йола-хазиналарын һанламаған әҙәмдәрҙе башҡаса нисек атарға? Ситтәрҙе хеҙмәтләндерергә теләгәс, ниңә һуң шул тарафтарға китеп эшләмәҫкә уларға? Әәә, уларҙың унда кәрәге лә юҡ икән шул: ситтәрҙең үҙҙәренеке етерлек. Тимәк, бынан шундай һабаҡ алырға ғына ҡала: үҙ ватаныңды, уның законДарын, ҡиммәттәрен һәм талаптарын ихтирам итеп, клиенттарың күңелен күреп, үҙ эшеңде башҡарырға; башҡаһына ҡыҫылмаҫҡа, сөнки ниндәй генә яҙыуҙар һәм рекламалар менән үткенсе иғтибарын йәлеп итергә тырышма, алтаҡталар мәсьәләһе компания, ойошма, магазин, ресторан, кафе хужаларының шәхси эше генә түгел, ул ҡала мөхитен билдәле бер тәртиптә һәм талап ителгәнсә, тел законДарына ярашлы һәм грамоталы итеп ҡороусы, ойоштороусы дизайн-код бурысы һанала. Архитектор Егор Попов әйтеүенсә, дизайн-код урамдағы юл күрһәткестәр менән билдәләрҙән алып, туҡталыштар һәм хатта сүп-сар һауыттарына тиклем биҙәлештәрҙе лә контролдә тотоу хоҡуғына эйә.

Шул уҡ ваҡытта Өфөлә алтаҡталарҙың архитектура-художестволы мәғлүмәти биҙәлеше тураһында документ ғәмәлдә. Уның буйынса үҙ эшен аҫҡан

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ни өсөн замана йәштәре Хеҙмәт ғали йәнәптәре менән дуҫ түгел?

***Ирек МЫРҘАБУЛАТОВ, инженер. Өфө ҡалаһы:*** Атай-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ тәрбиәһе арҡаһында беҙ, әлбиттә, бәләкәйҙән үк ниндәйҙер уңышҡа өлгәшер өсөн эшләргә кәрәк икәнен аңға һеңдергәнбеҙ. Советтар Союзында ысын мәғәнәһендә хеҙмәт культы бар ине һәм илебеҙҙең көслө иҡтисадлы донъя державаһы булыуына ышаныу беҙҙең милли менталитеттың бер өлөшөнә әүерелде. Әммә быуындар, дәүерҙәр кеүек үк, алмашына бара һәм, әлбиттә, хеҙмәткә ҡараш та үҙгәрә. Ысынлап та, замана йәштәре йыш ҡына юғары һәм дә килемле вазифаларҙан баш тарта, күңелгә ятҡан эште өҫтөнөрәк күрә.

Эйе, Советтар Союзында балаларҙы хеҙмәткә күнектерә белделәр. Бәләкәйҙән, мәҫәлән, ҡыр эштәренә йәлеп иттеләр. Йыйылған уңыш артабан ҙур илдең төрлө-төрлө төбәктәре буйлап балалар баҡсаларына, мәктәптәргә, дауаханаларға һәм шифаханаларға тарала ине. Шулай итеп, берҙәм хеҙмәт арҡаһында бөтә ил ризыҡ менән тәьмин ителде - ә быны күреү, белеү һәм был эштә ҡатнашыу үҫеп килгән быуын өсөн бик ныҡ әһәмиәтле. Башҡа һүҙҙәр менән әйткәндә, балаларға уларҙың хеҙмәте йәмғиәт өсөн, шул иҫәптән үҙҙәре өсөн дә бик файҙалы икәне асыҡ күрһәтелде.

Ул ваҡыттағы хеҙмәт менән бөгөнгөһө айырыла шул. Әйткәнемсә, үткән осорҙа халыҡ бергәләп, бер маҡсат өсөн эшләй торғайны, сөнки уларҙың хеҙмәт емеше үҙҙәрен байытты, тормоштарын яҡшыртты, улар мәктәптән алып нефть эшкәртеү заводтарына тиклем барыһын да үҙ ҡулдары менән төҙөп, тик дөйөм мәнфәғәттә файҙаланды. Барыһы ла халыҡ, һәр айырым кеше өсөн ине.

Хәҙер хеҙмәт улай түгел. Бөгөнгө "хеҙмәт" "эш" тигән төшөнсәнең мәғәнәһен генә үҙ эсенә алған. Баҫыуҙар бөгөн дә шулай уҡ эшкәртелә ул, ләкин уңыш күп осраҡта ҡулланыусыһын тапмай. Шулай итеп, кеше хеҙмәте лә бәҫен юғалта, сөнки барыһы ла баҙар иркендә. Бындай хеҙмәт ғәҙелме? Юҡ, ғәҙел түгел. Шуға күрә лә йәш быуын өсөн ул ҡыҙыҡлы түгел.

***Эдуард ХИСАМЕТДИНОВ, парикмахер. Өфө ҡалаһы:*** Атай-әсәйҙәребеҙҙең һыйлы тормош ҡороу өсөн мөмкинлектәре тарыраҡ булған, әлбиттә. Йәш саҡтары ла ауыр ғына осорға тура килде бит инде. Шуға күрә улар үҙ балаларына мохтажлыҡ кисертмәҫкә, бар нәмәне еткерә бирергә тырыштылар. Бына шул арҡала ла хәҙерге йәштәр ҡулланыусылар йәмғиәтенең "йомшаҡ" ҡосағында үҫкән быуын булып йәшәй. Әммә шул тормоштоң ҡәҙерен дә аңлап етмәйҙәр улар. Сөнки теләгән нәмәләре бар, уның өсөн артыҡ көс тә һалырға түгел. Шуға ла хәҙер күптәргә бер нәмә лә кәрәкмәй, бер ниндәй теләктәр, ынтылыштар, юғары идеалдар өсөн янып-көймәйҙәр, тип әйтергә мөмкин. Уларға барыбер. Үҙҙәре лә шулай һуҙып тороп, "Беҙгә ба-а-арыбеееер" тип ҡуялар бит. Телефон ҡулда булһа, шул еткән. Әлбиттә, шаштырып ебәрҙем, ләкин хәҡиҡәттән алыҫ китмәнек. Яҡшы заманалар сибек кешеләрҙе тыуҙыра, тигәне дөрөҫтөр инде, тик ошо сибек кешеләр дәһшәтле замандарҙы тыуҙырмаһын инде.

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓22 июндә Рәсәйҙә иҫтәлекле дата - Хәтер һәм ҡайғы көнө билдәләнде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн тураһында иҫкә төшөрҙө. "Әлбиттә, был фажиғәле көндө беҙ бер ҡасан да онотмаҫбыҙ. Ошо уңайҙан илебеҙҙә бик күп хәтер саралары үтте. Күңелһеҙ дата. Белеүебеҙсә, һуңынан 4 йылдан ашыу барған һуғыш һәм тиҫтәләрсә миллионлаған ҡорбан", - тине Радий Хәбиров.

✓Физиканан Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре билдәле булды. Өфөнән 12 уҡыусы физика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға тапшырған. Был хаҡта ҡаланың мәғариф идаралығынан хәбәр иттеләр. Ҡала хакимиәтендә белдереүҙәренсә, 12 уҡыусының етәүһе - 153-сө лицейҙан. Әйткәндәй, бер бала профилле математиканан да 100 балл йыйған. Билдәле булыуынса, 18 июнгә 5780 уҡыусы БДИ эштәрен 100 балға яҙған. Шулай уҡ Белорет районы уҡыусыһының Берҙәм дәүләт имтиханында 200 балл туплауы тураһында билдәле булғайны.

✓Башҡортостан тарихында тәүге тапҡыр сығарылыш уҡыусыһы Берҙәм дәүләт имтиханында 300 балл алған. Өфөнөң 153-сө лицейынан 11-се класс уҡыусыһы Алексей Лобов физика, информатика һәм профилле математиканан максималь балл йыйған. Ә рус теленән имтиханды 94 балға яҙған. Республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашты һәм егеттең уҡытыусыларына, ата-әсәһенә ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе.

✓Башҡортостанда үҙгәреүсән һауа торошо күҙәтелә. Синоптиктар һүҙҙәренсә, был республика биләмәһенә юғары баҫымдың йоғонто яһауына бәйле. Аҙнаның икенсе яртыһында сираттағы атлантик циклон йәнә һауа торошонoң боҙолоуына килтерҙе. Ваҡыты менән күк күкрәп, урыны менән ҡойма ямғыр, көндөҙ боҙборсаҡ яуҙы. Һауа температураһы төндә +8,+13 градус, көндөҙ +17,+22 градус булды. Ял көндәрендә һалҡын һәм ямғырлы буласаҡ. Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, июндең өсөнсө декадаһында ғәҙәттәгенән 2 градусҡа тиклем һалҡыныраҡ булыуы көтөлә.

✓Әбйәлил районының Буранғол ауылында йәшәүселәр балаларын эйәртеп йөрөгән бүрене күргән. Урмандан сыҡҡан йәнлектәр халыҡтың иғтибарын йәлеп иткән. "Һуңыраҡ инә бүре яңғыҙы килде. Ныҡ йонсоған ине. Шуғалыр ҙа урманынан сыҡҡандыр. Яңыраҡ ауыл чатында бүреләрҙең бер этте ботарлауы тураһында яҙғайнылар. Бәлки, беҙ күргән бүре булғандыр", - тип һөйләне Лилиә Мөхәмәтова "Башинформ"ға.




һәр эшҡыуар үҙ ойошмаһы алтаҡталарының өлгөһөн "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында" БР һәм "Реклама тураһында" федераль закондарға ярашлы, дәүләт телдәрендә яҙҙырып, өлгө варианттарын Өфө ҡала хакимиәтендә раҫлатҡандан һуң ғына элеп ҡуя ала. Үкенескә, был эште ойоштороуҙа баш ҡалабыҙҙа әле булһа тәртип юҡ, был өлкәләге закондарҙы бар тип тә белмәй башланылар һәм алтаҡталар башҡорт-рус дәүләт телдәрендә яҙылырға тейеш булып та, уларҙың күпселеге фәҡәт инглиз телендә генә яҙылып эленә. Йә булмаһа, рус телендә яҙылып та, башҡорт телендәге тәржемәһе күрәләтә һанға һуғылмай, алтаҡталағы законлы урынынан төшөрөп ҡалдырыла.

Бәғзе бер эшем эйәләре үҙҙәренең Рәсәйҙәге иң ҙур төбәк һаналған Башҡортостан Республикаһында йәшәп, аҡса һуғып ятыуҙары хаҡында ла онотоп китә, күрәһең. Һуңғы йылдарҙа был мәсьәләне контролдә тотоусы ла юҡ. Кем нимә теләй, шуны яҙып элә. Өҫтәүенә, Евросоюз илдәре тарафынан Рәсәйгә иғлан ителгән санкцияларға ла, уларҙың русофобик мөнәсәбәттәренә лә ҡарамаҫтан, илебеҙҙә һәм уның төбәктәрендә сит ил терминдары, атамалары менән мауығыуҙар, ғөмүмән, сит-ят рәүештәр алдында һуҡырҙарса табыныу күренештәре ғәжәп итә. Урамдарыбыҙҙы сит тел һүҙҙәре баҫып алды. Был мәсьәлә менән шөғөлләнергә тейешле чиновниктар үҙҙәренең туранан-тура вазифа бурыстарын тамам онотһа ла, Рәсәй Президенты Владимир Путин рус теле һәм Рәсәй халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм яҡлау, туған телдәрҙең таҙалығы мәсьәләһенә күптән иғтибарҙы йүнәлтә килә. Мәҫәлән, һуңғы тапҡыр ул был хаҡта Рәсәйҙә Рус теле, Пушкин көндәре айҡанлы рус теле һәм илдәге башҡа халыҡтар телдәрен күтәрмәләү тураһында дәүләт сәйәсәтен бойомға ашырыу буйынса Совет ултырышында һөйләне. Президент "сит ил һүҙҙәрен вульгар һәм механик рәүештә үҙләштереүҙән" арынырға ҡушты. Бигерәк тә, әгәр терминдарҙың рус телендә тәржемәһе булған хәлдә, тине ул. Уның һүҙҙәренсә, "кириллицаны файҙаланырға кәрәк, ә латиница һәм башҡа символдарҙан буҡҡаны түгел".

Әйткәндәй, ошо юҫыҡта инглиз һүҙҙәрен һәм терминдарҙы сикләү тураһында закон проекты 2023 йылдан бирле ҡаралмай ятҡан икән. Президент уны ҡарауҙы тиҙләтергә ҡушты. Совет ултырышынан һуң ике аҙналап ваҡыт үткәс, ниһайәт, Дәүләт Думаһы алтаҡталарҙы һәм рекламаларҙы рус теленә күсереү хаҡында закон ҡабул итте. (Иҫкәрмә: был закон тауар билдәләренә ҡағылмаясаҡ). Ошоноң менән бәйле, Башҡортостаныбыҙ баш ҡалаһы Өфөлә лә алтаҡталар яңыра башлар һәм урамдарыбыҙ туған телебеҙ йылыһынан йәмләнеп, нурланып, балҡып китер һәм баш ҡалабыҙҙа йәшәгән төрлө милләт вәкилдәре, шулай уҡ килгән ҡунаҡтар теге йә был ойошманың исемен танымай аҙашып, уны эҙләп ҡаңғырып йөрөмәҫ, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Юғиһә, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары иғтибарына яҙыусы Айгиз Баймөхәмәтов тарафынан былтыр уҡ ҡуйылған инглиз атамалары хаҡындағы мәсьәлә эҙһеҙ-ниһеҙ онотолоп ҡуйҙы түгелме? Бөгөн бына уны ҡабаттан тергеҙергә форсат тыуҙы: йоҡлап ҡалмайыҡтар!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТРАМП ИЗРАИЛЬ ХӨСӨТӨНӘ БИРЕЛДЕМЕ?

**Үткән аҙнаның 18 июненән алып 21-енә тиклем Санкт-Петербургта сираттағы Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумы (ПМЭФ 2025) булып үтте. Гәзит уҡыусыларыбыҙ был хаҡта, әлбиттә, хәбәрҙар һәм улар был ҙур, етди сараны төрлө мәғлүмәт каналдарынан күҙәтеп барғандыр, моғайын. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, форумдың бөгөнгө шарттарҙа мөһим булған ҡайһы бер йомғаҡтарына туҡталып китке килә.**

Ғөмүмән, Форумдың маҡсаты нимәлә һуң? Был халыҡ-ара иҡтисад форумы 1997 йылдан алып йыл һайын үткәрелә. Сараның йөкмәткеһе һәм маҡсатына бик үтеп инмәй генә фекер йөрөтөүселәр ситтән күҙәтеп, Форумды дөйөм һүҙҙәр һөйләнеп таралыша торған сираттағы бер йыйын кеүек тә ҡабул итә торғандыр, ләкин улар яңылыша. Быйыл форум айырыуса йәнле, файҙалы һәм заманса кимәлдә ойошторолдо, үҙен төрлө яҡлап күрһәтә алды. Әйтергә кәрәк, был сараның 28 йыл буйына халыҡ-ара кимәлдә үҙ йөҙөн һәм абруйын һаҡлап ҡалып, күп һанлы сит ил делегациялары йәлеп итеп, һаман да популярлаша барыуы юғары баһаға лайыҡ. Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумы - теге йәки был проблемалар буйынса фекер алышыуҙар ғына түгел. Унда төрлө илдәр вәкилдәре үҙ-ара хеҙмәттәшлек контракттары төҙөй, алдынғы технологиялар менән алмаша, халыҡ-ара партнерлыҡ хаҡында һөйләшеп килешә. Был форум киләсәк проблемаларын: технологик бойондороҡһоҙлоҡ; аҙыҡ-түлек һәм энергетика хәүефһеҙлеге; бәләкәй һәм урта предприятиеларҙы үҫтереү; цифрлаштырыу һәм башҡа шундай мәсьәләләрҙе хәл итә. Быйылғы форумда 92 илдән 20 мең кеше ҡатнашты; 6,3 трлн һумлыҡ 1066 һәр төрлө килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды. Рәсәй ивестициялар фонды 11 килешеү төҙөнө. Форум экспозицияларында Рәсәйҙең яһалма интеллект технологиялары ҡаҙаныштары булған роботтар, "Пегас", "Пилигрим", "Лидер" атамалы өр-яңы Рәсәй дрондары өлгөләре, "АвтоВАЗ" компанияһының "Лада Азимут" һәм Aurus яңы автомобиль моделдәре күрһәтелде.

Форумдың төп ваҡиғаһы буларaҡ, унда ҡатнашыусылар Рәсәй Президенты Владимир Путиндың сығышын көтөп алды. Нindәй яңы һүҙ әйтер Рәсәй башлығы? Киләсәккә ниндәй өмөттәр бағларға була? Президент, әлбиттә, Рәсәй иҡтисады буйынса белдереүҙәр яһаны, Рәсәй үҙенең иҡтисад күләме буйынса Европала - беренсе, донъя кимәлендә дүртенсе урында килеүен һәм башҡа мәлдәрҙе билдәләне. Бынан тыш, Владимир Путин 2026 йылдан Рәсәйҙә пенсияларға 1 февралдән - былтырғы йыл инфляция кимәлендә һәм 1 апрелдән - эш хаҡтары артыу менән бәйле РФ Социаль фонды килемдәре үҫешенән - ике этапта индексация буласағы хаҡында белдерҙе.

Ҡатнашыусылар Рәсәй Президентының Украина конфликты һәм Яҡын Көнсығыштағы хәл буйынса фекерен дә ишетте. Билдәләнеүенсә, Рәсәй Украинаның капитуляцияға бирелеүен маҡсат итеп ҡуймай - Мәскәү Киевтың килеп тыуған хәлде таныуын теләй; Рәсәй менән украин халыҡтары - бер бөтөн һәм "ошо мәғәнәлә бөтөн Украина - беҙҙеке"; Курск өлкәһенә баҫып инеп, Киев үҙенә-үҙе проблема тыуҙырҙы; Рәсәй Украина сиге буйынса хәүефһеҙлек буфер зонаһы булдырырға мәжбүр; Рәсәй Украинаның бойондороҡһоҙлоҡҡа хоҡуғына шик тотмай, ләкин уға суверенитет алған саҡтағы нигеҙ ҡиммәттәргә әйләнеп ҡайтыу хәйерле буласаҡ; әгәр Киев Рәсәй территорияһына "бысраҡ бомба" ташлай икән, был уның бик ҙур хатаһы, ә бәлки, һуңғы хатаһы буласаҡ. Ләкин Путин бындай хәлгә юл ҡуйылмаҫ, тигән ышаныс белдерҙе; Рәсәй Иран менән дә, Израиль менән дә бәйләнештә тора һәм уларға үҙ-ара конфликтты яйға һалыу буйынса ҡайһы бер тәҡдимдәре бар.

**Әйткәндәй,** 22 июнгә ҡарай төндә АҠШ Ирандың Фордо, Натанз һәм Исфахандағы ер астында урынлашҡан ядро объекттарына бункерға ҡаршы бомбалар һәм ракеталар менән һөжүм итте һәм Трамптың белдереүенсә, "Ирандың уран байыҡтырыу ҡеүәттәре юҡ ителде". Милли телевидение аша сығышында Трамп был агрессия актын оятһыҙ рәүештә "тәьҫоратлы хәрби уңыш" тип атаны. Американың Конгресс санкцияһынан тыш күрәләтә конституцияны һәм БМО Уставын тупаҫ боҙоуы менән бәйле, Ирандың мөрәжәғәте буйынса Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Хәүефһеҙлек Советы ашығыс рәүештә үҙенең ултырышын йыйырға ҡарар итте. Нью-Йорк штатынан конгрессмен-демократ Александрия Окасио-Кортес АҠШ-тың Иранға һөжүмен ғәйепләп сығыш яһаны һәм бының Трампҡа импичмент иғлан итеүгә нигеҙ булыуын белдерҙе. Ләкин, әгәр Тегеран АҠШ һөжүменә ҡарата ниндәйҙер яуап сараһы күргән хәлдә, был Иран өсөн һәләкәткә әйләнеүе ихтимал, тип янай Америка тарафы. Шул уҡ ваҡытта Вашингтон Тегеранды ядро килешеүҙәре буйынса һөйләшеүҙәргә әйләнеп ҡайтырға саҡыра.

**Һуңғы хәбәрҙәрҙән:** Иран Ҡораллы көстәренең ныҡлы оборонаһы һәм яуап һөжүменән һуң ике ил араһында ваҡытлыса килешеү урынлашты, ләкин Иран Хәүефһеҙлек советы дошманға ышанырға ярамауы хаҡында иҫкәртте. Һәм, ысынлап та, Израиль яғы Иранға ҡаршы кампанияның әле тамамланмауы һәм яңы этапҡа күсеүе хаҡында белдерҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"ӘЙ ЙОЛА" төркөмөнөң "ЙОЛА" йырына төшөрөлгән икенсе клибы YouTube селтәрендә 1 миллион ҡарау йыйған. Төркөмдөң музыканты, Башҡортостандың халыҡ артисы Ринат Рамаҙанов клиптың "Һомай" йыры рекордын яңыртыуы хаҡында хәбәр итте. "Беҙҙең видеояҙма 5 көн эсендә YouTube-та 1 миллион ҡарау йыйҙы. Һәм шулай итеп беҙ "Һомай"ҙың рекордын яңырттыҡ", - тип яҙҙы Ринат Рамаҙанов. "ЙОЛА" клибы өс илдә һәм 11 урында - Саха-Яҡут республикаһында, Үзбәкстанда, Ҡаҙағстанда төшөрөлгән, видеояҙмаға шулай уҡ Өфө һәм Башҡортостандан төшөрөлгән кадрҙар ҙа индерелгән.

✓Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһынан бер төркөм балалар Башҡортостанға ял итергә килде. Мәләүез районының "Дуҫлыҡ" балалар һауыҡтырыу лагерына 96 баланы урынлаштырабыҙ, тип хәбәр итте республиканың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин. "Йәй буйына беҙ Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан балаларҙы һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәрҙе ҡабул итәбеҙ. Ошо осорҙа балалар Башҡортостан тарихы, уның йолалары менән танышыр. Балаларҙың ялы файҙалы үтер, тик ыңғай тәьҫораттар ғына килтерер тип ышанам", - тип яҙа ул үҙенең социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓28 июндә, Йәштәр көнөндә, Башҡортостанда спиртлы эсемлектәр һатылмай. Байрам йыл һайын июндең һуңғы шәмбеһендә билдәләнә. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, тыйыу "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү һәм әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында"ғы законға бәйле. Ләкин был кафе-рестарандарға ҡағылмай.

✓2025 йылдан Башҡортостанда һыу объекттарында кешеләрҙең именлеген тәьмин итеү программаһы ғәмәлгә индерелде. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов ошо турала белдерҙе. "Йәмғеһе 936 тораҡ пунктта 1 377 ял итеү урыны буласаҡ", - тине Кирилл Первов. Бер ял итеү урыны булдырыу өсөн программала һыу объектының төбөн тикшереү һәм таҙартыу, ҡотҡарыу щитын ҡуйыу, шулай уҡ һыу инеү миҙгелендә ҡотҡарыусылар дежурлығын ойоштороу кеүек саралар исемлеге тәҡдим ителә. Программаға ярашлы, 2025 йылда 366 ял итеү урыны асылырға тейеш.

✓Рәсәйҙең хеҙмәт министры Антон Котяков Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумы барышында 2026 йылдың 31 декабрен ял көн итергә вәғәҙәләне, тип хәбәр итә РИА Новости. Ведомство етәксеһе һүҙҙәренсә, Хеҙмәт министрлығында производство календарын төҙөгәндә рәсәйҙәрҙең байрамға әҙерләнергә мөмкинлеге булһын өсөн йылдың һуңғы көнөн ял көнө итергә уйлайҙар. Быйыл 31 декабрь 5 ғинуарҙағы ялды күсереүгә бәйле ял көнө булып тора.

✓ ***Бюджет урындарының күпселеге Рәсәйҙең технологик лидерлығына булышлыҡ иткән һөнәрҙәр өсөн бүленгән. Уларҙың 43 проценты тиерлек - инженерия, заманса технологиялар менән бәйле йүнәлештәр.***



*ҠЫҪҠАСА*

# АТА-ӘСӘ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ғаиләләрҙе "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** 2025 йылдың 10 июнендәге указ менән балалар тәрбиәләүҙәге ҡаҙанышы, ғаилә ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлауға һәм нығытыуға тос өлөш индергән өсөн Архангел районынан Рәмилә һәм Зиннур Бәшировтар, Дәүләкән районынан Наталия Иванова, Туймазы районынан Зөлфиә һәм Марат Дәүләтовтар, шулай уҡ Өфөнән Тамара һәм Михаил Беловтар юғары наградаға лайыҡ булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы Башҡортостан Президентының указы менән 2014 йылдың 21 ноябрендә булдырылған.

✓ **Рәсәйҙә күп балалы ғаиләләр һәм пенсионерҙар һалым льготалары менән файҙалана ала.** Әйтәйек, тәүгеләр өсөн транспорт, ер һәм мөлкәт һалымдарына льгота ҡаралған. Икенселәре өсөн льготалар пенсия алды йәшендәгеләргә лә ҡағыла (йәғни 55 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙарға һәм 60 йәше тулған ир-егеттәргә). Уларға бер күсемһеҙ милек объекты: йорт, фатир йәки бүлмә, гараж йәки машина урыны, хужалыҡ ҡаралтыһы өсөн мөлкәт һалымын түләмәскә мөмкин. Ер һалымы буйынса бер ер участкаһының дөйөм хаҡынан 600 квадрат метр кадастр хаҡы күләмендә һалым ҡайтармаһы бирелә. Льгота менән файҙаланыу өсөн 30 апрелгә тиклем һалым инспекцияһына, Күп функциялы үҙәккә йәки ситтән тороп "Физик берәмектәр өсөн һалым түләүсенең шәхси кабинеты" сервисы аша ғариза бирергә кәрәк. Уға Дәүләт хеҙмәттәре порталынан пароль менән инергә мөмкин. Хәбәр иткәнебеҙсә, социаль һалым ҡайтармаһы 30 мең һумға арттырылды.

✓ **Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Башҡортостанда ғәҙәттән тыш хәлдән зыян күргәндәргә ер бүлеү үҙенсәлектәре тураһында законды беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.** Раҫланған тәҙәтмәләр льготалы категорияларға ҡараған граждандарға ҡағыла. Тәбиғи һәм техноген характерҙағы ғәҙәттән тыш хәлдәр арҡаһында ерҙәрен файҙаланыу мөмкинлеген юғалтҡан осраҡта, улар яңы участкаға дәғүә итә ала. Шул уҡ ваҡытта беренсе участкаға милек хоҡуғы һаҡлана. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская, ҡабул ителгән закон ауыр хәлдә ҡалған граждандарға ярҙам итеүҙә мөһим аҙым булып тора, тип билдәләне.

✓ **Башҡортостанда Сосновский балтырғаны менән көрәш миҙгеле башланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, был үҫемлектең һуты хәүефле һәм ағыулы, тәнде яндыра.** Рәсәй Ауыл хужалығы үҙәгенең республика филиалынан хәбәр итеүҙәренсә, ошо көндәрҙә белгестәр Тәтешле районында зарарланған биләмәләрҙе химик эшкәртеү эшенә тотонған. Тикшереү мәғлүмәттәре буйынса, тап ошо районда Сосновский балтырғаны киң таралған. Ошо үҫемлек баҫып алған ерҙәрҙе тикшереүгә ярашлы, быйыл Яңауыл, Балтас, Тәтешле, Ҡырмыҫҡалы, Ишембай, Дыуан райондарында яҡынса 64 гектар майҙанда балтырған үҫеүе асыҡланған. Бер йыл элек ул 67 гектарҙа таралған булған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҺӨҘӨМТӘЛӘР ҠЫУАНДЫРА

**Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика делегацияһының Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумындағы эшенә йомғаҡ яһаны һәм форум барышында иғлан ителгән иң мөһим һөҙөмтәләрҙе әйтте.**

"Башҡортостан икенсе йыл рәттән Рәсәй төбәктәрендә Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингында өсөнсө урынды яуланы. Быйыл өсөнсө урынды Мәскәү өлкәһе менән бүлештек. Был бик яҡшы һөҙөмтә. Шуға күрә барығыҙҙы ла ҡотлайым, идара итеү командаһының яҡшы эше был. Бынан тыш, Башҡортостан үҙ төркөмөндә төбәктәр "дронофикацияһы" пилот рейтингында өсөнсө урынды алды. Беҙҙең төбәк газ-мотор яғыулығын үҫтереү буйынса ла өс лидер иҫәбенә инде, республикабыҙ Санкт-Петербургтан һәм Ростов өлкәһенән генә ҡалышты. Сафҡа индерелгән газ заправкалары һаны буйынса Башҡортостан абсолют рекордсмен булды. Бер йылда 21 АГНКС эшләй башланы", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Журналистар менән аралашыу барышында республика Башлығы республика делегацияһының XXVIII Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумы майҙансығындағы эшен юғары баһалап, шулай тине: "Мин республикабыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Беҙҙең стенд бик ҡыҙыҡлы һәм креатив. Ул һөйләшеүҙәр үткәреү өсөн дә уңайлы, янында һәр ваҡыт халыҡ күп йыйыла. Был йомшаҡ инвестиция көсө тип атала. Үҙегеҙ күрҙегеҙ, минең бер минут та ваҡытым булманы тиерлек, 30-ҙан ашыу осрашыуҙы үҙем үткәрҙем. Республика күп рейтингтарҙа алдынғы урындарҙы биләй. Беҙ МХО-ға ярҙам күрһәтеү йәһәтенән бурыстарҙы үтәйбеҙ, шул уҡ ваҡытта төбәктең социаль-иҡтисади үҫеше тураһында ла онотмайбыҙ. Беҙгә инвесторҙар килә, яңы проекттар тәҡдим итә. Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым, Башҡортостан өсөн айырыуса ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм".

# БАШЛАНДЫ!

**20 июндә илебеҙҙең 1,2 меңдән ашыу юғары уҡыу йортонда һәм 4 меңгә яҡын колледжында ҡабул итеү кампанияһы башланды. Был хаҡта Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Дмитрий Чернышенко белдерҙе.**

Уның һүҙҙәренсә, быйыл юғары белем биреү программалары буйынса - 619 меңдән ашыу, урта һөнәри белем биреү программалары буйынса 835 мең самаһы бюджет урыны бар. Бюджет урындарының күпселеге Рәсәйҙең технологик лидерлығына булышлыҡ иткән һөнәрҙәр өсөн бүленгән. Уларҙың 43 проценты тиерлек - инженерия, заманса технологиялар менән бәйле йүнәлештәр. Шулай уҡ медицина, педагогик һөнәрҙәр, ижтимағи фәндәр һәм башҡа йүнәлештәр бюджет урындары күләме буйынса лидер булып ҡала.

2025 йылда юғары уҡыу йорттарына Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын ҡабул итеү өсөн бюджет урындарының дөйөм күләменән 10 проценттан да кәм булмаған айырым квота билдәләнгән (50 меңдән ашыу урын). Абитуриенттар эш биреүселәрҙең тәҡдимдәре менән "Рәсәйҙә эш" платформаһында танышырға мөмкин.

"Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Профессионалитет" федераль проекты колледждарында һәм техникумдарында ла ҡабул итеү кампанияһы башлана. Беренсе курс студенттары өсөн 834,7 мең урын әҙерләнгән, был иһә былтырғыға ҡарағанда 51,5 меңгә күберәк. Хәбәр ителеүенсә, 2025-2026 уҡыу йылына Башҡортостан колледждарында бюджетта уҡыу өсөн 24 меңгә яҡын урын ҡаралған.

# ДЕПУТАТТАРҒА РӘХМӘТ БЕЛДЕРЕП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 24-се ултырышында ҡатнашты. Республика парламенты яҙғы сессияһын тамамланы.**

Сара башланыр алдынан республика етәксеһе Дәүләт Йыйылышы фойеһында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың портреттары төшөрөлгән "Үҙебеҙҙекеләр һәм Геройҙар" тигән күргәҙмә менән танышты. Экспозицияла 24 хәрби хеҙмәткәр, шул иҫәптән 15 Рәсәй Геройы һәм өс Батырлыҡ ордены кавалерының картинаһы бар. Һигеҙ портретта Башҡортостан яугирҙары һүрәтләнгән. Рәссамдар - Вера Фролова һәм Марат Мөхәмәтйәнов. Башҡортостан Башлығы парламентарийҙарға Махсус хәрби операцияға ярҙамы өсөн рәхмәт әйтте һәм уларға Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. "Республика һәм муниципаль кимәлдәге депутаттар, барлыҡ сәйәси фракция ағзалары МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү буйынса мөһим миссия башҡара. Был күп яҡлы эш. Һеҙ гуманитар ярҙам туплауҙа ҡатнашаһығыҙ, күп кенә коллегаларығыҙ Ватанды һаҡлау өсөн алғы һыҙыҡҡа юллана", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

- Төбәктә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, уларҙың туғандарына һәм яҡындарына 54 ярҙам сараһы бойомға ашырыла. Ярҙам күрһәтеүҙе артабан да дауам итәбеҙ. Республика етәксеһе Милли музей менән бергә әҙерләнгән "Символдың тыуыуы" күргәҙмәһен дә ҡараны. Экспозиция скульптор Сосланбәк Тавасиевтың милли геройыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле тарихына арналған.

# ИҢ ШӘП ҠЫМЫҘ ҠАЙҘА?

**Башҡортостанда иң шәп ҡымыҙҙы Урал аръяғында бешәләр. Республикала үткәрелгән конкурс шуны раҫланы.**

Был конкурсты республиканың Ауыл хужалығы министрлығы һәм "Башҡорт аты" башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү ғилми-тикшеренеү институты ойоштorҙо. Конкурсҡа 10 райондан 29 өлгө тәҡдим ителде. Быйыл тәүге тапҡыр еңеүселәр өс номинацияла билдәләнде: "Тәбиғи башҡорт ҡымыҙы", "Бейә һөтөнән бешелгән һәм өҫтәмәләр ҡушылған ҡымыҙ" һәм "Ҡымыҙ эсемлеге". "Тәбиғи башҡорт ҡымыҙы" номинацияһында Баймаҡ районынан "ЭкоПродукт" компанияһы етештергән ҡымыҙ иң яҡшыһы тип танылды. Икенсе урынды Стәрлебаш районынан ҡымыҙ бешеүселәр Алмаз Рәхимғолов һәм Йәрмәкәй районынан Зөбәйер Гаджиев яуланы. Өсөнсө урынды Әлшәй районынан Азат Ғарифуллин һәм Өфөнөң 119-сы ат заводы бүлеште.

"Бейә һөтөнән бешелгән һәм өҫтәмәләр ҡушылған ҡымыҙ" номинацияһында тәүге ике урынды Әбйәлил районының "Тамьян" йәмғиәте эсемлектәре яуланы. Өсөнсө урынды Баймаҡ районынан Илгиз Сафиндың ҡымыҙы алды. "Ҡымыҙ эсемлеге" номинацияһында Баймаҡ районынан "ЭкоПродукт" компанияһы еңеүсе булды. Икенсе һәм өсөнсө урындар Йәрмәкәй районынан Зөбәйер Гаджиевҡа һәм Әбйәлил районынан "Тамьян" йәмғиәтенә бирелде. "Конкурс республиканың ауыл хужалығы министрлығы менән берлектә ойошторолдо. Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән 20 хужалыҡ үҙ продукцияһын алып килде. Өлгөләрҙе БДАУ, БДМУ, республиканың Роспотребнадзор идаралығы һәм "Башҡорт аты" ғилми-тикшеренеү институты эксперттары баһаланы. Конкурс йылдан-йыл нығыраҡ популярлыҡ яулай, ҡатнашыусылар һаны арта", - тип һөйләне "Башҡорт аты" башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты директоры Руслан Ғиззәтуллин.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 2026 йылда Рәсәй мәктәптәрендә берҙәм мәктәп дәреслектәре барлыҡҡа килә. Мәғариф министрлығы Фәндәр академияһы менән берлектә берҙәм дәреслектәр пулын булдырыу йәһәтенән ҙур эш алып бара. Был хаҡта РИА Новости агентлығына Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Дмитрий Чернышенко хәбәр итте. 2025 йылдың 1 сентябренән 5-9-сы кластар тарихты яңыртылған берҙәм дәреслектәрҙән өйрәнә башлай. Әлеге ваҡытта 2026/27 уҡыу йылынан мәктәптәрҙә индереү өсөн 9-11-се кластар өсөн яңы йәмғиәтте өйрәнеү курсы әҙерләнә.

✓ Салауат дәүләт башҡорт драма театрында бушлай "Фәрештәләр беҙҙең эргәлә" спектакле күрһәтелә. Сара Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләре һәм Салауат ҡалаһы ирекмәндәре өсөн ойошторола. Гөлнара Янышеваның режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рафаэль Ғәйнуллин ҡуйған "Фәрештәләр беҙҙең эргәлә" пьесаһы - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың яҡындарына ярҙам итеү йылына арналған әҫәр. Театр хәбәр итеүенсә, ижади миҙгел дауамында хәрбиҙәрҙең туғандары стационар театрҙа ла, гастролдәрҙә лә бушлай спектаклдәр ҡарай алды. Был тәжрибә дауам итәсәк.

✓ Республикала буласаҡ беренсе класс уҡыусыларының 40 меңдән ашыу ата-әсәһе "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша ғариза биреү өсөн электрон сервистан файҙаланған. Теркәү йәки ваҡытлыса теркәлеү урыны буйынса балаларҙы, шулай уҡ льготаларға дәғүә итеүселәрҙе беренсе класҡа яҙыу өсөн документтар ҡабул итеү 30 июнгә тиклем дауам итәсәк. Хеҙмәт менән төбәк дәүләт хеҙмәттәре порталы йәки федераль портал аша файҙаланырға мөмкин.

✓ Учалы район-ара прокуратураһы Роспотребнадзор һәм Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының территориаль бүлектәре белгестәре менән берлектә үҙәк район дауаханаһының поликлиникаһы һәм психиатрия бүлеге бинаалары торошон тикшерҙе. Улар 1950 йылда төҙөлгән һәм ныҡ туҙған. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса прокуратура баш табипҡа ҡарата административ эш ҡуҙғатты, тип хәбәр итә рәсми мәғлүмәттә.

✓ Әбйәлил районы Асҡар үҙәк район дауаханаһы яңы "Элепс" электрохирургия аппараты алды. "Аппарат электрохирургияла ҡулланылған заманса ҡорамалдар исемлегенә инә, ул операцияларҙы юғары дәрәжәлә теүәллек һәм туҡымаларҙы аҙ йәрәхәтләү менән башҡарырға мөмкинлек бирә. Был сирлеләрҙең тиҙерәк һауығыуына булышлыҡ итеп кенә ҡалмай, операциянан һуң өҙлөктәр килеп сығыу хәүефен дә кәметә", - ти Асҡар үҙәк район дауаханаһының баш табибы Илгиз Килдейәров.

✓ *Ул география уҡытыусылары менән осрашыуҙа дәрестәрҙе тәбиғәт ҡосағында үткәрергә, балаларҙы тыуған яҡтың матурлыҡтары менән таныштырырға тәҡдим итте.*



ШУНДАЙ ТӘҠДИМ



# ДӘРЕСТӘР ТӘБИҒӘТТӘ ҮТҺЕН!

**Башҡортостан - Рәсәйҙең иң бай тәбиғәтле, иҡтисади яҡтан мөһим төбәктәренең береһе. Бында нефть, баҡыр, башҡа файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу үҙәктәре урынлашҡан, шифалы сығанаҡтар, термаль быу һәм балсыҡ менән дан тотҡан санаторийҙар эшләй. Республика туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бүлә, балаларға тыуған яғының матурлығын күрһәтә, тәбиғәтте һаҡларға өйрәтә.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ял көндәрендә мөмкинлек булғанда республиканың ҡыҙыҡлы урындарын йөрөп сыға, социаль селтәрҙәрҙә тыуған яҡтың матурлығын күрһәтеп, халыҡты Башҡортостан буйлап сәйәхәт итергә саҡыра. Ул география уҡытыусылары менән осрашыуҙа дәрестәрҙе тәбиғәт ҡосағында үткәрергә, балаларҙы тыуған яҡтың матурлыҡтары менән таныштырырға тәҡдим итте, "географик минимум" булдырыу, йәғни уҡыусылар мотлаҡ барып күрергә тейешле тәбиғәт объекттары исемлеген төҙөү мөһимлеген билдәләне. Башланғыс кластар өсөн - үҙ ҡалаһы, районы, өлкәндәр өсөн - бөтә республика буйынса. Шулай уҡ география буйынса берҙәм дәреслек сығарыу, мәктәп походтарына ярҙам күрһәтеү, балаларға тәбиғәтте аңларға, дөрөҫ йөрөүнәлеш табырға өйрәтеү кәрәклеге билдәләнде. Гаджеттарҙың был эштә файҙалы булыуын, мәҫәлән, уҡытыу ҡушымталары ярҙамында хайуандарҙы, үҫемлектәрҙе танырға мөмкинлеге телгә алынды. Радий Фәрит улы Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығына был мәсьәлә буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты.

География уҡытыусылары Башҡортостан географияһы буйынса берҙәм уҡыу әсбабы сығарыу тураһында һорау күтәрҙе. Радий Хәбиров был теманың бөгөнгө шарттарҙа бик мөһим икәнен билдәләне. Шулай уҡ уҡыусыларға тыуған яҡ географияһын өйрәнеү маҡсатында ойошторолған мәктәп походтарына финанс ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге лә тикшерелде. Радий Хәбиров бындай сараларҙы үткәреү мөһим, тик бөтә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре үтәлергә тейеш, тине. "Әгәр йөкмәткеле программа булһа, беҙ был башланғыстарҙы хупларға әҙербеҙ. Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе аша ошондай проекттар конкурсын иғлан итергә мөмкин", - тине ул.

Осрашыуҙа мәктәптәрҙә практик һәм лаборатор эштәр өсөн "география майҙансыҡтары" ойоштороу, республикала яңы асылған "алтын ҡаҙаҡтар" темаһын өйрәнеү мәсьәләләре лә ҡаралды. "Беҙҙең республика ҙур тәбиғи байлыҡҡа эйә. Бурысыбыҙ - уларҙы өйрәнеү, һаҡлау һәм халыҡҡа уникаль объекттар менән танышыу мөмкинлеге биреү. Геологик ҡырҡымдың "алтын ҡаҙаҡ" статусын алыуы - иң тәүҙә ғалимдарҙың хеҙмәте. Рәсәйҙә быға тиклем бер генә "алтын ҡаҙаҡ" та юҡ ине. Беҙҙең ғалимдар Башҡортостанда оҙаҡ йылдар эшләне, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан белгестәре менән бергәләп ҡырҡымды ентекле тикшерҙеләр, һөҙөмтәлә "алтын ҡаҙаҡ"тың халыҡ-ара статусын алдыҡ. Был йүнәлештә эште дауам итәсәкбеҙ. "Усолка" ҡырҡымы - республиканың мөһим туристик урыны, бында килеп, Ерҙең 300 миллион йыллыҡ тарихы менән танышырға мөмкин", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы шулай уҡ ЮНЕСКО менән бергә республиканың уникаль тәбиғәт объекттарын донъя кимәлендә танытыу буйынса ҙур эш алып барыуҙарын әйтте. "Беҙ бер нисә йыл инде Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереү өсөн көрәшәбеҙ. Был ҡарар июль башында билдәле буласаҡ. Киләһе йылда был исемлеккә беҙҙең шихандар - Торатау, Йөрәктау, Ҡуштау ҙа инер, тип өмөтләнәм", - тине ул.

Осрашыуҙа ҡатнашыусы Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығының күп яҡлы гуманитар хеҙмәттәшлек һәм мәҙәни бәйләнештәр департаменты директоры, ЮНЕСКО буйынса федераль комиссияның яуаплы секретары Александр Алимов республиканың тәбиғәте уникаль, уны һаҡлауға төбәк етәкселеге ҙур өлөш индерә, тип билдәләне. "Усолка" һәм "Алыҫ Төлкәҫ" ҡырҡымдарында "алтын ҡаҙаҡтар" ҡуйылыуы - ысынлап та тарихи ваҡиға. Тағы ла бер тапҡыр Рәсәйҙең тәбиғәте, тарихы, мәҙәниәте бай икәнен иҫбатлайбыҙ. ЮНЕСКО буйынса емешле хеҙмәттәшлек өсөн республика етәкселегенә рәхмәт. Төбәк илдә геопарктар булдырыуҙа иң беренсе. Был тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүгә һәм туризм үҫешенә булышлыҡ итә. "Янғантау" геопаркы милли геопарктар селтәренең үҫешенә этәргес бирҙе", - тине Алимов.

Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшереү үҙәге Геология институты директоры Сергей Ковалёв Башҡортостанда фән, мәғариф һәм экотуризм үҫеше өсөн нигеҙ булырлыҡ уникаль объекттар барлығын билдәләне. Ул практикалар, халыҡ-ара проекттар һәм даими тикшеренеүҙәр өсөн фәнни-мәғариф үҙәге булдырырға тәҡдим итте. Был алдынғы фәнни мәктәптәрҙе йәлеп итергә, республиканың тәбиғәт потенциалын социаль-иҡтисади үҫешкә йүнәлтергә мөмкинлек бирәсәк.

***Шулай итеп, Башҡортостандың иң уникаль 10 тәбиғәт объекты:***

***1. Стәрлетамаҡ шихандары*** - боронғо коралл рифтары, 230 миллион йыллыҡ тарихлы Торатау, Йөрәктау, Ҡуштау.

***2. Янғантау*** - эҫе быу сығып торған, серле тәбиғәт күренештәре менән дан тотҡан тау, бейеклеге 504 метр.

***3. Шүлгәнташ мәмерйәһе*** - 14 мең йыллыҡ боронғо һүрәттәр һаҡланған, Уралдағы иң ҙур мәмерйәләрҙең береһе.

***4. Ирәмәл тауы*** - 1582 метр бейеклектәге изге тау, борон башҡорттар өсөн изге урын һаналған.

***5. Красноусол сығанаҡтары*** - шифалы минераль һыуҙар, уларҙың составы уникаль, ғалимдар өсөн серле булып ҡала.

***6. Асылыкүл*** - Башҡортостандағы иң ҙур күл, майҙаны 23,5 км$^2$.

***7. Ирәндек айыуы*** - 1992 йылда табылған ҙур алтын самородок, хәҙер Милли музейҙа һаҡлана.

***8. Инйәр тештәре*** - кварциттан торған, бейеклеге 1161 метрға еткән тау массивы, легендаларға бай урын.

***9. Ҡорғаҙаҡ*** - таҙа, минераль һыу сығанағы, Рәсәйҙә иң яҡшы һыуҙарҙың береһе тип танылған.

***10. Мораҙым тарлауығы*** - 40-тан ашыу мәмерйәһе, һирәк үҫемлектәре, хайуандары менән дан тотҡан тәбиғәт паркы.

ҠЫҪҠАСА

## ТҮЛӘРГӘ ТУРА КИЛӘ

**27 июндә Өфөлә түләүле туҡталҡалар (парковкалар) эшләй башланы.** Улар өсөн ҡаланың тарихи үҙәгендәге тығыҙ участкала 1188 урын билдәләнгән. Машинаны ҡуйған өсөн түләү сәғәтенә 40 һум тәшкил итә, ә тәүге 20 минут бушлай. Түләмәгән өсөн 1 500 һум күләмендә штраф ҡаралған. Эш көндәрендә 21:00 сәғәттән 7:00 сәғәткә тиклем, ял һәм байрам көндәрендә түләү алынмай. Шулай уҡ льготалы категорияларға ҡарағандар өсөн дә туҡталҡалар менән файҙаланыу бушлай. Ташлама алыу өсөн тейешле документтар менән Күп функциялы үҙәккә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓ **Өфөлә федераль бюджет иҫәбенә хәүефле һәм билдәһеҙ инфекцияларҙы тиҙ арала асыҡлау (24 сәғәт) һәм өйрәнеү өсөн юғары кимәлдәге биологик хәүефһеҙлек лабораторияһы төҙөлә.** Тейешле бойороҡҡа Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Рәсәй Федерацияһының "Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә ғәмәлгә ашырылған капиталь төҙөлөш объекттары исемлегендә йөмғеһе 16 медицина учреждениеһы бар. Бындай объекттарҙы төҙөүҙе, реконструкциялауҙы "тулыһынса йәки өлөшләтә федераль бюджет аҡсаһы иҫәбенә тормошҡа ашырыу" планлаштырыла, тиелә документта. Улар араһында - Өфөләге биологик хәүефһеҙлек лабораторияһы төҙөлөшө. Благовещенда, Красноярскиҙа, Магаданда, Пермдә, Һамарҙа һәм Силәбелә лә ошондай лабораториялар асыла.

✓ **Дәүләт хеҙмәттәрендә юғары уҡыу йортона инеүселәр өсөн "Тормоштағы хәл" сервисы эшләй башланы.** Ул абитуриенттарға балдар һәм БДИ-ла тапшырылған предметтар, юғары уҡыу йортоноң ҡайҙа урынлашыуы, дөйөм ятаҡтың һәм хәрби кафедраның булыу-булмауы, теләгән уҡыу формаһы (көндәҙгә йәки ситтән тороп уҡыу) кеүек билдәләнгән параметрҙары буйынса һөнәр һәм уҡыу йортон һайлау мөмкинлеге бирә. Сервис аша белем биреү программаларын сағыштырырға һәм бюджет урындары тураһында мәғлүмәт алырға була. Шулай уҡ сервис аша конкурс исемлектәрендә үҙеңең позицияһын күҙәтеп барырға мөмкинлек бар.

✓ **Рәсәйҙә өйҙә крокодил, төлкө, ягуар һәм башҡа ҡырағай хайуандарҙы тоторға тыйылды.** Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Михаил Мишустин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, өй шарттарында тоторға ярамаған хайуандар исемлегенә 121 төр ингән: улар араһында кобра, мамба, тайпан, питон, ағыулы йыландар, варан, ҡайһы бер ташбаҡа төрҙәре һәм бөтә крокодилдар бар. Өйҙә арыҫлан, ягуар, гиена, фил, носорог, бегемот, приматтар, дикобраз, шулай уҡ бүре, төлкө һәм айыу тоторға ярамай. Һыу хайуандарынан - тюлень, морж, ламантин, кит һымаҡтар, скат, мурена һәм акула тыйыла. Шәхси йорттарҙа шулай уҡ страус, пеликан, фламинго, пингвин, өкө, торна, ағыулы үрмәкселәр, саяндар һәм ҡайһы бер ағас баҡа төрҙәре тоторға ярамай. Был тыйыу зоопарк, цирк, дельфинарий һәм океанариумдарға ҡағылмай.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Йәштәр көнө уңайынан БР Йәштәр сәйәсәте министрлығы 28 июндә Өфөлә Ағиҙел йылғаһы буйында байрам сараһы ойоштора. Ҡунаҡтар өсөн VR-зона һәм төрлө уйындар, билдәле блогерҙар һәм артистар менән осрашыу, аниме-косплей зонаһы, автотауыш һәм тюнинг күргәҙмәһе, фәнни слэм һәм йәштәр маркеты буласаҡ. Музыкаль программала Elman, BABY Ti, Марат Яруллин һәм Inst Rinna ҡатнаша. Байрам 15.00 сәғәттә башлана.

✓ Өфө ҡала хакимиәте 29 июндә Дуҫлыҡ Монументы янында йәштәр Фестивале уҙғара. 20-нән ашыу башҡарыусы ҡатнашлығында ҙур концерт программаһы әҙерләнгән. Сығыш яһаусылар араһында Jeembo, Tveth, Thomas Mrvz, Травма төркөмдәре һәм башҡалар бар. Өфө хакимиәте башлығы кубогына брейк-данс буйынса турнир үтәсәк Фестиваль 14.00 сәғәттә асыла, ә концерт 17.00 сәғәттә башлана.

✓ Мэрияның матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 22 июнь таңында һәйкәлдәргә һәм мемориалдарға сәскә һалыу тантанаһы булды. Улар янында курсанттар, хәрби-патриотик клубтар һәм кадет кластары тәрбиәләнеүселәре "Хәтер вахтаһы"на баҫты. 20-22 июндә ҡала парктарында һәм скверҙарында "Хәтер шәме" Бөтә Рәсәй акцияһы ойошторолдо. Төрлө быуын вәкилдәре ҡаһарман ата-бабаларына хөрмәт белдерергә, үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, Бөйөк Еңеүҙе яҡынайтҡан яугирҙарҙың батырлығын иҫкә алды, шәмдәр ҡабыҙҙы.

✓ Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы һәм Евразия фәнни-белем биреү үҙәге базаһында БР Фәндәр академияһы президиумы ултырышы үтте. Унда ултырыштың почетлы ҡунағы булараҡ Абхазия Фәндәр академияһы президенты, филология фәндәре докторы, профессор, академик Али Зураб Джотович Джапуа ҡатнашты. Ул сәләмләү һүҙе менән сығыш яһаны һәм ҡатнашыусыларҙы Абхазия Фәндәр академияһының эшмәкәрлеге менән таныштырҙы.

✓ Башҡортостан көрәшселәре Ҡаҙанда билбау көрәше буйынса донъя чемпионатында һәм беренселегендә тәүге миҙалдар яуланы. "Туғандаш Татарстандан яҡшы хәбәрҙәр килде. Беҙҙең егеттәр Ҡаҙанда билбау көрәше буйынса донъя чемпионатында һәм беренселегендә тәүге миҙалдар яуланы", - тине республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. Малик Емилов һәм Әнүәр Әхмәтғәлиев алтын миҙалдар алды. Улар 60 һәм 65 килограмм ауырлыҡ категорияларында еңеүсе булды. Шулай уҡ Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында Рәмзил Кинйәбулатов (55 килограмм) бронза яуланы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Тыйыу кешеләргә, ғаиләгә, ырыуға, ҡәрҙәштәргә, ғөмүмән, йәмғиәткә, йорт-илгә имен, ырыҫлы йәшәү өсөн ҡулланылған йола, ҡанун булған. Уны тотмағандар, үтәмәгәндәр бәлә-ҡаза күргән, язаға тарттырылған.*



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Асылдан тайпылма

Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт, ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән.

Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йолалар, ҡағиҙәләр араһында тыйыу ғәҙәттәре лә бар. Әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бөгәс теләккә, хис-тойғоға, кисерешкә, ярһыуға ирек бирмәү, тотанаҡһыҙлыҡҡа, бәйһеҙлеккә, тәртипһеҙлеккә юл ҡуймау, кешене тынысландырыу, баҫылдырыу...

Тыйыу кешеләргә, ғаиләгә, ырыуға, ҡәрҙәштәргә, ғөмүмән, йәмғиәткә, йорт-илгә имен, ырыҫлы йәшәү өсөн ҡулланылған йола, ҡанун булған. Уны тотмағандар, үтәмәгәндәр бәлә-ҡаза күргән, язаға тарттырылған. Табу, тыйыу вә аманаттар йыйымы әхлаҡи ҡанундар һымаҡ боронғо мифологияла, йәғни риүәйәттәрҙә, хикәйәттәрҙә сағылыш тапҡан.

Билдәле булыуынса, тыйыу Аллаһы Тәғәлә биргән әмер һәм уны боҙмау, асылдан тайпылмау фарыҙ. Дини хикәйәттәрҙә тасуирланыуынса, Һауа (Ева) йылан йәки иблис ҡотҡоһона әүрәп, Әҙәм уға эйәреп, ожмах баҡсаһында изгелекте һәм яуызлыҡты танып белеү ағасынан тыйылған емеште ҡаба. Аллаһы Тәғәлә әмерен боҙоу, яңылышыу Әҙәм менән Һауаны һәм бөтә кешелек донъяһын ыҙалыҡҡа, ауырлыҡҡа, бәхетһеҙлеккә төшөрә. Илаһ тарафынан яза бирелеп, Әҙәм ҡатыны менән ожмахтан ҡыуыла, үҙҙәре лә, нәҫелдәре лә тәғәмен, икмәген тиргә батып табырға дусар ҡылына, үлемһеҙлектән мәхрүм ителә. Шулай итеп, гонаһ ҡылыу әҙәм затының төп асылын, тәбиғәтен, булмышын үҙгәртә, йәғни кеше әхлаҡи йәһәттән Хоҙай яралтҡан өлгөһөн вә рәүешен юғалта. Илаһ юлынан тайпылыу, аҙыу бына шулай башлана. Тыйыуҙы изге һанамай, һанға һуҡмай эш ҡылыусылар, йолаларҙы, ғәҙәти ҡағиҙәләрҙе боҙоусылар тән йәки йән яфаларына дусар ителә.

Илаһ хасил иткәнде, ҡушҡанды баһаламау, һанламау, ҡәҙерләмәү - иң гонаһлы эш-ҡылыҡ, һис ҡасан ярамаған, ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған яҙыҡ. Боронғо йәһүд риүәйәтендә изге каста башы Аарондың улдары Надав менән Авиуд сакраль йөкләмәләрен үтәүҙең тәүге көнөндә үк Яхве Алланың уты менән ялмана. Сөнки улар серле ут ҡабыныуҙы көтмәйенсә, "ят ут"ты тоҡандыра. Аарон йәнә үгеҙ ҡыйфәтендә алтын тәре яһай һәм ботҡа табыныуға һалынған тыйыуҙы үтәмәй, шул арҡала Яхвеның нәфрәтен тыуҙыра, Моисейҙың яҡлауы арҡаһында ғына ҡотолоп ҡала.

Яхве илаһ тәүге бәйғәмбәр Моисей аша Синай тауында ун дини ҡанун, йәғни Хоҙай алдында инсандың (кешенен) тәртибен тәьмин иткән, холҡон көйләгән тыйыуҙар, әмерҙәр ебәрә. Быға тағы ла йола, әхлаҡ, хоҡуҡ сифатындағы байтаҡ ҡушыуҙар өҫтәлә. Был хоҡуҡи һәм этик нормалар дин, ғаилә, йәмәғәт, граждanлыҡ нигеҙҙәре һымаҡ ҡабул ителә: бер Аллаға табыныу, ғаилә, шәхес, йәмғиәт именлеге, ата-инә абруйы, ир-ҡатын, енси мөнәсәбәттәр әҙәбе...

**Сәлимйән БӘЗРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# ФӘН ЮЛЫ ЛА...

## мауыҡтырғыс һәм өмөтлө ул

**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Башта гәзит уҡыусыларҙы үҙегеҙ менән таныштырып, мауыҡтырғыс та, ауыр ҙа был юлды ни өсөн һайлауығыҙ тураһында һөйләп үтһәгеҙ ине, сөнки бөгөн йәштәр фәнгә бик ылығып бармай бит...**

- Мин үҙем уҡытыусылар ғаиләһенән. Әсәйем Вәсилә Миңнур ҡыҙы 36 йыл Белорет районы Сермән ауылының урта мәктәбендә математиканан уҡытты, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы. Үҙемдә уҡытмаһа ла, позитив энергетикаһын, һөҙөмтәгә эшләй торған ынтылышын миңә, улына, һеҙдерә алған. Атайым Вәкиф Хәсән улы оҙаҡ йылдар урындағы "Сельхозтехника" ойошмаһында эшләне. Ауыл хужалығы техникаһы моторҙарын ремонтлау буйынса ҡулы оҫта уның, эшләп торған двигателдең тауышынан уҡ проблеманың нимәнән икәнен әйтә ала. Быны белгән кешеләр, ярҙам һорап, уға республикаһың ҡайһы ғына районынан килмәй. Атайым менән әсәйем хәҙер икеһе лә хаҡлы ялда инде.

Әсәйемдең нисек тырышып, ихласланып эшләгәненен күреп, уҡытыусы булыу теләге тыуҙы бала саҡта. Ул ваҡытта уҡытыусылар урындағы интеллигенция ҡатламын тәшкил иттеләр һәм ауылдың иң абруйлы кешеләре ине. Мәктәпте алтын миҙалға тамамланым. Университетта уҡығанда, өсөнсө курстан фән менән ҡыҙыҡһына башланым, проекттарҙа ҡатнаштым. Өсөнсө курстан һуң Себерҙә, Ҡағалымда, практика үттем. Бик оҡшаны. Скважина материалдары менән эшләргә, компьютер артында ултырып, анализ яһарға кәрәк ине. Дүртенсе курстан һуң да унда барғас, эшкә ҡалырға саҡырҙылар. Бишенсе курста вахта менән шунда эшләп йөрөнөм, дипломды ла шундағы эшем буйынса яҙҙым. Уҡыуҙы тамамлағас, үҙемдең эш тәжрибәмде күҙҙән үткәрҙем, күптән эшләп йөрөгән коллегаларым менән фекер алыштым. Күбеһе, үҙҙәре аспирантурала уҡығандар ҙа, эшләй башлағас, фәнгә ваҡыт етмәйәсәк, тинеләр. Үҙебеҙҙең геофизика кафедраһы етәксеһе Рим Абдулла улы Вәлиуллин менән дә һөйләштем. Ул аспирантураға уҡырға инергә, бер яҡшы проект өҫтөндә эш башларға кәңәш бирҙе. Шулай итеп, фәнгә тулыһынса бирелдем һәм бер ҡасан да үкенгәнем юҡ.

**➔ Нимә ул геофизика, уның геология, тау сәнәғәте, нефть һәм газ тармаҡтары өсөн әһәмиәте ниҙә?**

- Геофизика - Ер шарын төпкә үтеп инеп тикшергән фәндәрҙең береһе ул. Уның алымдары күп һәм һәр ҡайһыһы фәҡәт физика закондарына нигеҙләнә. Ғәмәли фән булараҡ, геофизика ер аҫтындағы физик ҡырҙарҙы (физические поля) күҙәтеү, тау тоҡомдарының составын, уларҙың барлыҡҡа килеү тарихын һәм шарттарын билдәләү мөмкинлеген бирә. Беҙҙең институт промысла геофизикаһы, йәғни нефть һәм газ ятҡылыҡтарын эҙләү һәм уларҙы үҙләштереү, тәбиғәткә зыян килтереүҙе иҫкәртеү маҡсатында углеводород ятҡылыҡтарын эшкәртеүҙе контролдә тотоу буйынса махсуслашҡан. Ғәҙәттә, геофизика - нефть һәм газ тармаҡтарының күҙе һәм ҡолағы, тиҙәр. Был ысынлап та шулай. Геофизиктар үҙҙәренең күп датчиклы махсус приборҙарын 5 километрға тиклем тәрәнлеккә еткән скважинаға төшөрә һәм ер аҫты ҡатламдарының физик параметрҙарын - тау тоҡомдары ҡаршылығын, ундағы баҫымды, температураны, тығыҙлыҡты һәм башҡа күрһәткестәрҙе үлсәй. Һуңынан, компьютерҙа "Прайм" тип аталған махсус программа ярҙамында алынған мәғлүмәттәрҙе анализлай һәм тау тоҡомдарында нефть һәм газ миҡдары, скважинаға шыйыҡсаларҙың килеү интервалдары һәм уларҙың килеү тиҙлеге, торбалар герметиклығының боҙолоу аралығы билдәләнә. Әйткәндәй, "Прайм" - беҙҙең геофизика кафедраһы эшләгән программа. Уны хәҙер Рәсәйҙәге бөтә нефть компаниялары ҡуллана һәм ул беҙҙең ғорурлығыбыҙ булып тора.

**➔ Әлеге көндә геофизикаға ҡағылышлы ниндәй проблемалар өҫтөндә эшләйһегеҙ? Һеҙҙең кафедра (институт) тәҡдим иткән асыштар, яңы технологик алымдар производствола ҡулланыламы?**

- "Прайм" программаһы тураһында әйтеп үттем инде. Бөгөнгө көндә беҙҙең институттың геофизика кафедраһында алып барылған төп эҙләнеүҙәр цементтың герметиклығы боҙолоу интервалдарын билдәләүгә ҡағыла. Скважина тәҙөгәндә, торба скважинаға төшкәс, ул мотлаҡ тышҡы яҡтан цемент менән ҡатырыла. Ваҡыт үтеү менән был тышлыҡ ҡаҡшай һәм ярыҡтар барлыҡҡа килә. Улар аша производствола ҡулланылған ныҡ минералланған иҙмә тау тоҡомдарына үтеп инеүе, ер аҫты һыуҙарын бысратыуы ихтимал. Экология күҙлегенән ҡарағанда, был - үтә киҫкен проблема. Барлыҡҡа килгән ярыҡтарҙы (каналдарҙы) билдәләүе ауыр, сөнки улар, ғәмәлдә, бик ваҡ була. Термометрияның киң таралған ысулы - төрлө эш режимында скважина эсендә температураны үлсәү. Үкенескә ҡаршы, уның ярҙамында күрһәтелгән проблеманы һәр ваҡытта ла хәл итеп булмай. Ошоно иҫәпкә алып, геофизика кафедраһында әүҙем термометрияның бөтөнләй яңы ысулын уйлап таптыҡ. Уның идеяһы шунда: индукцион йылытҡыс ярҙамында скважина яһалма йылытыла һәм температура датчиктары ярҙамында уның нисек таралыуы күҙәтелә. Яңы алым колонна герметиклығының боҙолоуын юғары һөҙөмтә менән билдәләргә мөмкинлек бирә. Ә мин үҙем алып барған эҙләнеүҙәрҙең төп өлкәһе - ул симуляторҙар ярҙамында скважинаның цифрлы өлгөһөн эшләү. Беҙ термосимуляторҙар программаларын эшләйбеҙ. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, күп фазалы ағымдар булғанда скважинала теркәлгән температура мәғлүмәттәрен тәрәнерәк анализлау өсөн инструменттар булдырабыҙ. Ә ни өсөн тап температура һуң? Сөнки, табиптар кешегә диагноз ҡуйған кеүек, скважиналағы температуранан сығып, ремонт талап ителгән проблемалы урындарҙы билдәләргә мөмкин. Беҙҙең ғилми төркөм эшләгән термосимуляторҙар хәҙер Рәсәйҙең күп кенә геофизика компанияларында һәм хатта сит илдәрҙә ҡулланыла.

**➔ Һеҙ фән кандидаты. Докторлыҡ диссертацияны хыялығыҙҙа ғынамы, әллә уның өҫтөндә эш башланғанһығыҙмы?**

- Әлеге ваҡытта докторантураға уҡырға индем. Алдағы өс йылда, диссертация яҙып, уны яҡларға тейешмен, Алла бирһә. Термогидродинамика процестарын өйрәнәм. Шулай уҡ скважиналарҙың һәм ҡатламдарҙың торошон диагностикалау, скважиналарҙың эшләүе буйынса мәғлүмәттәрҙең сифатын яҡшыртыу, һөҙөмтәлә углеводород ятҡылыҡтарын тулыраҡ эшкәртеү мәсьәләләрен хәл итеүҙә ярҙамға килгән күп фазалы ағымдар йылылығы яланғарының фазалы кусеүҙәрен тикшерәм.

**➔ Оҙаҡламай юғары уҡыу йорттары абитуриенттар өсөн үҙ ишектәрен аса, ҡабул итеү кампанияны башлана. Һеҙ етәкләгән Өфө фән һәм технологиялар университетының Физика-техник институты йәштәрҙе нимәһе менән ылыҡтыра ала?**

- Беҙҙең институт нефть һәм газ тармағы, электроника һәм наноэлектроника, наноматериалдар, мәғлүмәттәрҙе һаҡлау өсөн магнит һәм электр күренештәре өлкәләрендә инженер кадрҙары әҙерләй. Бакалавриат һәм специальность программалары буйынса ҡабул итәбеҙ. Институтта петрофизикала цифрлы технологиялар буйынса "РН-БашНИПИнефть" ғилми-тикшереү һәм проектлау институтының база кафедраһы бар. Уның нигеҙендә магистранттар әҙерләнә, улар уҡыуҙың тәүге көндәренән үк был ойошмала эшләй башлай. Һуңғы йылдарҙа индустриаль партнерҙар менән берлектә яҡшы йыһазландырылған яңы ғилми һәм уҡыу лабораториялары асыла. Беҙҙең уҡытыусылар промысла геофизикаһы, нефть ҡатламы физикаһы, электроника, наноматериалдар өлкәһендә танылған эксперттар булып тора. Яңы фәнни йүнәлештәр өлкәһендә сит ил компаниялары менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ.

**➔ Ғалим булыу өсөн ниндәй сифаттар мөһим? Фән юлынан китергә теләгән йәштәргә әйтер һүҙегеҙ...**

- Минеңсә, фән юлынан китеү өсөн тырыш, ихлас булырға, киң фекерләй белергә, белем кимәленде даими күтәрергә кәрәк. Барыбер бер нәмә лә сығарып булмаҫ, тип ҡурҡырға ярамай. Фәндә лә яҡшы аҡса эшләргә мөмкин икәнен онотмағыҙ. Иң мөһиме, беҙҙең Башҡортостанда үҫеш өсөн мөмкинлектәр бик киң. Сит илдә стажировка үтеү, коллегалар менән тәжрибә уртаҡлашыу өсөн бөтә шарттар булдырылған. Грант конкурстары аша төрлө проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеге бар, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу буйынса программалар эшләй. Мин үҙем Башҡортостан Башлығы грантын оттом. Йәш ғалимдарға һәм белгестәргә ярҙам итеү, уларҙың инновацион идеяларын үҫтереүгә һәм бәләкәй инновацион предприятиелар булдырыуҙы дәртләндереүгә йүнәлтелгән "Йәштәр ғилми-инновацион конкурсында ҡатнашыусы" ("УМНИК") һәм яңы тауар, технологиялар һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген үҫтереүгә ынтылыусы бәләкәй инновацион предприятие булдырыуға булышлыҡ иткән "Старт" федераль программалар гранттарын алыуға өлгәштем. Хәҙер Рәсәй халыҡ фронты фонды тарафынан финансланған йәш ғалимдар өсөн ғилми проект етәксеһе булып торам. Шуға күрә, ышаныс менән әйтә алам: әгәр фән юлынан китеү, уны үҫтереүгә бәләкәй генә булһа ла өлөш индереү тураһында уйлайһығыҙ икән, икеләнмәгеҙ. Әгәр ғаиләлә һинең ынтылыштарыңды аңлап ҡабул итһәләр, уңыш һис шикһеҙ урап үтмәйәсәк. Был йәһәттән мин айырыуса бәхетле - ҡатыным Айзилә Рәсүл ҡыҙы менән университетта бергә эшләйбеҙ. Ул - филология фәндәре кандидаты, төрлө структуралы телдәрҙең, атап әйткәндә, инглиз, рус һәм башҡорт телдәренең, сағыштырма филологияһы мәсьәләләре менән шөғөлләнә.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *"Буйы ике аршин да дүрт ая ярым, сәсе ҡара, күҙҙәре ҡара. Һул яҡ яңағында яра эҙе, сыбыртҡы менән туҡмалған, танау япраҡтары өҙгөләнгән, маңлайында һәм яңаҡтарында указ тамғалары һалынған".*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# САЛАУАТ БАТЫРЫБЫҘҘЫҢ...

## ысын йөҙ-ҡиәфәте нисек булған?

**Башҡорт халҡының ғәҙәттән тыш ижади, интеллектуаль һәм ойошторою һәләттәренә эйә легендар улы Салауат Юлаев образы XIX быуаттан алып беҙҙең көндәргә тиклем Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың яҙыусылары, хронистары, музыканттары, композиторҙары, рәссамдары, скульпторҙары һәм башҡа ижади интеллигенция вәкилдәренең иғтибарын биләне һәм биләүен дауам итә. Билдәле тарихсы-антрополог Ринат ЙОСОПОВты, мәҫәлән, батырҙың антропологик тибы, йөҙ һыҙаттары ҡыҙыҡһындыра торғайны һәм тере сағында ул был туралағы мәҡәләһен беҙҙең гәзиткә тәҡдим иткәйне. Гәзитебеҙҙә 2005 йылда баҫылған ошо мәҡәләне гәзит уҡыусыларға яңынан уҡып сығырға кәңәш итәбеҙ.**



Рәссамдар А.П. Лежнев, А.Д. Гончаров, П.М. Марков, М.Н. Арыҫланов, Ғ. Ш. Имашева, Г.С. Мостафин һәм башҡаларҙың танылған картиналарында һәм полотноларында милли геройыбыҙҙың образы төрлө композицияла бирелә. Ул һүрәттәрҙә Салауат Юлаев бер төрлө түгел, һәр береһендә батыр һыны үҙенсәлеклеге һәм эске энергияһының сағылышы менән айырылып тора. Совет скульпторы И.Г. Фрих-Харҙың 1925 йылда уҡ яһаған тәүге скульптура портреты - Салауаттың ағас бюсы бөгөнгө көндә Өфөлә М.В. Нестеров исемендәге Башҡортостан дәүләт художество музейында һаҡлана. Т.П. Нечаева 1946 йылда Салауат Юлаевтың скульптура портретын яһай, ул бронзанан ҡойолоп, 1952 йылда - Өфөлә, 1955 йылда Салауат ҡалаһында һәм Салауаттың тыуған яғы Малаяҙҙа ҡуйыла. 1989 йылда Салауат Юлаевтың бюсы герой һуңғы 25 йыл ғүмерен үткәргән Палдиски ҡалаһында ҡуйыла.

Салауат Юлаевтың С.Д. Тавасиев эшләгән һәм 1967 йылда Ағиҙелдең уң яҡ ярына ҡуйылған атҡа атланған скульптураһы иң мөһим һәм иң ҙур ижад емеше булып тора. Был ат скульптураһы Рәсәйҙә иң ҙурҙарҙан һанала. Постамент менән бергә уның дөйөм бейеклеге 20 метрға яҡын, ә ауырлығы - 40 тонна. С.Д. Тавасиев Салауат образын көс һәм энергияһы ташып торған, азатлыҡ һөйөүсе ярһыу яугир һәм батыр итеп һүрәтләй алған. С. Тавасиев батырыбыҙҙы туран тибындағы башҡорттар араһында киң таралған һыҙаттар менән һынландырған. Был тип, билдәле булыуынса, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында йышыраҡ осрай. Сығышы менән Төньяҡ Осетиянан булған С.Д. Тавасиев нисек башҡорттарҙың төньяҡ-көнсығыш төркөмгә хас антропологик һыҙаттарын шулай күләмле һәм аныҡ итеп Салауат Юлаев ҡиәфәтенә күсерә алған һуң? Ғөмүмән, өс скульпторҙың, йәғни И.Г. Фрих-Хар, Т.П. Нечаева һәм С.Д. Тавасиевтың бер антропологик типҡа ҡараған герой образын нисек тыуҙырыуы шулай уҡ сер булып ҡала. Ихтимал, улар Салауаттың тыуған яғына барып, уның яҡташтары менән осрашҡандыр.

Ысынында иһә, ниндәй булған һуң беҙҙең батыр Салауатыбыҙ? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә беҙ был турала бер нәмә лә белә алмайбыҙ, сөнки М.М. Герасимовтың ысулын файҙаланып, баш һөйәктәренә ҡарап, йөҙөн тоҫмаллар инең дә, әммә беҙҙең ҡулда һөлдәһе юҡ (ә шулай ҙа беҙ, бер аҙ тырышлыҡ һалғанда, батырыбыҙҙың һөлдәһен таба алыр инек һымаҡ. Салауатыбыҙ тарихын өйрәнеүсе ғалимә И. Гвоздикова әйтеүенсә, Эстониянан беҙҙең бер диңгеҙ офицеры Рогервикта мосолманса ерләнгән ике кешенең һөлдәһе табылыуы тураһында 90-сы йылдар башында уға хәбәр иткән. Ләкин ул саҡта Балтик буйы илдәрендә СССР-ҙан айырылып сығыу менән бәйле сәйәси ваҡиғалар ҡуйырған ваҡыт була, шунлыҡтан был хәбәр иғтибарһыҙ ҡала). Емельян Пугачевтың образын тере сағында XVIII быуатта төшөрөлгән бер нисә картинаға ҡарап, күҙ алдына килтерә алабыҙ. Өфө провинция канцелярияһында каторжниктарҙы Балтик буйына, Рогервик портына, оҙатыр алдынан төҙөлгән "Именной опись"-та Салауат тураһында бер нисә генә юл яҙылған булған: "Буйы ике аршин да дүрт ая ярым, сәсе ҡара, күҙҙәре ҡара. Һул яҡ яңағында яра эҙе, сыбыртҡы менән туҡмалған, танау япраҡтары өҙгөләнгән, маңлайында һәм яңаҡтарында указ тамғалары һалынған". Уның тышҡы йөҙө бына шулай ғына һүрәтләнә.

Уҙған быуатта төрлө антропологтар, шул иҫәптән ошо юлдар авторы тарафынан төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында үткәрелгән антропологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен файҙаланып, Салауат Юлаевтың тышҡы йөҙөн яҡынса күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Салауат Юлаевтың һәм уның ата-әсәһенең тыуған һәм йәшәгән урыны хәҙер бер кемдә лә шик тыуҙырмай. Салауат 1754 йылда Өфө провинцияһы Себер юлы Шайтан-Көҙәй улысының Тәкәй ауылында тыуған. Хәҙерге ваҡытта был - Башҡортостандың Салауат районы территорияһы. Уның атаһы Юлай Аҙналин ошо Шайтан-Көҙәй улысының старшинаһы һәм үҙ ырыуының данлыҡлы бейе, рус армияһы составында хәрби походтарҙа, шул иҫәптән 1772 йылда поляк конфедераттарын баҫтырыуҙа ҡатнашыусы булараҡ билдәле булған.

**Тарихсы-антрополог**
**Ринат ЙОСОПОВ**
**яҙмаларынан.**

**(Дауамы бар.)**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Тупаҡайҙар ҡиммәтле тиреле йәнлектәргә, бигерәк тә тейенгә, һунар итеү өсөн ҡулланыла. Ҙур йәнлектәр өсөн уҡтар, лавр япрағы (лавролистная) һәм ромб формаһындағы тимер һөңгөләр файҙаланылған. Осло һөйәктән яһалған уҡтар ҙа булған. Башҡорттарҙың хәрби әҙернәһе һунар өсөн ҡулланылған йәйәнән бер аҙ айырылып торған. Ул һәр ваҡыт ике төрлө ағастан яһалған пластиналарҙы йәбештереп эшләнгән, эске яҡтан, ныҡлыҡ өсөн, буйынан-буйына мөгөҙ пластина, ә тыштан, дым тартмаһын өсөн туҙ йәбештерелә. Әҙернәнең оҙонлоғо бер метр була, ул ныҡ итеп бөгөлә, остары ҡайтарылып ҡуйыла, бик һығылмалы (һүрәт). Кереше нигеҙҙә ебәк-тән эшләнә. Әҙернә күн һаҙаҡта һаҡлана һәм походтарға ла биҙәге баҫып төшөрөлгән (соҡоп, ҡалҡытып) йәки сүкеп эшләнгән көмөш биҙәкле тимер ҡашлы һаҙаҡта йөрөтөлә (һүрәт).



Башҡорттарҙың хәрби уҡтары һунар уҡтарынан уҡ башаҡтарының формаһы менән айырылып торған (һүрәт). Һәр һаҙаҡҡа 16-25 дана уҡ һыйған.

Формалары буйынса уҡ-һаҙаҡтар дөйөм азиат тибында була: күн менән тышланған ағас каркаслы. Күн йәки буҫтау ептәр ярҙамында ул бер нисә бүлеккә бүленә. Уҡтар һәр ваҡыт уҡ-һаҙаҡҡа осло башы менән аҫҡа ҡаратып һалына. Һаҙаҡ кеүек үк, уҡ-һаҙаҡтар бик йыш көмөш биҙәк менән ҡапланған тимер пластиналар йәки ҡаштар менән биҙәлә.

Башҡорттарҙың ҡоралдары хаҡында һүҙ барғас, һөңгө, киҫтән һәм һайман (кольчуга) тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк.

Тимер һөңгөләр оҙон һапҡа ултыртылған. Хәрби ҡорал сифатында үҙенсәлекле киҫтән - оҙон һапҡа ҡыҫҡа сынйыр ярҙамында нығытылған тимер шар - ҡулланылған. Шундай киҫтәндәрҙе миңә күп тапҡырҙар башҡорттарҙа "кәрәк булыуы ихтимал" тип төнөн юлға сыҡҡанда, "кәрәге тейер" тип өйҙә тотҡандарын күргәнем булды.

Башҡорттарҙа һаҡланыу ҡоралы булып тимер күлдәктәр - һайман - һәм ҡуяҡтар (буҫтауға ҡойолған тимер пластиналар нығытылған кейем) торған.

Борон башҡорттарҙың ҡоралы саҡматашлы булһа, XIX быуаттың икенсе яртыһынан алып уларҙы пистонлы ҡоралдар алмаштыра, берданкалар ҙа күренә башлай. Ҡорал кәрәк-ярағы ла үҙенсәлеге менән айырылып торған (һүрәт). Ҡулбаш аша кейелгән ҡайышта һунарсының һәр саҡ кәзә йәки һыйыр мөгөҙөнән эшләнгән ҡотоҡсаһы (дары һауыты), күн тоҡсай йәки мөгөҙҙән яһалған дроб һауыты, мөгөҙҙән эшләнгән йәки күндән тегелгән пистон һауыты, һөйәктән яһалған дары һәм дроб үлсәгесе, йәҙрә өсөн айырым күн һауыт йәки туҡыманан тегелгән патронды, зарядты тығыҙлағысы йөрөгән.

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН

## Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



Әммә Мертвагондың XVIII быуаттағы ер тураһындағы закондарға характеристикаһында ҡайһы бер тап килмәүҙәр осрай. Билдәле булыуынса, яңы хөкүмәт курсы 1735-1736 йылдарҙа башлана. Бынан тыш, башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғы 1664, 1790 һәм 1793 йылғы указдар менән раҫлана, ә 1661 һәм 1791 йылдарҙағы менән түгел, тип иҫәпләй документты төҙөүсе. Мертвагондың, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары хөкүмәттең уларҙың еренә һөжүм итеүенә булышлыҡ итте, тигән фекере менән килешеп булмай. Киреһенсә, тап батша хакимиәтенең башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын боҙоуы халыҡтың ҡорал күтәреп ҡаршы сығыуына килтерҙе. 1649 йылғы Собор Уложениеһы (Закондар йыйылмаһы) башҡорт аҫабаларының ергә хоҡуҡтарын сикләне: ерҙе һатыу тыйылды, уны арендалау сроктары кәметелде. Был закон XVII-XVIII йылғы ихтилалдар башланғанға тиклем үк ғәмәлгә индерелде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был документ Башҡортостанда ер мөнәсәбәттәре проблемаларын анализлауға арналған. Унда ҡайһы бер аныҡ хаталар ебәрелеүгә ҡарамаҫтан, тотош алғанда, ваҡиғалар барышы объектив һүрәтләнгән. Автор хөкүмәт курсындағы ике ҡапма-ҡаршы тенденцияны күрһәтә алған: бер яҡтан, төбәкте аҡрынлап колониялаштырыуға йүнәлеш, икенсе яҡтан, башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын өлөшләтә күҙәтеү. Ғөмүмән, Мертвагондың материалдары Башҡортостанда батша властары алып барған ер сәйәсәте тарихы буйынса мөһим сығанаҡ булып тора.**

**Ирек АҠМАНОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

**(Дауамы. Башы 22-се һанда).**

✓ ***Ир-егет - кешелектең көслө заты. Әммә бөгөнгө донъя, заман уны сүктерҙе, кәрен алды. Лидерҙар аҙ, арҙаҡлы династиялар башларҙай милләт ағалары, остаз-аҡһаҡалдар һирәк.***



**Был бәхәс тыуҙырыр, уйланырға мәжбүр итер яҙмаларҙың авторы Айбулат Алик улы УРАҘБАХТИН сығышы менән Учалы районының Уральск ҡасабаһынан. Башҡорт дәүләт аграр университетын, Президент программаһы сиктәрендә ойошторолған етәкселәрҙең белемен үҫтереү һәм камиллаштырыу буйынса "Кризисҡа ҡаршы идарасы" федераль курсын тамамлаған. Шул мәлдән "Идара" ғәмәли фәнен ентекле өйрәнә. Эшҡыуар һәм коуч, йәғни маҡсаттар ҡуйырға һәм уларға өлгәшергә, тормошта баланс табырға өйрәткән, үҫеш йүнәлеше өҫтөнлөктәрен билдәләргә, карьера үҫешенә ярҙам иткән шәхси консультант. Ҡатыны Юлиә Сәлих ҡыҙы менән өс балаға ғүмер биргәндәр. Улар хәҙер - өләсәй-картатай ҙа инде. "Кеше, тормошондағы ҡатмарлы хәлдәрҙе күңеле аша кисереп, уйлана башлай икән, ул рухи үҫешенең тәүге аҙымын яһай. Тик шул саҡта туҡтап ҡалмаҫҡа кәрәк. Үҙ өҫтөндә эшләй башлаған һәр кем иһә артабан үҙ юлын үҙе һайлай. Был дингә килеү, эзотерика тәғлимәтен, психологияны өйрәнеү һәм башҡа зиһен үҫтереү өлкәһе булыуы ихтимал. Уларҙың бөтәһе лә бер һөҙөмтәгә килтерә - кеше Аллаһ Тәғәләнең барлығына, берлегенә инана башлай. Хатта ҙур асыштар эшләгән ғалимдар ҙа һуңғы сиктә Бөйөк Аҡылдың булыуына инана. Бер ваҡытта ла ҡыҙыҡһыныуҙан туҡтамағыҙ, үҙ юлын тапҡан бәхетле кешеләр менән аралашығыҙ, тартынмай һорауҙар бирегеҙ, эҙләнегеҙ!" - тип мөрәжәғәт итә ул "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға һәм түбәндәге яҙмаларын тәҡдим итә. Улар кемдәлер бәхәс, шулай уҡ үҙенсәлекле һығымта, фекер тыуҙырһа, рәхим итегеҙ, хаттар көтәбеҙ.**

# КЕМ УЛ



***Ир-егеттең көсө һәм көсһеҙлегенең төп сәбәптәренең береһе - уның туҡланыу үҙенсәлеге. Нимә ашайбыҙ, шул йоға беҙгә. Туҡланыу - ул тәрбиә төшөнсәһе, сөнки уның нигеҙендә Мәғлүмәт ята. Ниндәй мәғлүмәт алабыҙ, ул беҙҙең аңға нисек тәьҫир итә, шуның буйынса йәшәйбеҙ ҙә инде. Ашаған ризығы - көслө заттың (тик уныҡы ғына түгел, әлбиттә) аңына тәҫир иткән ҡеүәтле инструменттарҙың береһе ул. Аҙыҡ-түлек беҙҙең энергияны емерергә лә, булдырырға ла һәләтле, һаулыҡ йә сир, ҡурҡыу йә ҡаһарманлыҡ сығанағы ла булып тора.***

## Уңайлы шарттар улар өсөн түгел

Дубайға нигеҙ һалыусы Шәйех Рәшидтән иленең киләсәге хаҡында һорағастар, ул: "Минең ҡартатайым дөйәлә йөрөгән, атайым да дөйәлә йөрөгән. Ә мин - "Мерседес"-та, улым - "Ленд Ровер"ҙа, ейәнем дә "Ленд Ровер" йөрөтә. Әммә бүләм дөйәлә йөрөйәсәк... Ауыр замандар көслө кешеләрҙе тыуҙыра. Көсһөҙ кешеләр ауыр замандарҙың сәбәпсеһе була", - тип яуаплаған. Был һүҙҙәр минең ир-егеттәр тураһындаһы яҙмаларымдың инеш һүҙе булыр...

Ир-егет, ир, атай, ағай, ҡусты... Кешелектең көслө заты. Әммә бөгөнгө донъя, заман уны сүктерҙе, кәрен алды. Лидерҙар аҙ, арҙаҡлы династиялар башларҙай милләт ағалары, остаз-аҡһаҡалдар һирәк. Үҙ сиратында ирҙәрҙең, ир затының көсһөҙлөгө йәмғиәтте деградация процестарына этәрә һәм көрсөккә килтергән хәл-ваҡиғалар тыуҙыра. Нишләп шулай һуң?

Был ирҙәрҙең аңы (психологияһы) менән бәйле. Психологтар, шулай уҡ аҡыл эйәләре белдереүенсә, ирҙәр һәм ҡатындар холҡо ныҡ айырыла. Уңайлы мөхиттә, тормош шарттарында көслө заттың баш мейеһенең, ҡағиҙә булараҡ, тойғо яғы (мейенең уң ярымшары) "ҡабына", ә аң яғы (һул ярымшары), киреһенсә, "һүнә". Хис-тойғоға бирелгән ир-ат бәйһеҙләнә, түбәгә төкөрөп ятыуҙы хуп күрә, эсеү менән мауыға, тәмәке тарта, ситтән ләззәт эҙләй, ҡатын-ҡыҙҙар менән сыуала. Был күҙгә күренгәндәрҙең өҫтө генә. Шулай итеп, рухи көстө, ғаиләне, милләтте, илде һаҡлаусыны, ҡурсалаусыны һынландырған ир заты бөгөнгө ысынбарлыҡ шарттарында "үлеүгә" табан ынғайлаған.

"Үлеү" һүҙен физик үлем менән бутарға ярамай, бында һүҙ Аллаһ Тәғәлә тарафынан көслө затҡа бирелгән ир-егетлек, аскетлыҡ, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ, ҡыйыулыҡ кеүек сифаттарҙы юғалтыуы тураһында бара. ***Яңы быуын малайҙарын "заманса тәрбиәләү" киләсәк ирҙәрен күпселек осраҡта ғаиләлә икенсел ролдә булған, үҙ ҡатынының "үксәһе аҫтында" ғына йөрөгән ҡурҡаҡ характерлы маҡсатһыҙ, һыҡмыр, тар күңелле һәм көнсөл кеше итеп әүәләй. Шул рәүешле улар, ирлек асылын юғалтып, ҡатын-ҡыҙға өҫтөнлөк бирә һәм матриархатҡа юл аса. Ә матриархаттың төп сифаттарының береһе - техноген цивилизация, йәғни уңайлы мөхит булдырыу (нәҫелде дауам итеүгә бәйле әсәлек энергияһы һәр саҡ шуға йүнәлтелә). Һөҙөмтәлә был цивилизацияны үҫтереүгә түгел, ә, киреһенсә, юҡ итеүгә килтерә.*** Александр Пушкин үҙенең "Балыҡсы һәм балыҡ" әкиәтендә лә ошо хаҡта әйтә. "Ҡарт менән ҡарсыҡ диңгеҙ буйында йәшәгән, ти"... Әкиәттең контексынан күреүебеҙсә, бабай әбейенең теләгенә ҡаршы килә алмай, уның сикһеҙ матди байлыҡ көсәүе һөҙөмтәһендә кире ярлы тормошҡа - "ярыҡ ялғашҡа" ҡайталар. Мосолмандарҙың, насранизарҙың дини китаптарында ла (Ахыры заман), Вед сығанаҡтарында ла (Кали юга) был хаҡта әйтелгән.

## Ризыҡ менән мәғлүмәт ейәбеҙ

Тормошта һәр нәмәнең үҙ сәбәбе бар. Матди нигеҙҙә ҡоролған цивилизация билдәле бер мәлдә ныҡ күтәрелә, үҫештең юғары кимәленә, апогеяһына етә һәм емерелә. Был процесс Ваҡыт законына бәйле. Әлеге мәҡәләмдә иһә мин ир-егеттәр деградацияһы сәбәптәрен һәм унан сығыу юлдарын асыҡларға теләйем. "Тормош лабиринты"нда һәр саҡ сығыу юлы бар, әммә уны белем, үҙ тәбиғәтең серҙәренә үтеп инеү һәм алған ғилемеңде ғәмәлләштереү аша ғына табырға мөмкин.

Теория кимәлендә бер нәмәне лә үҙгәртеп булмай, уны тормошҡа ашырыу зарур. Әйтәйек, математика фәнендә ҡабатлау таблицаһын, ҡағиҙәләрҙе, формулаларҙы мәсьәлә сискәндә ҡулланған кеүек. Әгәр үҙ-үҙеңде асыу юҫығында "тормошто аңлау теорияһы" ыңғай һөҙөмтә бирмәй икән, унан баш тарталар һәм хәҡиҡәтте эҙләүҙе дауам итәләр. Ғәмәлдә, Хәҡиҡәт бар ул. Тик уны танырға, аңларға теләгебеҙ бармы икән? Тапҡан һәм уны аңлаған хәлдә, Хәҡиҡәткә килешле була алырбыҙмы һуң?

***Ир-егеттең көсө һәм көсһеҙлегенең төп сәбәптәренең береһе - уның туҡланыу үҙенсәлеге. Нимә ашайбыҙ, шул йоға беҙгә. Туҡланыу - ул тәрбиә төшөнсәһе, сөнки уның нигеҙендә Мәғлүмәт ята. Ниндәй мәғлүмәт алабыҙ, ул беҙҙең аңға нисек тәьҫир итә, шуның буйынса йәшәйбеҙ ҙә инде. Ашаған ризығы - көслө заттың (тик уныҡы ғына түгел, әлбиттә) аңына тәҫир иткән ҡеүәтле инструменттарҙың береһе ул. Аҙыҡ-түлек беҙҙең энергияны емерергә лә, булдырырға ла һәләтле, һаулыҡ йә сир, ҡурҡыу йә ҡаһарманлыҡ сығанағы ла булып тора.***

## Ир-егет һәм ат

Халҡыбыҙҙа көслө затты Ир-ат тип йөрөтәләр. Был борондан килгән һүҙгә ҡушылған ялғау ғына түгел, әлбиттә. Ата-бабаларыбыҙ аңлы булған, "һүҙ-образ" ғилемен һәм уның кеше аңына нисек тәҫьир итеүен яҡшы белгәндәр.

Ир-ат - ир-егет һәм ат... Хәҙерге күҙлектән сығып ҡараһаң, ат - ул хәрәкәт итеү сараһы, транспорт. Шулай ҡабул итәбеҙ. Ысынында иһә, ат - ул мистик төшөнсә. Ә мистика һәр саҡ серле донъя менән бәйле. Боронғо сығанаҡтарҙан Аҡбуҙатты, Пегасты беләбеҙ. Тағы ла Кентавр тураһында ишеткәнебеҙ бар. Аҡбуҙат - аттар нәҫеле башы. Башҡорт халҡының ҡарһүҙендә "Йылҡы сыҡҡан" тигән төшөнсә бар, йәғни ошо тереклек "сыҡҡан", юктан бар булған урын. Аҡбуҙат - күктәрҙә осҡан, башҡа мөғжизәләр ҙә тыуҙырған тылсым көсөнә эйә ҡанатлы Толпар-ат. Уны Урал батырға Ҡояш ҡыҙы Һомай бүләк итә. Йыһанда тыуған һәм шунда үҫкән. Батыр халыҡ яҡлаусыһы дошмандарына ҡаршы ҡуйған ҡеүәтле илаһи көс символы ул. Тылсым эйәһе Аҡбуҙат утта янмай, һыуҙа батмай, тояҡтары менән тау емерә һәм диңгеҙҙәрҙе кисеп сыға.

Пегас та - ҡанатлы ат һәм Йыһан батырҙары дуҫы, атап әйткәндә, Беллерофонт менән Персейҙыҡы. Зевсҡа йәшен килтерә, тояғы ергә тейгән урындан инеш сығара. Атаһы Посейдон булһа ла, Пегас аҡыл алиһәһе Афина менән нығыраҡ бәйләнештә.

Кентавр ҡулына һөңгө тотоп һынландырыла, исеменең тәүге өлөшө грек теленән "сәнсеү, сабыу" мәғәнәһен бирә. Мифологияла, ҡағиҙә булараҡ, образдарға тәрән эске мәғәнә һалына. Шуға, уны ирҙәр башланғысы, ирҙәр көсө, түл йәйеү - аталандырыу көсө, тип ҡабул итергә мөмкин.

Башҡорттоң "атай" һүҙендә "ат" нигеҙ һәм көслө зат башланғысы мәғәнәһен бирә. "Атама" һүҙен алайыҡ. Ул - башланғыс та, килеп сығыуға аңлатма ла. "Ат" һүҙе ике төрлө мәғәнәлә йөрөй. Ат - дүрт тояҡлы йорт малы. Ат - атыу ҡоралы менән ҡайҙалыр тоҫҡап атыу, мәҫәлән, мылтыҡтан. Ата - орлоҡ ата, аталандыра. Бында ла ирҙәр көсө һәм башланғысы сағыла. Ат образы ла көстө, етеҙлекте, хәрәкәтте, маҡсатты һынландыра. Ошонан сығып, Кентавр, Кеше-ат һәм Ир-ат образдарын күҙ алдына килтерергә һәм уларҙың асылына төшөнөргә мөмкин.

Башҡорт халыҡ йыры "Азамат"та ("Әҙәм-ат"): "Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй, Ирегеткәй менән ат башы", - тип йырлана. Йырҙың һүҙҙәренән күреүебеҙсә, ир һәм ат - ике дуҫ йән. Улар бөтә ауырлыҡ-

**✓ Аҡыл эйәһе, тимәк, ысын ир-ат булыу - һәр ир-егеттең бурысы ул. Аҡыл эйәһе Абсолют Хәҡиҡәтте белә һәм тормошта ҡуллана. Аҡыл эйәһе - теоретик түгел, ә "тормоштоң мәғәнәһе нимәлә" тигән һорауға яуап белгән практик.**



# ИР-АТ?

Ир-ат, ир һәм ат, төшөнсәләренең тәрән мәғәнәһе хәҙер юғалған инде. Кешегә Аллаһ Тәғәлә яратҡан илаһи йән, тип ҡарамайбыҙ. Ат иһә менеп йә егеп йөрөүҙән дә бигерәк, ит ризығы сығанағы булып ҡалды. Быуаттар төпкөлөнә киткән кешенең тоғро дуҫы булған ат образы юҡҡа сыҡты, үҙ ашҡаҙаныбыҙҙы ғына уйлап, уны һуйыу һәм аҙыҡ сифатында файҙаланыуға тиклем түбәнселеккә төштөк. Ат иһә бер нисек тә ит була алмай. Ни өсөн улай һуң?

## Изге яҙмалар раҫлай

Изге Ҡөрьәндә ("Бал ҡорто сүрәһе", 5-8-се аят) "(5) Малдарҙы һеҙҙең файҙаға яралттыҡ. Ризыҡланыр өсөн дә. (6) Кисен аҙбарға япҡанда ла, иртәләрен көтөүгә ҡыуғанда ла һеҙҙең өсөн был малдарҙа матурлыҡ һәм ҡыуаныс бар. (7) Улар, һеҙҙең тауарҙарығыҙҙы төйәп, йыраҡ мәмләкәттәргә алып бара. Шик юҡ, Раббығыҙ ярлыҡаусы, миһырбан эйәһелер. (8) Атланып йөрөр өсөн, мәртәбәләр (тантаналар) өсөн аттарҙы, йөк ташыр хайуандарҙы (дөйәне) яралттыҡ. Һеҙ әлегә белмәгән башҡа бик күп нәмәләрҙе яралтырбыҙ", - тиелә

Изге китапта уларҙы боғаҙлағыҙ һәм ашағыҙ тигән мәғлүмәт юҡ. "Был малдарҙа матурлыҡ һәм ҡыуаныс бар", тип кенә яҙылған. Уларҙы ашау кинәнесе матурлыҡ була аламы ни? Хәҙистәрҙән белеүебеҙсә, Мөхәммәт (с.ғ.с.) етәкселегендә йыһат һуғышы мәлдәрендә генә сараһыҙлыҡтан мал һуйғандар. Башҡа ризыҡ булмағанда ғына тыйылғанды тәғәм иткәндәр.

тарҙы бергә, бер ынтылышта үтә. Шул рәүешле әҙәми зат - Ир, әҙәми зат - Атай йән дуҫы Ат менән бер бөтөн сүрәтендә бәйән ителә. Шулай уҡ славян, боронғо рус риүәйәттәрендә лә ат һәм ир бик яҡын, айырылғыһыҙ мөнәсәбәттә күрһәтелә.

Тәрәнгә төшөп, кеше һәм дүрт тояҡлы тере транспорт мәғәнәләренән айырылып, беҙ был образдар асылын барлыҡ нескәлектәрендә күрә лә алмайбыҙҙыр, бәлки. Ошо йәһәттән әлеге материал уйланыу өсөн киң мөмкинлектәр аса. Әлбиттә, мәҡәлә фәнгә нигеҙләнмәгән "иҫәр яҙмаһы" рәүешле ҡабул ителеүе лә ихтимал. ***Шул уҡ ваҡытта фән нимә ул һуң? Ул - кешенең үҙ аҡылы менән матди донъя серҙәрен асыуы һәм уны тормошон яҡшыртыу өсөн ҡулланыуы. Кеше үҙ аҡылы менән төп асылды - йәшерен асылды аңлай һәм уны көнитмештә ҡуллана икән, был үҙе үк фән. Йәшәйеш фәне.***

***Төрөктәр һәм ғәрәптәр йылҡы итен ашамай. Ҡайһы бер мәҙһәбтәр йылҡы итен мәхрүк тип иҫәпләй. Йәғни ул бөтөнләй тыйылмаһа ла, ашамау хәйерле. Был илдәрҙә ирҙәрҙең дәүләт, милләт, ғаилә лидерҙары булып тороуының сере ошонда ята, тип фаразларға ла урын ҡала.***

Әбдерәхман ибн Сәид Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән (с.ғ.с.): "Йәннәттә ат булырмы?" - тип һораған. "О, Әбдерәхман, Аллаһ Тәғәлә һине ожмахҡа индерһә, унда ике ҡанатлы ат булыр, һин унда йәнең теләгән ергә осоп ҡына барып етерһең", - тигән яуап ишеткән Унан (Ат-Табарани).

"Төнгө күсерелеш" сүрәһенең 36-сы аятында: "Үҙең белмәгән нәмәгә эйәрмә, сөнки ишетеүең, күреүең һәм йөрәгең яуапҡа тарттырыласаҡ", - тиелә. Ысынлап та, күп нәмәләр тураһында беҙҙең белемебеҙ бик аҙ. Шулай ҙа һәр йәһәттән үҙ фекеребеҙ бар. Ваҡыт үтеү, тормошто күреп-белеү, аҡыл ултырыу менән ул үҙгәрә бара, әлбиттә. Әйтәйек, йәш саҡта бер төрлө уйлаһаҡ, йылдар үтеү менән, тормош тәжрибәһенән сығып, яңылышыуыңды аңлайһың. Беҙ, мин-минлеккә барып, заман шауҡымына бирелеп, күп хаталар эшләйбеҙ. Үҙ тәжрибәбеҙҙән сығып түгел, ә кемгәлер эйәреп теге йәки был ғәмәлде атҡарабыҙ. Мәҫәлән, атай-әсәйебеҙ ашағанды ашайбыҙ, йәмғиәттә тыйылмаған араҡы эсемлектәрен ҡулланабыҙ, ҡайһы берәүҙәр наркоман да булып китә, сөнки был яман ғәҙәт йәштәр мөхитендә таралыу алған. Быны тормош асылы, Абсолют Хәҡиҡәт тип әйтеп буламы икән? Әллә был кешеләрҙең дөйөм яңылышыуымы?

Изге китаптарҙа ит ризығын ашауҙы сикләү тураһында әйтелә. Быны төбөнә төшөп аңлау зарур. Аңлы кеше һәр саҡ уйлана, тикшерә, күргән һәр нәмәһенә һуҡырҙарса ышанырға, шул ваҡытта уны һуҡырҙарса инҡар итергә лә тейеш түгел.

***Һәр тереклек Аллаһ Тәғәлә ҡөҙрәте менән донъяға яратылған. Ни кимәлдәлер малдың да аңы бар бит, уға ла ҡурҡыу, йәнен ҡурсалау, үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты хас. Һәр мәхлүк үҙенә тәғәйенде ейә - көйәш януармы ул, йыртҡысмы. Беҙҙең кеүек үк тоҡомон дауам итә, ашай, йоҡлай һәм беҙҙең кеүек үк бер ҙә үлгеһе килмәй. Шулай булғас, беҙ уларҙы ашарға хоҡуҡлымы?***

## Ит - йыртҡыстар аҙығы

"Ит" ("мясо") һүҙе "Мамса" санскрит *(боронғо һинд философияһы теле. Боронғо грек һәм латин телдәре менән бер рәттән, санскрит бөтә һинд-европа цивилизацияһы өсөн форма яһаусы булып тора)* һүҙенән алынған һәм ул "Һин-Мин", "Миңә оҡшаш" тип тәржемә ителә. Әлеге заманда ит төп ризыҡҡа әйләнеп алды. Боронғо Вед яҙмаларында, атап әйткәндә, "Ману-смрити" китабында (7.55): "Бында уның итен ашаған мине киләсәк донъяла ул ашар", - тип аңлаталар аҡыл эйәләре. Дөйөмләштереп әйткәндә, кешене улар мөмкин тиклем көс ҡулланмаҫҡа, йән ҡыймаҫҡа саҡыра.

***Ит бит йыртҡыстар аҙығы. Тимәк, беҙ йыртҡысҡа әйләнеп алғанбыҙ. Йыртҡыс энергияһы кешелә конкуренция, матди файҙа энергияһы хасил итә, эгоизм, һаранлыҡ, көнсөллөк тыуҙыра. Был энергияның нигеҙендә ҡурҡыу ята. Бына ошо тойғо йөрәгебеҙгә "оялаған". Нимәнәндер ҡурҡҡан кеше агрессив була. Санскрит телендә был һүҙбәйләнеш "ахимса принцибы" (ахимса - көс ҡулланмау) тип атала.***

Бөгөнгө тормошта ит өҫтәлгә ҡуйылған ҡәҙимге ризыҡ булып тора. Ә ит ашау иһә - йыртҡыс сүрәтенә инеү менән бер. Йыртҡыс асылы шулай кеше йәненә үтеп инә һәм уның эске энергияһын үҙгәртә. Нигеҙендә хәүеф, ҡурҡыу ятҡан үҙ-үҙен ҡурсалау инстинкты көсәйә һәм аҫҡы аңда агрессия тыуҙыра. Шуға ла хәҙерге донъя низағ майҙанына әйләнде, үҙ-ара ярҙамлашыу, мәрхәмәтлек кеүек сифаттар юғала бара. Эгоизм, ҡомһоҙлоҡ, көнләшеү киң тарала. Туғанлыҡ бәйләнештәре өҙөлә. Элек туғандар ҙур эште өмәләп эшләй ине, бөгөн атаәсәһе үлһә, ағайлы-ҡустылы, апайлы-һеңлеле мөлкәт бүлешеп талаша, дошманлашып бөтә. Өйҙәребеҙ тирәләй - бейек ҡоймалар, ишектәребеҙ - тимер, машиналарыбыҙға, ҡыуып алып китмәһендәр тип, үтә һиҙгер һаҡланыу сигналары ҡуябыҙ. Ошо рәүешле ҡурҡыу аша ҡарайбыҙ ваҡытлыса ғына килгән был фани донъяға. Беҙ матди донъяға ныҡ бәйлебеҙ, әммә рухи ҡиммәттәргә битарафбыҙ. Сөнки ашағаныбыҙҙың энергетик потенциалы емергес көскә эйә. Улар - эгоизм, сирҙәр, үлем...

## Хаталар өсөн "түләү" көтә

Кеше аң ғәйрәтенә, унан сығып, һайлап эш итеү, ҡарарға килеү мөмкинлегенә эйә. Һәр кем юлды үҙ аҡыл кимәленән, хәл-ваҡиғаларҙы нисек аңлауынан, фекерләү ҡеүәһенән йә иһә мин-минлегенән сығып һайлай. Ризыҡ - энергия сығанағы ғына түгел, ә тәм-том тойғоһо ағзаһы булған тел аша алған ләззәт тә. Тел, тойғо ағзаһы булараҡ, ҡеүәтле көскә эйә, уға баш булмайбыҙ һәм күп кенә ризыҡтан тыйылыр хәлебеҙ юҡ. Үҙебеҙҙе контролдә тота алмағас, аҡланып, иттең файҙаһы тураһында төрлө фараздар ҡорабыҙ, уны дәлилдәр менән нығытабыҙ. Эстән беҙҙең менән нимәлер идара итә, ҡапма-ҡаршы мәғлүмәттәр бирә түгелме? Был хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ юҡмы, хөрмәтле гәзит уҡыусылар? Хатта изге китаптарҙа бирелгәндәрҙе лә беҙгә ҡулай сүрәттә урын-еренә еткереп тәфсирләп ҡуялар. Ризыҡҡа ҡағылышлы бәхәсле мәл тыуа икән, ундай аҙыҡтан баш тартыу, мәсьәләне төплөрәк өйрәнеү хәйерлерәк бит.

***Ризыҡ - энергия сығанағы ғына түгел, ә тәм-том тойғоһо ағзаһы булған тел аша алған ләззәт тә. Тел, тойғо ағзаһы булараҡ, ҡеүәтле көскә эйә, уға баш булмайбыҙ һәм күп кенә ризыҡтан тыйылыр хәлебеҙ юҡ. Үҙебеҙҙе контролдә тота алмағас, аҡланып, иттең файҙаһы тураһында төрлө фараздар ҡорабыҙ, уны дәлилдәр менән нығытабыҙ. Эстән беҙҙең менән нимәлер идара итә, ҡапма-ҡаршы мәғлүмәттәр бирә түгелме? Был хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ юҡмы, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?***

Сөнки уға беҙҙең киләсәк бәйләнгән, хаталар өсөн ҡасан да булһа "түләргә" кәрәк буласаҡ. Тәбиғәттән кешегә ирекле һайлау бирелһә лә, Сәбәп-нәтижә ҡануны үҙ ғәмәлен элек тә, хәҙер ҙә, киләсәктә лә - бер ваҡытта ла туҡтатмаған һәм туҡтамаясаҡ та. Уның нигеҙендә беҙ үҙ ғәмәлдәребеҙ "уңыштар"ын йыябыҙ. Гиппократ әйткәнсә, "нимә ашайбыҙ - шунан хасилбыҙ" - әлеге ҡануныңдың ғәмәлләшеүе ошо ла инде. ***Кеше тәбиғәтенә тап килмәгән, тыйылған ит ризығы ашап, беҙ ныҡ хаталанабыҙ һәм уны яҙмышыбыҙға уябыҙ. Йылҡы ашап, беҙ юғарынан кешегә бирелгән рухи көстө, нәҫел көсөн, ир көсөн "үлтерәбеҙ". Ғәмәлдә, үҙ-үҙебеҙҙе "ашайбыҙ", "юҡ итәбеҙ" килеп сыға. Ҡурҡыу белмәҫ яугир-еңеүсенән беҙ һаран сауҙагәргә әүерелдек, кимәлебеҙҙе шулай төшөрҙөк. Йәмғиәттә яугир һәр саҡ сауҙагәрҙән юғары торған.***

## Аҡыл эйәһе бул

Ирҙәр заты хәҙер мөсһөҙ, психологик яҡтан да бик көсһөҙ. Рухи белем эстәмәйҙәр, уның менән ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа. Әлеге дәүер көслө заттары һаран һәм көнсөл, уйҙарында аҡса, матди байлыҡ ҡына. Тормошто ысын бәхет юҫығында үҙгәртеп ебәрерҙәй ысын ир-аттар һан яғынан бик аҙ. ***Күпселек матди ҡиммәттәр әсирлегендә, улар уйлап сығарылған, уға үҙҙәре һәм башҡалар ышынған ҡағиҙәләр ҡолона, "техноген батшалыҡтың хеҙмәткәренә" әүерелгән. Үҙҙәре ыҙаһын күргән эсеп-тартыу, самаһыҙ һыйланыу - күңел байлығы түбән ирҙең йәшәү асылы. Асылда, ул үҙен һәм тормошон көйләргә, бөтә яуаплылыҡты үҙ иңенә алырға мәжбүр булған ҡатынын да ыҙалата.*** Тирә-яҡҡа иғтибар менән күҙ һалығыҙ әле: бының уйҙырма түгел, ә ысынбарлыҡ икәнен күрерһегеҙ. Замана ҡатын-ҡыҙҙары ойошмалар һәм төрлө учреждениелар етәкселәре, хатта район биләмәһе башлыҡтары булып тора. Улар халыҡтың көндәлек проблемаларын хәл итә, көнкүрешен ойоштора. Лайыҡлы ирҙәр ҡайҙа һуң? Идара итеү бит һәр саҡ үҙеңә яуаплылыҡ алыу менән бәйле.

Был тормошта осраҡлы бер нәмә лә булмай, барыһы ла сәбәптәр һәм эҙемтәләр менән билдәләнә.

Аҡыл эйәһе, тимәк, ысын ир-ат булыу - һәр ир-егеттең бурысы ул. Аҡыл эйәһе Абсолют Хәҡиҡәтте белә һәм тормошта ҡуллана. Аҡыл эйәһе - теоретик түгел, ә "тормоштоң мәғәнәһе нимәлә" тигән һорауға яуап белгән практик. Ул - бәхет сығанағы һәм уны башҡаларға өләшеүсе. Аҡыл эйәһе - ул "матди матрица"ла йәшәп, эшләп йөрөһә лә, үҙ тормошоноң хужаһы, зиһене менән ирекле, асылын аҫҡан шәхес. Аҡыл эйәһе үҙ тормошо менән үҙе идара итә: һәр саҡ һаусәләмәт, сәбәп һәм нәтижәне яҡшы аңлай, йәш күренә һәм оҙон ғүмерле. Аҡыл эйәһе аскетизмды, мәрхәмәтлекте, дөрөҫлөктө һәм таҙалыҡты - туҡланыу таҙалығын, тән таҙалығын, аң һәм аҡыл, әҙәп таҙалығын һынландыра. Аҡыл эйәһе араҡы эсмәй, ит ашамай, һәр төрлө илерткес матдәләр ҡулланмай, никахһыҙ енси бәйләнешкә инмәй, ҡомарлы уйындар уйнамай. Аҡыл эйәһе үҙен үлемгә урын булмаған Аллаһ Тәғәлә булдырған мәңгелектең бер өлөшө итеп белә.

Ә беҙҙең аҡыл эйәһе кимәленә күтәрелгебеҙ килмәйме ни? Әллә йәшәү маҡсатыбыҙ ваҡытлыса булған матди байлыҡҡа йәбешеп ятыумы? ***Әйберҙәр кешегә ваҡытлыса ғына кәрәк. Улар аңды трансформациялау өсөн Аллаһ Тәғәләнең инструменты ғына булып тора. Әгәр үҙгәреш аша үтмәйһең икән, тормошоң көнләшеү, ҡомһоҙлоҡ, насар уй-тойғолар, уларға бәйле ауырыуҙар, насар мөнәсәбәттәр, ярлылыҡ һәм насар ғүмергә - үҙеңә бысраҡ табыусан "себен осоуына" тиң булыр. Трансформация аша үтмәгән йәмғиәттә глобаль көрсөктәр башлана: тәбиғәт катаклизмдары, эпидемиялар, һуғыштар.***

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Марианна әбей хат юлдарына күҙ һалды. Тоҡомбәтов Мырҙағол тигән ар-ат үҙенең Мәрйәм исемле апаһын эҙләй. Ләкин Марианнаның бер ниндәй ҙә ҡустыһы булманы. Ул әсәһенең яңғыҙ ҡыҙы ине.***



– Марианна, һиңә хат алып килгәндәр! - тип ҡысҡырҙы күршеһе Дилором әбей.

- Балаҡайҙарым яҙғандыр. Хәҙер ҡарармын. - Йорт эштәре менән булышҡан икенсе әбей күршеһенә ҡул ғына һелтәне. - Һалып тор шунда.

Дилором әбей ярһыбыраҡ өндәште.

- Ниндәй эш, ти тағы? Һиңә ул хатты ҡунаҡтар алып килде!

-Ҡунаҡтар? - Марианна әбей аптырап китте. Һыулы ҡулын таҫтамалға һөртә-һөртә ҡапҡа яғына ынғайланы. Ҡара төҫтәге еңел машина эргәһендә йәш кенә бер ҡыҙ һәм ҡалын кәүҙәле ир-ат баҫып тора ине.

- Дилором, кемдәр улар? - Ул һағая төштө.- Балаларым иҫән-һаумы икән?

Әбейҙең тауышы ҡалтырап сыҡты.

- Тыныслан! Былар хәбәрселәр. Дүшәнбенең үҙенән килгәндәр. Һуғыш йылдары балаларын эҙләйҙәр икән. Һин бит һуғыш осоро балаһы!

- Һуң, уныһы яңылыҡ түгел инде! Үҙеңә лә әллә нисә ҡат һөйләгәнем булды. Уға ҡалһа, һин дә һуғыш мәлендә тыуғанһың.

- Эйе, мине лә һуғыш осоро, тиергә була. Тик һинән өс йәшкә кесерәкмен бит. Шуғамы икән, минең менән ҡыҙыҡһынманылар. Һине генә һорашалар.

Марианна әбей ҡапҡаны асып, ҡунаҡтарға ҡулын болғаны.

- Тормағыҙ асыҡ урында, эҫе ҡабыр! Инегеҙ ихатаға!

Тегеләр менән күрешкәндән һуң, үҙе беренсе булып һорау бирҙе.

- Түңәрәк дата яҡынлашамы? Шундай саҡ етә башлаһа, беҙҙе иҫтәренә төшөрә торғандар. Ветерандар үлеп бөтөп бара... Ни хәл итәһең, ваҡыт бәреүҙе лә аямай. Һуғыш балалары беҙ ҙә ҡартайҙыҡ. Әле бер ер, әле икенсе ер һыҙлай.

- Һеҙгә зарланырға иртәрәк!

-Минең бабайым, Иосиф Егорович та һуғыш осоро балаһы ине. Мәрхүмкәй. Мине ҡалдырып киткәненә быйыл ете йыл тула. Ул минән өлкәнерәк булғас, һуғыш йылдарын яҡшы хәтерләй торғайны. Мин бик асыҡ хәтерләмәйем.

- Марианна Даяновна, һеҙ тыумышығыҙ менән ҡайһы яҡтыҡы?

- Ғүмер буйы Тажикстанда йәшәһәм дә, был яҡтыҡы түгелмен. Иосиф мәрхүмкәйем дә - минең кеүек килмешәк. Ул Белоруссия яғынан ине. Яҙмыш осраштыра, яҙмыш йөрөтә әҙәм балаларын. Беҙҙең ғүмер Тажикстанда үтте. Насар йәшәмәнек. Үкенерлек түгел.

- Марианна Даяновна, үҙегеҙҙең ҡайһы яҡтан икәнегеҙҙе әйтегеҙ?

- Рәсәйҙән инде, ҡайҙан булһын!

- Ҡайтҡанығыҙ юҡмы?

Марианна әбей иреҡәйгә аптырап ҡарап торҙо. Нимә кәрәк баш ҡаланан килеп төшкән был ҡунаҡҡа?

- Балалар йортона эләккәндә бишалты йәштәрҙә генә инем. Кемгә ҡайтайым мин? Етемдең кемгә хәжәте бар? Эҙләткән дә, һорашҡан да кеше булманы.

- Әгәр ҙә булһа? - тине шул саҡ ир-ат.

- Исемең кем, туғанҡай?

- Аркадий исемле, Дүшәнбенән....

Марианна әбей уны тыңлап бөтмәне.

- Бына нимә Аркадий! Ҡарттарҙың да тәрлөһө була, ләкин бөтәһе лә аҡылдан яҙған тип уйларға ярамай. Тураһын әйтегеҙ, һеҙгә нимә кәрәк был ҡарсыҡтан? Унан дүрт яғығыҙ ҡибла. Минең әле баҡсала эшем күп.

-Эйе, хәҙер мошенниктар ҙа етерлек, - тип һүҙгә ҡушылды Дилором әхирәте.

- Марианна Даяновна, беҙ Рәсәйҙән бер хат алдыҡ. Мәрйәм Аҡбирҙина тигән кешене эҙләйҙәр.

- Мәрйәм...

Марианна әбейҙең ауыҙы асылып китте. Нисәмә тиҫтә йылдар уның үҙ исемен ишеткәне юҡ ине. Мәрйәм! Был бит уға мулла ҡушҡан исем. Хәҙер ят һәм сәйер тойолһа ла, үҙ исеме!

- Мәрйәм...- тип ҡабатланы ул ышанмаған төҫлө. Ирене дерелдәне.

- Мин бит әйттем! Мин бит әйттем! - тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе ҡыҙыҡай.

- Нимәне, балаҡай? - тип һораны Дилором әбей.

- Беҙҙә Рәсәй яғынан килгәндәр бар. Шуларҙың береһе Мәрйәм булырға тейеш тип, мин әйткәйнем!

Марианна әбей ҡапыл бөгөлгәндәй булды. Аркадий уны йәһәт кенә эләктереп алды. Һикегә алып барып ултыртты. Дилором әбей һыу һалынған кәсәне һуҙҙы.

- "Минең ысын исемем Мәрйәм ул", тип минә лә әйткәне булды, - тине Дилором. - Нишләп мәрйәнең исеме Мәрйәм булһын инде тип, әһәмиәт бирмәнем. Тимәк... Ысын булған икән был хәл!

- Мәрйә түгел мин! Күпме әйткәнем бар,- тине Марианна.

- Кире ҡағырға ашыҡмағыҙ, Марианна Даяновна! Мырҙағол тигән иптәш әсәйегеҙҙең улы була. Бына игтибар менән тыңлағыҙ: "Беҙҙең атайҙар башҡа. Минең әсәйем Миңлебикә атайыма 1948 йылда кейәүгә сыға. Тағы ла бер йылдан мин донъяға килгәнмен".

Марианна әбей ауыҙын асҡан килеш тора бирҙе. Шунан ҡалтыраған ҡулдар йәнә хатҡа һуҙылды. Ул күҙлеген ашыҡмай ғына кейҙе. Хатты уҡып сыҡҡас, йомарлап тотоп алды. Йомарлап тотто, сөнки был хат уны ватаны, үткәне менән бәйләүсе еп ине. Ошоептең осон юғалтыуҙан, өҙөлөүенән ҡурҡты.

- Был мөғжизә...

Шул һүҙҙе генә көткән тиерһең, ҡара сәсле ҡыҙыҡай уны ҡосаҡлап алды.

- Фатима, әллә һин нығыраҡ илайһың?

- Аркадий, оло кешене ҡыуандырҙыҡ бит!..




- Ну, һин бит Рәсәйҙән.

- Унда ла төрлө халыҡ йәшәй.

- Ҡайҙан һин? Хәтерләйһеңме? - тип һораны Аркадий.

- Ямантау, Ямантау... - тип ҡабатланы Марианна әбей. - Шул һүҙ генә иҫкә килә.

- Әйттем бит Башҡортостандан тип!- ҡыҙҙың тауышы тағы ла сағыуыраҡ ишетелде. - Бына картала күрһәтелгән.

- Силәбе өлкәһенән дә булыуы ихтимал, Фатима, - тине Аркадий.

- Юҡҡа бәхәсләшмәгеҙ, балалар. Мин Башҡортостандан. Документта шулай теркәлгән. Ләкин бер сығып киткәндән алып Башҡортостанда булғаным юҡ. Күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ямантау... Шул һүҙ иҫтә. Ҡалғаны томан эсендә. Мине эҙләйҙәр тиһегеҙ инде? Был ҡарсыҡты кем эҙләргә тейеш?

Марианна әбей хат юлдарына күҙ һалды. Тоҡомбәтов Мырҙағол тигән ар-ат үҙенең Мәрйәм исемле апаһын эҙләй. Ләкин Марианнаның бер ниндәй ҙә ҡустыһы булманы. Ул әсәһенең яңғыҙ ҡыҙы ине. Дөрөҫ, өләсәһенең улдары булды. Улар барыһы ла фронтта ятып ҡалды.

- Минең ундай туғаным юҡ, - тип баш сайҡаны Марианна әбей. Һүренке тауыш менән дуам итте. - Тимәк, Башҡортостандан бүтән берәүҙе эҙләйҙәр.

Әбей ауыр һуланы, ауыҙ тирәһен усы менән һыпырҙы.

- Һеҙ минең йөрәгемде телдегеҙ. Онотолған бала саҡҡа ҡайтҡандай булдым. Ә уны иҫләүе бер ҙә анһат түгел. Минең әсәйҙе төрмәгә алып киткән көндө хәтерләйем былай, бөтөнләй иҫемдән юйылмаған. Юҡ-юҡта хәтеремә килеп төшә. Шул сакта үҙемдә теге биш йәшлек бала хәлендә тоям. Бер туғаным да юҡ, бына быныһын өҙөп әйтәм.

* * *

Марианна әбей тынғылығын юғалтты. Ире Иосиф иҫән булһа, ҡалай ҡыуаныр ине. Бергәләшеп Башҡортостанға барып килерҙәр ине. Ире Иосиф та етем бала. Атаһы хәрби кеше булған. Белоруссияға ебәрәләр. Шунда һуғыш эсендә ҡалып, атаһын да, әсәһен дә юғалтҡан Иосиф меҫкен үҙенең кемлеген дә белмәне. Улар икеһе лә балалар йортонда үҫтеләр. Студент йылдарында өйләнештеләр. Ике ул үҫтерҙеләр. Ләкин бер ҡасан да нәҫел-нәсәбен эҙләмәнеләр. Уларға шулай тыныс ине. Бала саҡ йөрәккә шул тиклем ҡаты йәрәхәт һалды. Иҫләй башлаһалар, шул йәрәхәт тотош ғүмерҙе телеп үткәндәй. Шуға ла иҫләмәнеләр ҙә, эҙләмәнеләр ҙә. Улар икеһе етем бер бөтөн ине, бер-береһенең хәлен тын алыштан белеп торҙолар. Етемдең кемгә кәрәге бар инде? Ҡайһы туғанына хәжәтһең, һин етем? Ошо көнгә тиклем Марианна ла шулай тип уйлай ине. Ләкин бөгөн тормошонда нимәлер үҙгәрҙе. Иосиф ҡына был турала белмәй. Үкенес. Иосифтың вафатына ете йыл үтеп китте. Йөрәк сире менән ҡапыл ғына китеп барҙы ирекәйе. Ике улдары ҡырҙа. Был яңылыҡҡа улар шатланыр, моғайын. Эйе, башта аптырарҙар, шунан әсәләре өсөн шатланырҙар...

Марианна ныҡлы ҡарар ҡылды - әле аяҡ йөрөгәндә тыуған яҡтарына ҡайтып килергә кәрәк. Әсәһенең ҡәберен барып күрер, исмаһам. Нисәнсе йылда вафат булды икән бахырсыҡ? Мырҙағол был турала яҙмаған. Әсәһе, әсәкәйе...

Марианна атаһын бөтөнләй хәтерләмәй. Уны һуғыш башланыу менән фронтҡа алып китәләр. Шунан Миңлебикә апай икенсе ауылға, үҙенең әсәһе янына, күсеп ҡайта. Ул мәлдәрҙә Марианна әҙ-мәҙ иҫләй. Ауыл тауҙар менән уратып алынғайны. Бейек-бейек тауҙар. Бер көндө әсәһе уны яҡындағы тауға алып менде. Тирә-яҡ шул тиклем асыҡ күренә. Марианна ҡыуаныш сәпәкәй итә.

- Әсәй, бынан бөтөн ер күренә, ивет?

Миңлебикә апай баш ҡаға.

-Таң ҡалырлыҡ, бөтөн нәмә күренә, яҡындағыһы ап-асыҡ. Томан эсендә - алыҫтағылар.

- Ә нишләп атайым күренмәй?

- Берәй ваҡыт күренер.

- Тағы ла бейегерәк тауға менһәкме? Әсәй, иң бейек тау нисек атала? Ямантау, шулай бит?

- Нишләп Ямантау булһын, ти?

- Бөтөн дейеүҙәр шундай йәшәй бит! Өләсәйем шулай, ти. Ә минең атайым әле дейеүҙәр үлтереп йөрөй.

- Дейеүҙән яман дошман бар, ҡыҙым. Атаң шуларҙы ҡыра.

-Ямантауға менгәс, уларға атайымды эҙләгәнемде әйтермен. Дейеүҙәр асыуланмаҫ, ивет?

-Уны иң бейек тау, тинеңме әле? Ярай, менерһең, балаҡайым. Мин һинә аҫтан ҡул болғармын! Мин һине түбәндә көтөрмөн. - Миңлебикә апай ҡыҙын ҡосаҡлай.

Әсәһе көнө-төнө эштә. Улар бик һирәк күрешә торғайны. Хәтирәләр тоноҡ. Ләкин әсәһен тейәп алып киткән саҡтар бөгөнгөләй күҙ алдында. Әллә ниндәй уҫал ағайҙар өйҙә тентей, йәмһеҙ итеп аҡырлар. Ирҙәрҙең тауышынан хатта урындыҡта ауырып ятҡан өләсәһе тороп ултырған. Улар ҡысҡырған һайын өләсәһе тертләй һәм бәләкәсәйеп китә. Марианна өләсәһенең итәгенә йәбешкән. Ул үҙен алып сығып ырғытыуҙарынан ҡурҡа. Сөнки был уҫал ағайҙар өйҙәге бөтөн нәмәне тышҡа бырахтыра. Ҡыҫтыра, юрған...

Бер заман әсәһен алып инәләр.

- Балаҡайым, мине онотма!

- Әсәй, һин ҡайҙа китәһең?

-Алыҫҡа балаҡайым, һин күрмәгән-белмәгән яҡтарға. Тиҙ генә күрешмәсбеҙ. Балаҡайым, мин барыбер ҡайтырмын!

- Илама, әсәй! Мин иң бейек тау башына менермен. Ҡул болғармын! Һин мине гел күрерһең. Тик илама!

Әсәһе юҡ, ә ул һаман ҡысҡыра!

- Ямантауға менермен! Ҡул болғармын! Илама, әсәй!

Барып ҡайтырға кәрәк! Марианна ҡарсыҡ Дүшәнбелә йәшәгән Ренард улына шылтыратып, үҙен Мырҙағол атлы ҡустыһы эҙләткәнен әйтте. Хайран булды улыҡайы ла. Аптырамаҫлыҡ түгел бындай хәбәргә. Иртәгәһен үк ҡайтып төштө, тик әсәһенең сәфәргә йыйыныуы ҡыуандырманы шикелле. Әсәһенең сәләмәтлеге өсөн борсола инде.

- Бик тә алыҫ юлға сығырға йыйынаһың түгелме, әсәй? Памир тауҙарымдан тыш, бер сәғәт тә тора алмайым, уларҙы ташлап бер ҡайҙа ла китәһем юҡ, ти торғайның.

- Унда ла тауҙар бар, улым. Кешеләрен онотоп бөтһәм дә, тауҙар барлығын яҡшы хәтерләйем. Шул тауҙар минең артабанғы яҙмышыма йоғонто яһаны. Шуға ла әсәйең тау ярата.

Юғары уҡыу йортон тамамлағас, ҡайҙа эшкә китергә тигән һорау алға килеп баҫты. Иосиф менән өйләнешкәндәр ине инде.

- Иң бейек тауҙарға алып кит, - тине Марианна.

Бына шулай Памир яҡтарына килеп сыҡты улар. Ошонда мәктәптә эшләнеләр. Болғансыҡ йылдарҙа ла икенсе тарафтарға күсеп китмәнеләр. Улар өсөн Тажикстан үҙ ватандарына әүерелгәйне. Эйе, ҡайҙа китһә лә Марианна Памир тауҙарын һағынып ҡайта.

Бөгөн улы менән Урал тауҙарына юл алды улар.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Көслө зат үҙ аҡылы менән яҙмышын үҙе ҡора, тимәк, ул үҙенә үҙе хужа, үҙенең ялған фекерҙәрен, нәфсеһен, эгоистик ҡараштарын еңә. Көслө шәхес булыу - ул үҙеңдә аң көсөн үҫтереү һәм тирә-яҡ мөхитте аңлап ҡабул итеү.***



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

# КЕМ УЛ ИР-АТ?

> ***Тормош шулай ҡоролған: һәр кем аңлы рәүештә үҙенә эшләй, ә ни тиклем белеп етмәй, шул тиклем күберәк белгән, күберәк аңлаған кешегә хеҙмәт итә. Йә ул аҡыллы ҡулында "томана-марионетка", йә үҙ асылына төшөнә һәм тормошо менән идараны үҙ ҡулдарына ала. Ризыҡ кешегә ике йүнәлештә тәьҫир итә: аң һәм физиологик (сәләмәтлек) йәһәттән. Аң кимәлендәгеһе тормош менән идара итеү процесы менән бәйле. Ул йә эске, йә тышҡы идара рәүешендә сағылыш таба. Тәүге осраҡта беҙ үҙ-үҙебеҙгә хужа, икенсеһендә иһә (тыйылған ризыҡты ашаған хәлдә) марионетка булып торабыҙ.***

Был хаҡта изге Ҡөрьәндә (13-сө "Күк күкрәү" сүрәһе, 11-се аят): "Уның алдында ла, артында ла күҙәтеп тороусылар бар, улар уны Аллаһтың бойороғо менән һаҡлай. Ысынлап та, Аллаһ халыҡтарҙа булған нәмәне улар үҙҙәре үҙгәрткәнгә тиклем үҙгәртмәй. Әгәр Аллаһ бер халыҡҡа яманлыҡ теләһә, уны ҡайтарырға мөмкинлек юҡ һәм уларҙың Унан башҡа яҡлаусыһы юҡ!".

"Бер энергия ла юҡтан хасил булмай һәм эҙһеҙ юҡ булмай. Ул бер хәл торошонан икенсеһенә күсә" ти физиканың энергия һаҡлау законы. Боронғо һинд яҙмаларында Карма тәғлимәтенә (санскрит теленән "карма" "минең эшем, минең эшмәкәрлегем" тигән мәғәнә бирә) "нимә сәсәһең - шуны ураһың" төшөнсәһе һалына. Суфыйсылыҡ тәғлимәтендә Ғәмәл Ҡануниәте тураһында әйтелә. Ғайса бәйғәмбәр: "Яуызлыҡ ҡылма, һиңә лә яуызлыҡ булмаҫ", "Хөкөм итмәгеҙ, хөкөм ителмәҫһегеҙ", тигән. Милләтебеҙҙең бөйөк әҫәре "Урал батыр" эпосында ла был асыҡ сағыла.

## Хәҡиҡәтте аңлайыҡ, өйрәнәйек, ҡабул итәйек

"Күп нәмәләр белеп етмәгәнгә түгел, ә был әйберҙәрҙең беҙҙең төшөнсәләр даирәһенә инмәүенә бәйле аңлашылмай", - тип аңлата Козьма Прутков. Зиһенде үҫтереү, рухи байлыҡты арттырыу өҫтөндә эшләмәйбеҙ һәм шуға ла күп нәмәне аңлап етмәйбеҙ. Тормош асылын, әйтәйек, туҡланыу, ғаиләләге ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәрен, балалар тәрбиәләү серҙәрен төбөнә төшөп белмәү "михнәт механизмы"н тоҡандыра. Юристар әйтмешләй, закондарҙы белмәү яуаплылыҡтан ҡотҡармай. Шуға ла кешенең Хәҡиҡәтте аңларға, өйрәнергә, тыңларға һәм ҡабул итергә ҡурҡыуы тағы ла сәйерерәк күренә. Ғәжәп, ә бөгөнгө заман әҙәм заты - ниндәй мәхлүк төрөнә инә ул? Боронғо яҙмаларҙан күренеүенсә, кешенең тәбиғәте - ул һөйөү һәм аҡыл. Бөтә тереклеккә һәм тирәяҡҡа яратып ҡарарға тейешбеҙ, ә аҡыл эйәһе булыу тормошта ҡулланылған белемебеҙҙе кәүҙәләндерә лә инде.

Тормош шулай ҡоролған: һәр кем аңлы рәүештә үҙенә эшләй, ә ни тиклем белеп етмәй, шул тиклем күберәк белгән, күберәк аңлаған кешегә хеҙмәт итә. Йә ул аҡыллы ҡулында "томана-марионетка", йә үҙ асылына төшөнә һәм тормошо менән идараны үҙ ҡулдарына ала. Ризыҡ кешегә ике йүнәлештә тәьҫир итә: аң һәм физиологик (сәләмәтлек) йәһәттән. Аң кимәлендәгеһе тормош менән идара итеү процесы менән бәйле. Ул йә эске, йә тышҡы идара рәүешендә сағылыш таба. Тәүге осраҡта беҙ үҙ-үҙебеҙгә хужа, икенсеһендә иһә (тыйылған ризыҡты ашаған хәлдә) марионетка булып торабыҙ.

Беҙҙең аң һәм сәләмәтлек - ябай ғына осраҡлыҡтар һөҙөмтәһе түгел. Әгәр кеше сирле икән, ул поликлиникаға йүгерә, диагнозын аныҡлай, унан дарыуханаға бара, тир түгеп эшләгән аҡсаһына дарыу һатып ала. Былар тик нәтижә һәм уларҙан ҡотолоу юлы ғына. Сәбәптәре хаҡында уйланып тормайбыҙ. Улар бит матди булмаған мөхиттә ята, беҙҙең эске донъябыҙ менән бәйләнгән. Был осраҡлы хәлдәр осраҡлы була алмай. Аюрведе трактатында ("Атхарваведа" дүрт Вед сығанаҡтарының береһенең бүлеге) сирҙең өс сәбәбе бар тиелә:

**1.** Прагья-апарадха (санскрит) - был бөтә сирҙәрҙең төп бәләһе. Термин ике һүҙҙән тора. "Апарадха" "енәйәт, кәмһетеү" тигәнде аңлата. "Прагья" - "аңлау, аҡыл, ғилемлек". Йәғни беҙ хаталанабыҙ һәм аҡылға ҡаршы енәйәт эшләйбеҙ, уны кәмһетәбеҙ.

**2.** Икенсе сәбәп - асатмья-индрийартха-самйог. "Сатмья" "тотороҡлоҡ" тигәнде аңлата. Унан сығып, "асатмья" - "тотороҡһоҙлоҡ". Йәғни тотороҡһоҙлоҡтан тыуған сир, тормошобоҙға тотороҡһоҙлоҡ килгәнде аңлата. "Индрийа" - "тойғо", "артха" - "тойғо ағзаларының эшмәкәрлеге". "Самйог" - "тойғоларҙың тышҡы мөхит менән мөнәсәбәте". Шулай итеп, "асатмья индрийартха самйог" - "тойғоларҙы көйләү яйын тотмау". Был түбәңге аң кимәлендә хафа тыуҙыра. Хәҙерге заман табиптары ла, ауырыуҙарҙың 80 проценты психосоматикаға бәйле, йәғни негатив хистәрҙән, көйөү-борсолоуҙарҙан хасил, ти.

**3.** Сирҙәрҙең өсөнсө сәбәбен санскрит телендә "кала паринама" тип атайҙар. Уны тәржемә иткәндә "ваҡытты хөрмәт итмәү" тигән мәғәнә бирә. Йәғни нимәнелер ваҡытында эшләмәйбеҙ, ашығабыҙ, йә һуңлайбыҙ.

Тормошобоҙҙа бөтә нәмә лә "сәбәп-эҙемтә законы" аҫтында эшләй һәм бөтә булған хәл-ваҡиғалар - беҙгә ишара. Әммә уны фекерләй, анализлай һәм ҡарар ҡабул итә белгән аҡыллы кеше генә ишетә. Ир-ат аңы Юғарынан шулай ҡоролған. Көслө зат үҙ аҡылы менән яҙмышын үҙе ҡора, тимәк, ул үҙенә үҙе хужа, үҙенең ялған фекерҙәрен, нәфсеһен, эгоистик ҡараштарын еңә. Көслө шәхес булыу - ул үҙеңдә аң көсөн үҫтереү һәм тирә-яҡ мөхитте аңлап ҡабул итеү. Ир-аттың асылы шунда.

***Үҙ урынын белгән, бәҫен тотҡан ир-ат ғаиләһендә ихтирам ҡаҙана, ҡатыны бер ҡасан да уның һүҙен йыҡмай, кәңәштәре менән башын бутамай, алдына сыҡмай. Ошо хәлдә балалары уларҙың икәүһен дә хөрмәт итә. Был Аллаһ Тәғәләне таныған ираттың нәҫел мөнәсәбәттәре: ҡатын - иргә, балалар ата-әсәгә ихтирам-хөрмәт күрһәтә. Ата-бабаларыбыҙ шулай йәшәгән. Беҙҙең бурысыбыҙ ҙа ныҡлы шәжәрә ағасы тәрбиәләп үҫтереү. Уның ныҡлығы - бөгөнгө ысынбарлыҡта бәхетле тормошҡа юл асҡан иң мөһим шарт.***

*КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!*

# ЕҢГӘ ҺӨТӨ

**Юмореска**

Ихлас та инде ошо еңгәм. Телефондан һөйләшкән һайын ҡунаҡҡа саҡыра, килмәгәнгә үпкәләп бер була.

- Килегеҙ беҙҙең ауылға, рәхәтләнеп ял итеп, туйғансы һөт эсеп китерһегеҙ, - ти.

Шылтыратҡан һайын берәй йомошо була, әлбиттә, йә малайын институттан ҡыумаһындар өсөн уҡытыусылары менән һөйләшергә кәрәк, йә уға ит һатып алыусылар эҙләшергә тура килә. Донъя мәшәҡәте бөтәме ни. Ярҙам итмәй ҙә булмай, үҙ еңгәм бит, өс туған ағайым менән йәшәй.



Кисә еңгә тағы шылтыратты.

- Ҡәйнеш, был ялда ғаиләң менән әбизәтелне кил, - тип мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы ул. - Килмәһәгеҙ, үпкәләйем. Рәхәтләнеп һөт эсерһегеҙ, теләгәнсә алып китерһегеҙ. Ана, ағайың шалҡан кеүек таҙа, ауыртҡан ере лә юҡ, биҙрәләп һөт эскәнгә шулай ул.

Ғәжәп бит. Ауылда татлы ризыҡ бөткәнме ни? Юҡ шул, еңгә бал да, ҡаймаҡ та тимәй, мунса, матур тәбиғәт менән дә ҡыҙыҡтырмай, бары һөтөн маҡтай. Аңламаҫһың, әллә бесәй кеүек һөткә үлеп бара, үҙе әйтмешләй, мине лә биҙрәләп һөт кенә һемерә тип уйлай микән?

Ҡунаҡ булырға кем яратмай! Өйгә ҡайтып әйткәс, ҡатын да, балалар ҙа ихлас ҡыуанды. Исмаһам, ауылда туғандарың да юҡ, тип йыш һөйләнгән ҡатындың шатлығы айырыуса ҙур ине.

- Ауыл кешеһе үҙе йомарт була торған, - тип, супермаркеттарҙы бер итеп йөрөп, машинаның багажнигын күстәнәстәр менән лыҡа тултырҙы был.

Машина өсөн 500 саҡрым нәмә генә ул. Алты сәғәт тигәндә районға килеп тә еттек. Телдәр еңгәм кесә телефонынан, ауылға туранан 50 саҡрым ғына ҡала, юлы насарыраҡ, әммә үтергә була, тигәйне. Юлы, ысынлап та, шәп түгел икән. Текә тауҙарҙы бер менәбеҙ, бер төшәбеҙ. Йөк машиналары урман юлын йырғыслап бөткән. Бер ташҡа, бер төпһәгә барып менгән машинабыҙ двигателе тракторҙан яманыраҡ үкерә башланы. Шулай ҙа кәйеф күтәренке, алда һый-хөрмәт, эҫе мунса, йылы һөт көтә бит.

Ауылға төн уртаһында саҡ барып еттек. Еңгәләрҙең өйөн табып, ишеген астырып кергәнсе таң һарыһы беленә башлағайны. Аяҡтарҙа көскә баҫып торабыҙ, хатта табында ултырырлыҡ хәл ҡалмағайны. Һиҙгер күңелле еңгәм быны аңланы, буғай, сәйен дә ҡуйып мәшәҡәтләнмәне.

Иртәгәһенә ҡатын ярты көн буйы кейемдәрҙе таҙартты, мин машина менән булаштым. Бер ыңғайҙан алсаҡ еңгәбеҙҙе тыңлайбыҙ.

- Ошо бирән һыйырҙан ҡасан ҡотолам инде, - тип бер мәл ҡыҙып китте ул. - Йәй буйы шулар тип бесән әҙерләйһең, ҡыш буйы ҡарайһың, ҡаланыҡыларға рәхәт, килеп һыйланып китергә генә беләләр. Һөт-ҡаймаҡ юҡмы ни, тип таптырырға тартынмайҙар.

Хужаларҙың урамда уйнап йөрөгән бәләкәй ҡыҙҙары миңә асыулы итеп ҡарап ҡуйҙы.

- Ҡыҙым, - тип өндәште уға еңгәм. - Ағайыңдарға тигән һөттө айырып һалып ҡуй әле, һауыты шунда ғына.

Ҡыҙыҡай миңә тағы бер тапҡыр яман итеп ҡараны ла йүгереп өйҙәренә кереп китте. Еңгәм шул арала эргәгә килеп баҫҡан күрше ҡатынға, унан урамдан үтеп барған әбейгә ҡаланан килгән ҡунаҡтар, уларға күстәнәскә һөт-маҙар әҙерләп йөрөүе хаҡында һөйләп өлгөрҙө.

Унан һөттө айырып һалған, тик уны һыуытҡысҡа ҡуйырға онотҡан ҡыҙын тетеп әрләп сыҡты.

- Бөгөн былай ҙа һөттө әҙ тапшырҙым, аҡсаһы кәмерәк була, ә һин ишшо уны әсетеп әрәм итергә тырышаһыңмы? - тип тамам ҡыҙҙы еңгәм. Ә миңә оят булып китте: ауыл кешеһен күрәләтә талайбыҙ бит, тиҙерәк китергә кәрәк бынан.

- Ҡунаҡ итеп тә булманы, ярай, иркенләп тағы килерһегеҙ әле, - тине еңгәм ихлас йылмайып. Шунан үҙенән аша ҡарап торған малайының арҡаһынан дөпөлдәтеп һөйҙө. - Бәпесемде лә алырһығыҙ инде, каникулы бөттө бит.

Бәпесенең әйбере хәтһеҙ булып сыҡты. Ике тоҡ бәрәңге, бер тоҡ кишер, сөгөлдөр-фәләнде, өс-дүрт сумканы багажникка көскә һыйҙырҙыҡ.

- Ә бына быныһы - һеҙгә! - Хужабикә бер литрлыҡ шешәгә тултырылған һөттө тантаналы рәүештә ҡатыныма һуҙҙы. - Көн дә ун литр һөт тапшыра инем, бөгөн кәмерәк бирҙем, мәйтәм, ҡунаҡты күстәнәсһеҙ ҡайтарырға ярамай. Рәхәтләнеп эсегеҙ.

Ауылды сығып өлгөрмәнек, кесә телефоны шылтыраны. Еңгәм икән.

- Һөт тиҙ генә әсей ҙә ҡуя ул, ҡәйнеш, ҡатыныңа әйт, ҡайтҡас та ҡайнатып ҡуйһын, баҡса емеше түгел бит, аҡса емеше. Бәпесемде алып барып еткереп, бүлмәһенә урынлаштырып китерһең инде юл ыңғайында, бер-бер хәлгә тарып ҡуймаһын тип ҡот осоп тора. Һеҙҙең ҡала халҡы әшәке, аҙым һайын аферист та хулиган...

Телефонды ситкә бырғытам да эргәлә ятҡан һөт шешәһенә нәфрәтләнеп ҡарап ҡуям. Яндырылған бензин, ремонтланасаҡ двигатель хаҡын ғына иҫәпләһәм дә кәм тигәндә ун мең һумға төштө бит был сәфәр.

**Марат ӘМИНЕВ.**

**✓ Командалар маршрут карта буйынса барып, эпос геройҙары Зәрҡүм, Һомай, Йөҙйәшәр әбей, Самрау батша, Ҡатил батша ҡыҙы менән осрашып, төрлө һынауҙар аша үтеп, Йәншишмәгә барып юлыҡтылар.**



ИНТЕРНЕТТАН



## БӘЙЛӘНГӘНЛЕК НАСАР

■ Интернетҡа бәйләнгәнлек рәсми рәүештә психик тайпылыш тип табылмаһа ла, психологтар был турала 20 йылдан ашыу һөйләй. Тәүгеләрҙән булып Айвен Гольдберг 1995 йылда был хәүефте телгә ала. Һуңғараҡ уға башҡа белгестәр ҙә ҡушыла. Инглиз психологы Марк Гриффитс интернетҡа бәйлелекте билдәләүсе 6 критерий төҙөһә, психиатр Кимберли Янг махсус тест уйлап таба. Был мәсьәлә айырыуса Ҡытай ғалимдарын борсоуға һала, 2008 йылда интернетҡа бәйлелелек милләткә зыян килтерә, тип иғлан ителә. Тап шул уҡ осорҙа бындай кешеләрҙе дауалау өсөн реабилитация үҙәктәре барлыҡҡа килә. АҠШ был типтағы үҙәктәрҙе 2009 йылды төҙөй. 31 илдә йәшәгән 89 мең кешелә тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, ғалимдар шундай һығымтаға килә. Әгәр ҙә ул йәшәгән дәүләттә йәшәү сифаты түбән булһа, кеше интернетта йышыраҡ "ултыра". Реаль тормоштағы стрестарҙан ҡасып, кеше виртуаль тормош упҡынына ырғырға ла әҙер. Тора-бара улар реаль һәм виртуаль тормош араһындағы сиктәрҙе тоймай башлай. Шуға ла был проблеманың нигеҙендә йәшәү, эшләү, башҡа социаль шарттар менән ҡәнәғәт булмау ята. Гонконг университеты ғалимдары иҫәпләп сығарыуынса, интернетҡа бәйлелек Иран, Израиль, Ливан, Төркиә кеүек Яҡын Көнсығыш илдәрендә күберәк, ә Төньяҡ һәм Көнсығыш Европала әҙерәк.

■ Сәйҙе лә, ҡәһүәне лә бик яратып эсәбеҙ, әммә ғалимдар араһында уларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ тигән бәхәс барғанын күптәр белмәйҙер әле. Йәнәһе, сәйҙе һәм ҡәһүәне "дөрөҫ" итеп эсеү күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара. Британия менән Америка ғалимдары ҡара сәй иммунитетты нығыта, ти. Бер ай дауамында бишәр кешенән торған ике төркөм һынау үткән: беренсе төркөм - сәй, икенсеһе ҡәһүә эскән. Һынауҙарҙың аҙағында ҡәһүә эсеүҙең әллә ни файҙаһы булмауы асыҡланған. Бынан тыш, ҡара сәйгә ҡарағанда, йәшел сәй яҡшыраҡ, тип раҫлай ғалимдар. Йәшел сәй ҡан тамырҙарын тарайта, метаболизмды әүҙемләштерә, ул витаминдарға һәм антиоксиданттарға байыраҡ. Спортсылар йәшел сәйгә өҫтөнлөк биреүсән, сөнки ул зарарланған күҙәнәктәрҙе тергеҙә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығыта. Әйткәндәй, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре менән ауырыусылар аҡ сәскә, бөтнөк сәйҙәре өҫтөнлөк бирһә лә була. Ҡәһүәләге кофеин күпкә тиҙерәк үҙләштерелә, шуға ла ике-өс тамсы ҡәһүәнән дә кеше үҙен яҡшыраҡ тоясаҡ. Әммә сәй кофеины организмдан оҙағыраҡ сығарыла. Ҡәһүә Альцгеймер ауырыуын иҫкәртә, майҙарҙы яндыра һәм асығыу тойғоһон баҫа.

■ Һомғол буйлы булыуығыҙ менән ғорурланаһығыҙ һәм шуға ла үҙегеҙҙе сәләмәт тип уйлаһығыҙмы? Ғалимдар раҫлауынса, һомғол буй һаулыҡ күрһәткесе була алмай. Һуңғы ваҡытта артыҡ ауырлыҡ менән яфаланмаған кешеләрҙә лә диабет сире йыш осрай икән. Белгестәр әйтеүенсә,ябыҡ дүрт кешенең берәүһе диабет сире һәм метаболик һимереү алдында тора. Метаболик һимереү мәлендә кешенең май массаһы унын мускул массаһына ҡарағанда күберәк була. Бындай кешеләр ябыҡ, ләкин яҡшы формала түгел, бының төп сәбәбе булып дөрөҫ туҡланмау тора.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# УРАЛ БАТЫР ВАРИҪТАРЫ...

## ЙЫЙЫН ЙЫЙҘЫ

**Бөтә донъя таң ҡалырлыҡ, аҡыл-фәһем алырлыҡ "Урал батыр" эпосы тыуған ерҙе, яҡшылыҡты данлаусы әҫәр булараҡ билдәле. Ул - халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы, әҙәби мираҫы. Йөкмәткеһенә әллә күпме фәлсәфә һалынған "Урал батыр"эпосыбыҙ - беҙҙең ғорурлығыбыҙ!**




Ошо көндәрҙә Баймаҡ ҡалаһындағы "Айыуҡай" башҡорт балалар баҡсаһында үткән "Урал батыр вариҫтары" республика семинары Башҡортостостандың ете мөғжизәһенә ингән ошо мәшһүр әҫәргә арналды. Был эпос башҡортмон тигән һәр кемдең күңел түрендә йөрөргә, халҡы өсөн үлемһеҙ эштәргә саҡырып торорға тейеш, тигән маҡсат менән ойошторолған ҡор Өфө, Сибай, Йылайыр, Күмертау, Әбйәлил, Мәләүез, Белорет, Хәйбулла, Баймаҡ ҡалаһы һәм районДары балалар баҡсаларының етәкселәрен һәм тәрбиәселәрен бергә тупланы.

Йыйындың төп өлөшөн башлап, "Йыйын була, йыйын була! Урал батыр вариҫтары йыйын йыя!" тигән оран һалып, балалар баҡсаһында тәрбиәләнгән малайҙар йыйылған ҡунаҡтарҙы сәхнә янына саҡырҙы. Мәңгелек йәшәү юлын ҡыуыусы Аҡһаҡал ҡарт тамаша ҡылыусыларҙы тарих төпкөлөнә әйҙәне. Күктән осоп килеп төшкән Һомайҙай ҡыҙҙар йыйынды бейеү менән йәмләп ебәрҙе. Әдилә Әминова исемле тәрбиәләнеүсебеҙ эпос һүҙҙәре менән байрамды асыҡ тип иғлан итте. Педагогтарыбыҙ һәм баҡсабыҙҙы былтыр тамамлаған, өс йыл рәттән төбәк-ара бәйгелә бөйөк эпосыбыҙҙы яттан һөйләп, үҙҙәрен бөтә республикаға танытҡан игеҙәк малайҙарыбыҙ Байрас һәм Баязит Буранбаевтар тарафынан эпостан өҙөк сәхнәләштерелде.

Артабан балалар баҡсаһы мөдире Айгөл Әхтәм ҡыҙы сәләмләгәндән һуң, ҡунаҡтар майҙансыҡтарҙа "Урал батыр" проекты сиктәрендә эшләп килгән төркөмдәрҙең эштәре менән таныштырылды. Иң беренсе "Өләсәйҙәр мәктәбе"нең ағинәйҙәре башҡорт халҡының



кәсептәре - ҡул эштәре, кейеҙ баҫыу, ҡорама ҡорау, селтәр-түшелдеректәр эшләү, балаҫ һуғыу, ҡул тирмәнендә талҡан тартыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте."Атайҙар һәм ҡартатайҙар ҡоро" үҙ майҙансығында ҡунаҡтарҙы йәш шайморатовсылар һәм кадетсыларҙың дәртле сығыштары менән ҡаршы алды. "Айыуҡай" балалар баҡсаһының төп терәге һәм һәр эштә ярҙамсылары булған атайҙар, ҡартатайҙар ҙа проект сиктәрендә бик күп эштәр башҡара, беҙ улар менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Шундай атайҙарҙың береһе Ильнур Килдебаев был сара өсөн тирмә ҡороп, бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтте. Наил Шәйәхмәтов үҙ ҡулдары менән бесеп, тегеп, башҡорт биҙәктәре һалып көндән эшләнгән әйберҙәр ҡуйылған бай күргәҙмәһе менән таныштырҙы. Баҡсабыҙҙың әүҙем ҡартатайы Илшат Хәмитов малайҙарҙы милли спорт уйындарына йәлеп итте.

Баҡсабыҙҙа рухлы егеттәр тәрбиәләүсе - "Урал батыр", ҡыҙҙарыбыҙ өсөн "Һомай" фольклор студиялары эшләй. Шул студияларҙа шөғөлләнеүсе балалар башҡорт халыҡ уйындары "Йәшерәм яулыҡ", "Ҡурайсы", "Һәүәнәй әбей", шулай уҡ башҡорт милли бейеүҙәре буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте. Шунда уҡ музыка етәксеһе Сәлимә Усманова "Урал батыр" һәм "Һомай" студияларының эше, педагог-психолог Гөлдәр Байымова "Урал батыр проекты"н тормошҡа ашырыу сиктәрендә ҡулланылған дидактик уйындар ойоштороу серҙәре, үҙенең игеҙәк малайҙарын да, тәрбиәләнеүселәрен дә "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү конкурсына уңышлы әҙерләп килгән тәрбиәсебеҙ Әминә Буранбаева "Урал батыр" эпосын дөрөҫ һөйләү алымдары" буйынса тәжрибәһе менән бүлеште.

"Урал батыр" проекты сиктәрендә эшләп килгән "Әсәйҙәр клубы" ағзалары, йәғни беҙҙең тәрбиәләнеүселәрҙең иң әүҙем әсәйҙәре байрам сараһын тағы ла нығыраҡ йәмләне. Рәмзиә Рамаҙан ҡыҙы ҡунаҡтарға үҙенең аш-һыу әҙерләү оҫталығын, ҡул эштәре күргәҙмәһен тәҡдим итһә, Гүзәл Ғәлимнур ҡыҙы хәситә эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Гүзәл Вара ҡыҙы, тәрбиә бишектән башлана, тип, ҡунаҡтарҙы бишек йырын йырлап ҡаршы алды.

Йыйын аҙағында мәңгелек йәшәү юлын ҡыуыусы Аҡһаҡал ҡарт "Урал батыр эҙенән" исемле квест уйынға саҡырып, сараны тағы ла йәнләндереп ебәрҙе. Квест-уйын бер юлы балалар баҡсаһы менән таныштырыу һәм тәжрибә бүлешеү маҡсатында экскурсия рәүешендә үткәрелде. Командалар маршрут карта буйынса барып, эпос геройҙары Зәрҡүм, Һомай, Йөҙйәшәр әбей, Самрау батша, Ҡатил батша ҡыҙы менән осрашып, төрлө һынауҙар аша үтеп, Йәншишмәгә барып юлыҡтылар. Бында иһә улар эпоска бәйле һорауҙарға яуап бирҙеләр, кроссвордтар систеләр, пазлдар йыйҙылар, Аҡбуҙатты "ҡороҡланылар". Бирелгән эштәрҙе үтәп бөткәс, Урал батырҙың:

Яҡшылыҡ булһын атығыҙ.
Кеше булһын затығыҙ.
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ! - тигән һүҙҙәрен бергәләп оран итеп яңғыраттылар...

Йыйында ҡатнашыусыларҙы "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе, "Урал батыр мәктәбе" проекты эшен тормошҡа ашырыусы Рәйсә Күзбәкова сәләмләне һәм: "Бөгөнгө сарабыҙҙың төп маҡсаты - рухи ҡиммәттәр төҫһөҙләнә барған был заманда йәш быуынды мәшһүр "Урал батыр" эпосы ярҙамында тәрбиәләүҙең отошло икәнен раҫлау ине. Маҡсатыбыҙға өлгәштек, тип ышанам", - тине. Йыйында ҡатнашыусылар: "Халҡыбыҙҙың бөйөк ҡомартҡыһы булған "Урал батыр" эпосын ныҡлы өйрәнеп, халҡыбыҙҙың йолаларын хөрмәт итеп, киләсәк быуынға аманат итеп тапшырайыҡ, балалар баҡсаһынан уҡ балаларыбыҙҙы рухлы, илһөйәр, телһөйәр итеп үҫтерәйек",- тигән теләк менән таралышты.

**Айгөл ИСХАҠОВА.**



✓ *Аллаһ Тәғәләнән тәүфиҡ бирелгән кеше аҙ ғына ғүмерҙән дә күп нәмә алып, үҙе лә, үҙенән һуң йәшәйәсәктәр ҙә файҙаланып ҡына торорлоҡ хәйерле эштәр эшләргә өлгөрөп ҡала.*



ЙӘНӘШ ДОНЪЯ

# МӨҒЖИЗӘЛЕ ХӘЛДӘР

## Ирәндектә лә йәшәгән улар

**Гәзит уҡыусыларға тәҡдим иткән был мәҡәләмдең йөкмәткеһен 1993 йылдың 6 июнендә яҙып алғайным. Уны Баймаҡ районы Ғәле ауылында тыуып үҫкән Нуретдин Хөснөтдин улы Заманов һөйләгәйне. 1922 йылғы, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, бер нисә яра алған яугир осрашыу мәлендә Сибай ҡалаһында йәшәй ине. Ул һөйләне миңә шүрәлеләр тураһында.**



- Шүрәлене Урғаҙа йылғаһына ат һуғарырға төшкәндә күрҙем, - тип һөйләп китте ул. - Тәүгә осратһам да, ҡурҡманым. Беҙҙең ауыл халҡы ундай януарҙарҙың элек йәшәүе хаҡында йыш ҡына һөйләй торғайны. Тышҡы күренеше ни рәүешле икәнен дә яҡшы беләм инем. Иҫемдә ҡалғандарҙы һөйләп бирәйем улайһа.

Тиреһе йылҡылдап тора. Йылҡы малыныҡына оҡшаңҡыраған. Һоро төҫтә. Ҡолаҡтарын ҡайсыландырып тыңлай. Күҙҙәре бер-береһенә яҡын урынлашҡан. Ҡулында ла, аяғында ла тырнаҡтары бар. Ҡулының бармаҡтары кешенекенән күпкә оҙонораҡ. Үҙҙәре йөнтәҫ. Күберәк дүрт аяҡлап йөрөй. Артҡы аяғына торорға ла мөмкин. Кәүҙәгә йәтеш - буйы алты-ете йәшлек баланыҡындай булыр. Арҡаһы көмөрөрәк.

Ҡулын кешенең ҡултыҡ аҫтына индерһә, ҡытыҡлап үлтермәйенсә туҡтамай, тигәнде ишетергә тура килде. Шундай осраҡтар ҙа булғылаған: шүрәле кешенең ҡултыҡ аҫтын тишеп, йөрәген йолҡоп алған һәм ашаған. Ҡултыҡ аҫтыбыҙҙа һөйәк юҡ бит - тик яры ғына. Шуны ул нисектер белеп алған.

Һөйләшеүе кешенекенә оҡшамаған. Шыҡырлап һөйләшә. Һайыҫҡан хәүефләнгәндә сығарған тауышҡа оҡшаңҡырай. Ҡойроғо оҙон. Арҡан кеүек. Бик ныҡ. Шуның менән ағас ботағын ике-өс мәртәбә әйләндереп, баштүбән аҫылынып тора. Ҡамсы кеүек шыйтылдатып, кәүҙәһен бер нисә мәртәбә уратыуына шаһит булған бер нисә кеше менән һөйләшеп ултырҙым. Быны үҙемә күрергә насип булманы.

Урғаҙа башында текә ярҙар һуҙылып киткән. Унда мәмерйәләр бар. Ҡышты шүрәлеләр элгәре шунда, ғаиләләре - ҡатыны, ире һәм балалары менән бер урында үткәргәндәр.

Күптәр минең һөйләгәндәремә ышанмай. Урғаҙа йылғаһына бейәмде һуғарырға төшкәндә үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, тип әйтһәм, көләләр. "Ғалимдар шүрәлене әллә ҡасан тотоп, ситлеккә бикләп ҡуйырҙар ине", - тип ҡаршы төшәләр.

Баймаҡта Өфөнән килгән бер тарихсы менән һөйләшеп торҙом. Ул серле ваҡиғаларға ҡағылышлы ауыҙ-тел ижадын өйрәнергә килгән икән. Шүрәле тураһында һөйләгәндәремде яҙып алды. "Ағиҙел" журналында баҫтырып сығарырмын, тине. Мин ул баҫманы алдырмайым. Бәлки, сыҡҡандыр ҙа. Тик, һиҙемләүемсә, ғалим миңә ышанманы. Башҡорт, татар, сыуаш һәм мари халыҡтары араһында таралған әкиәттәрҙә шүрәле йыш осрай, тип әйткәне иҫемдә. Уның икенсе төрлө исеме лә бар - "ярымтыҡ", тип бәхәсләште. Беҙҙең Ғәле ауылында уны бер исеме менән генә йөрөтәләр - шүрәле.

Халыҡтың ауыҙын томалап булмай. Хәҙерге заманда шүрәлеләр осрамай, әммә бынан илле йыл элек улар беҙҙең яҡтарҙа йәшәгәндәр. Фәйзулла ауылының икенсе исеме Шүрәле икәнен бөтә кеше белә.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ**
**яҙып алды һәм баҫмаға әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Урал ябалағы**
**(Длиннохвостая неясыть)**



Оҙон ҡойроҡло, бәләкәй ҡара күҙле эре ябалаҡ, ҡанаттарын йәйеп ебәрһә, метрҙан ашып китә. Ҡойроғо буй һыҙатлы, "йөҙө" күгелйем төҫтә, түше - сыбар һүрәтле. Йә "һау-һау-һау" тип өргән кеүек тауыш сығара, йә "һу-буу" тип ухылдай. Инә ҡош "һаф, һаф-һаф" тип яуап бирә, суҡышын шыҡылдата. Тамаҡ таптырған балалары "фсииии" тип тауышлана.

Көньяҡ Уралда Алтынтамаҡ ҡалаһынан алып Шайтантау һыртына, Ирәмәл массивының - ҡайын, Урал-тауҙың һәм Ҡыраҡа һырттарына тиклемге ерҙәрҙәге ҡатнаш урмандарында йәшәй. Ырымбурҙа ҡышлай.

Асыҡ яландары, һаҙлыҡтары булған дымҡыл ерле ҡатнаш урмандарҙы ярата. Март айынан ҡош туйы башлана. Парҙар йәшәгән ерен алыштырмай, әгәр ҙә ризыҡ мул икән, уны йыл әйләнәһенә төйәк итә. Оялары ағаста, йыртҡыс ҡоштарҙың ташландыҡ ояларын да үҙләштерә. Ҡайһы саҡта ояһын ергә, ағастарҙың өҫкә сығып торған тамырҙары араһына ла ҡора. Йомортҡаһын ҡар иремәҫ элек үк һала башлай. Улар 2-6, һирәгерәк 3-4 була. Беренсе йомортҡаһын һалғас та, инә ҡош баҫырға ултыра. Ата ҡош ризыҡ алып килә лә, инә ҡошто эргәләге ағасҡа саҡыра. Бәпкәләр йомшаҡ ҡына аҡһыл йөн менән ҡапланған була, улар 3-4 аҙна ояла үҫә. Был ваҡыт үткәндән һуң инәләре уларҙы тағы ла 1 ай ашата әле.

Ҡыр сысҡаны, йомран тотоп ашай. Бөтөн ябалаҡтар араһында был төр үҙенең оҫта һунарсы булыуы менән айырылып тора. Ҡор, селдән алып ҡуяндарға тиклем һунар итә, һауала осоп йөрөгән бөжәктәрҙе лә тота. Һунарға киске эңерҙә сыға, шулай ҙа болотло көндәрҙә яҡтыла ла һунар итә. Ябалаҡтар ҡышын, ризыҡ табып булмаған осорҙа күпләп аслыҡтан ҡырыла. Ғалимдарға Урал ябалағының 14 йәшкә етеү осрағы билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# БЫНА ҺИҢӘ ӨС КӘҢӘШ

## Харамдан тыйылығыҙ!

Хәләл булмаған ризыҡтарҙан тыйыуҙың сәбәбен дә аңлатып бирә Ҡөрьән. Беренсенән, ул бысраҡ, икенсенән, бындай ризыҡтар кешенең сәләмәтлегенә, аҡылына, әхлаҡи тәбиғәтенә үлемесле зыян килтерә. Рухи тәрбиәһенә, ҡанына, нәҫеленә насар йоғонто яһай.

Ҡөрьән өйрәтә: "Эй, кешеләр! - ти. - Ерҙә булғандарҙан Аллаһ бойорған пак, хәләл ризыҡтарҙы ғына ашағыҙ. Аллаһ рөхсәт итмәгән, уның тарафынан тыйылған ризыҡтарҙы ашарға, Ул тыйғандарҙан тыйыла белмәҫкә ҡотҡо һалып ҡына торған шайтанға эйәрмәгеҙ. Шайтан ул - һеҙҙең яуыз дошманығыҙ" ("Әл-бәҡара" ("Һыйыр") сүрәһе, 168-се аят).

## Паклыҡҡа өлгәш!

Ғибәҙәткә дәғүәт алып бара башлау менән мосолман иң элек бәндәләргә пакланыу юлдарын өйрәтә башлай. Йыуыныу тәртибен аңлатып, йыуынырға яраҡлы пак һыуҙар, һыуҙар бысраныр булһа, уларҙы таҙартыу юлдары тураһында мәғлүмәт бирә.

Беҙҙең халҡыбыҙҙа элек-электән ҡоҙоҡҡа бер нәжес төшһә, эсендәге бөтә һыу бысраҡ тип, һыуы тулыһынса түгелеп таҙартыла торған булған. Сәпсек кеүек кенә йән эйәһе төшһә лә, унан 20 көнәк, тауыҡ дәүмәле бер нәмә төшһә, 40 көнәк һыуын алып түгә торған булғандар. Был тәртип әле лә һаҡлана.

Паклыҡ - сәләмәтлек сығанағы. Дин ҡанундары, сәләмәт йәшәү рәүеше, сәләмәтлек тураһында хәстәрлек талап итә быны, ауырыуҙар таралыуға юл ҡалдырмай. Пак һыуҙар тураһында аңлатып киткәндән һуң, Китап ризыҡ тураһында мәғлүмәт бирә: "Эй, Мөхәммәт! Әйт, - ти, - Аллаһтан вәхи итеп бирелгән Китапта беҙ үлгән хайуан ите, мал боғаҙлағанда аҡҡан ҡан, сусҡа ите, Аллаһ исемен әйтмәй йәки башҡа бер мәхлүк исеме менән һуйылған иттән битәр хәрәм ризыҡтар тапмаҡ тиң", - ти.

Һис бер нәмә тапмай асҡа үлеү ҡурҡынысы булғанда, гонаһ эштәргә һәм енәйәткә бармаған мөьмингә уларҙы кәрәк тиклем генә ашау - гонаһ түгел. Аллаһ - ул Ғәфү итеүсе, мәрхәмәт-шәфҡәт эйәһе". ("Әл-Әнғәм" ("Малтыуар") сүрәһе, 145-се аят ).

## Күңелең дә сәләмәт булһын!

"Ғәнимәт - бәхет, уңыш, хазина булырлыҡ биш нәмә ул: үлемеңдән алда - йәшәүеңде, ауырып киткәнсе - сәләмәт сағыңды, эштән башың сыҡмаҫтан алда - буш ваҡыттарыңды, ҡартлыҡ килерҙән алда - йәшлегеңде, фәҡирлеккә төшөү ихтималынан алда бай ваҡыттарыңды аңлай белеү".

Бына шуны белмәүҙәре арҡаһында күп кешеләр матди һәм мәғәнәүи бәхеттең нимә икәнен аңламай, юҡ-бар артынан ҡыуып, ғүмерен заяға үткәрә. Аллаһ Тәғәләнән тәүфиҡ бирелгән кеше аҙ ғына ғүмерҙән дә күп нәмә алып, үҙе лә, үҙенән һуң йәшәйәсәктәр ҙә файҙаланып ҡына торорлоҡ хәйерле эштәр эшләргә өлгөрөп ҡала. Ундай кешеләр йәшәгән йылдарында уҡ яҡшы ниәт, сәләмәт күңел, изге ғәмәлдәрҙе үҙенә юлдаш итеп һайлай белә.

"Раббыңдан күренеп торған тән сәләмәтлеге менән күңел сәләмәтлеген һорап ҡына тор", - тигән Бәйғәмбәребеҙ.

Ауырыуҙарҙы дауалау табиптар һәм дарыуҙар менән генә сикләнмәй, ауырыу кешенең иң элек рухын дауаларға кәрәк.

Кешенең рухын, йәнен, тимәк, бөтә булмышын паклап ҡына тороу юлдарының иң камилы - тәрбиә һәм тәрбиәсенең дә тәрбиәле булыуы. Тәрбиәнең иң оло дәреслеге - Ҡөрьән. "Ҡөрьән аяттарын уҡы һәм уҡығанды ҡабатлап ҡына тор, - тип өйрәтә ул, - намаҙ уҡы. Кешене ул донъя керенән, аҙғынлыҡтан тыя. Аллаһты зекер итеп кенә тороуҙың файҙаһы бик ҙур. Һеҙҙең нимә эшләп йөрөгәндәрҙе ул күреп кенә тора".

✓ *Бер ауырыуға ла бирешергә теләмәһәгеҙ, өс тамыр - дегәнәк, аҡтамыр һәм бәпембәне ҡаҙып алығыҙ. Ошо тамырҙарҙан әҙерләнгән дауаларҙы эсеү файҙалы.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ




Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.

**24-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Ашҡаҙар. Ғүмерем. Бирсәткә. Һаулыҡ. Келәт. Метр. Далала. Унау. Уҙыштарҙа. Аҡыҡ. Зифа. Ғына. Сайҡай. Вейла. Турат. Йола. Тайм. Ырыуы. Атыш. Әйле.
**Вертикаль буйынса:** Кутузов. Балаһылай. Таштуғай. Олатай. Әрме. Ҡамсат. Атаһы. УАЗ. Рәшә. Әкрен. Рухы. Арена. Урал. Һандуғастары. Алйот. Лада. Ҡурайҡайым.

БАҠСАСЫ КӘҢӘШЕ

# ҠАРАҒАТ БЕШӘ БАШЛАНЫ



**Ҡарағат бешкән мәл - витаминдар туплау, тәмле ризыҡтар әҙерләү өсөн иң яҡшы ваҡыт, ти һәүәҫкәр баҡсасы Гүзәл Кәримова. Уны дөрөҫ йыйып, һаҡлап һәм файҙалы итеп ҡулланыу өсөн ошо кәңәштәрҙе тотоғоҙ.**

● Ҡарағатты иртән йәки кисен, ысыҡ кипкәс йыйырға кәрәк - емеш йомшарып, тиҙ иҙелеп китеүе ихтимал.

● Емештәрҙе һауытҡа нығ баҫмай, һаҡ ҡына һалырға, сөнки ҡарағат бик тиҙ иҙелә.

● Йыйған ҡарағатты тиҙ арала эшкәртергә: ҡайнатма, компот, морс, туңдырырға йәки киптерергә мөмкин.

● Ҡарағатта витамин күп, шуға күрә уны яңы ғына йыйылған көйө ашау файҙалыраҡ.

● Ҡышҡылыҡҡа һаҡлау өсөн ҡарағатты туңдырып ҡуйырға була - быныһ өсөн емештәрҙе йыуып, киптереп, һауыттарға бүлеп һалырға кәрәк.

● Ҡарағат япраҡтарын да файҙаланырға мөмкин - уларҙан хуш еҫле сәй әҙерләйҙәр.

● Ҡарағат ҡыуаҡтарын көҙөн һәм яҙын формалаштырып ҡырҡып торорға онотма, был киләһе йыл уңышты арттыра.

**Ҡарағаттан ҡайнатма яһау өсөн иң ябай ысул:**

Ҡарағатты йыуып, һабаҡтарынан таҙартырға.
1 кг ҡарағатҡа 1,5 кг шәкәр ҡушырға.
Ҡарағатты һәм шәкәрҙе ҡатнаштырып, кәстрүлгә һалырға.
Әҙер массаны әкрен утта ҡайнатырға, ҡайнап сыҡҡас, күбеген алырға.
15-20 минут ҡайнатҡандан һуң, ҡайнар килеш банкаларға һалып, ҡапҡас менән ябырға. Ҡайнатмаң тәмле һәм файҙалы булһын!

Ләйсән СӘЛИХОВА.

ЙӘШЕЛ ДАУА

# ӨС ТАМЫР

**Картуфты һаҡларға, ҡый үләндәрен йолҡоп ташларға күнеккәнбеҙ. Ә улар картуфтан ҡиммәтлерәк булыуы ихтимал һәм бер көн килеп, кешегә дауа өсөн тап шулар кәрәгеүе бар. Бөтә был төбө-тамыры менән юҡ итеүе ауыр булған ҡый үләндәре Ерҙәге тереклек өсөн мөһим булыуҙарын иҫбат иткәндәр.**

Бер ауырыуға ла бирешергә теләмәһәгеҙ, өс тамыр - дегәнәк, аҡтамыр һәм бәпембәне ҡаҙып алығыҙ. Ошо тамырҙарҙан әҙерләнгән дауаларҙы эсеү файҙалы. Ғөмүмән, билдәле үлән менән дауалаусылар 25 тамырҙы ҡаҙып алыуҙары тураһында һөйләй, әммә иң мөһим өсәүһе лә күп ауырыуҙарҙан һаҡланыу өсөн етә.

***Аҡтамыр -*** был йолҡоп бөтөргөһөҙ ҡый үләнен Хоҙай үҙе аяҡ аҫтыбыҙға түшәп үҫтергән. Ул үҫмәгән бер ырҙын да юҡтыр. Ул дауаламаған бер ауырыу ҙа юҡ, күҙҙән башлап яман шешкә тиклем шифалы аҡтамыр. Был үләнде хайуандар ҙа урап үтмәй хатта. Ә кеше өсөн ул матдәләр алмашыныуын яйға һалырға ярҙам итеүе менән файҙалы. Тамырһабаҡ төнәтмәһен һәм ҡайнатмаһын һары һыу ауырыуы (водянка), төрлө сәбәптән шешенгәндә, цистит, бөйәл тотмағанда, бөйөрҙәрҙә һәм үт ҡыуығында таштар булғанда, үпкә, бөйөр, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары, шәкәр диабеты, даимлы бронхит, гипертония сирҙәренән дауаланғанда эсәләр. Был үләндең тамыры подагра, ревматизм, люмбаго, төрлө артрит ауырыуҙарынан һыҙланыуҙарҙы баҫыу өсөн ҡулланыла. Йәш үләндең һуты һәм ҡайнатмаһын йәй дауамында эсергә мөмкин, ул өлөшләтә күҙ күреү һәләтен юғалтҡанда ярҙам итә. Тамыры остеохондроз, ҡатын-ҡыҙҙарҙың түллек биҙе эшмәкәрлеге боҙолғанда, үпкә туберкулезы, экссудатив диатез, сиҡан сыҡҡанда дауа. Был үләнде ҡулланырға ярамаған осраҡ юҡ, шулай ҙа һәр кемдең организмы үҙенсә ҡабул итеүе бар.

***Бәпембә лә ҡый үләне.*** Иртә яҙҙан бәпембә япрағын йыйырға һәм әселеге бөтһөн өсөн, тоҙло һыуҙа 2 сәғәт ебетеп, салат эшләп ашау файҙалы. Урыҫтар уның япрағынан аш бешергән, ә тамырҙарын ҡыҙҙырып ашаған. Бәпембә тамыры аҙканлылыҡ, ашҡаҙан һәм бауыр яман шештәре, лимфа төйөрҙәре шеше, диатез, остеоартроз, артрит, остеохондроз, быуындарҙы дауалай. Көҙгөнөн сәскә атып өлгөрмәгән бәпембә күрһәгеҙ, шуны ҡаҙып алығыҙ.

Бөтә ауырыуҙарҙы ла дауалай алған академик бар. ***Был - дегәнәк,*** һәм ул кеше килеп ҡаҙып алып, дауалана башлауын көтөп ултыра. Хәҙерге көндә бөтә кешеләр ҙә тиерлек сырхау. Яман шеш бик күптәрҙең йәнен ҡыя. Ә дегәнәк барлыҡ онкология ауырыуҙарын дауалай. Шәкәр диабеты, бронхит, гайморит, ревматизм, подагра, артрит, остеохондроз, умыртҡа араһы бүсере, атеросклероз, ҡолаҡ сирҙәрен, оҙайлы коронар етешмәүсәнлек булғанда, һынған һөйәктәрҙе бөтәйтеү өсөн төп ярҙамсы. Дегәнәк хатта гепатит сирен дә дауалай. Уның ярҙамында бауыр шештәрен, хатта бауыр циррозын, холецистит, бөйөр ауырыуҙарын, үт ҡыуығында таштарҙы бөтөрөргә була. Дегәнәк тире ауырыуҙарын: яндырғанда, оҙаҡ ятыуҙан елһенгәндә, экзема, эренле яралар, псориаз булғанда ҡулланалар. Хатта сәсе күп ҡойолған оҙон толомло һылыуҙарға ла дегәнәк төп ярҙамсы.

Был тамырҙарҙан төнәтмә әҙерләү серҙәре түбәндәгесә. Иң ҡиммәтле тамырҙар иртә яҙ алына, әммә көҙгөнөн ҡаҙып алғанда ла була. Дегәнәк - ике йыллыҡ үҫемлек. Бер йыллыҡ дегәнәкте ҡаҙып алыу кәрәк, уның япраҡтары йәш, тамыры көслө була. Ә япраҡтары ҡороған һәм йәбешкәктәре булған дегәнәк файҙаһыҙ, был үлән бөтә көсөн сәскә атыуға сарыф иткән. Уның йәбешкәктәрен йыйып алырға, төнәтергә һәм тештәрҙе сайҡарға була - һыҙлауҙы баҫа. Тамырҙарҙы ҡаҙып алып йыуырға һәм киптерергә. Дегәнәк тамыры йыуан була, шуға уны турарға кәрәк. Шунан бер ҡалаҡ ваҡлап киптерелгән тамырға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 10-15 минут алда яртышар стакан эсергә. Шифалы төнәтмәне ашарҙан алда эсеү мөһим, сөнки ул шунда уҡ организм буйлап тарала. Дегәнәк, аҡтамыр һәм бәпембә тамыры йыйылмаһын бер тигеҙ итеп алып эсергә, йәки һәр үлән менән айырым дауаланырға була: бер аҙна - дегәнәк, бер аҙна - бәпембә, бер аҙна - аҡтамыр.

ЗАУЫҠ

# ҠАЙТЫР ИРҘӘР, УЛАНДАР

## Килер бер көн

Килер бер көн - һуғыш туҡтар,
Тынып ҡалыр ҡоралдар.
Күкрәк тулы йөрәк менән
Ҡайтыр ирҙәр, уландар.

Күкрәк тулы йөрәк менән,
Йөрәк тулы зар менән,
Һағыш тулы ҡараш менән,
Маңлай тулы һыр менән,

Һыҙлап торған күңел менән,
Буҙлап торған уй менән.
... Һеҙ уларҙы тертләтмәгеҙ
Өҫтәл тулы һый менән.

Һеҙ уларҙы тирләтмәгеҙ,
Бейетмәгеҙ ҡул сабып.
Уларҙың хисе ҡатҡан да,
Күңелдәре - ҡыл-сыбыҡ.

Һеҙ уларҙы үрләтмәгеҙ,
Дәрәжә, дан - ҙур һынау.
Улар үҙ һынауын үткән.
Ҡан эсендә һынмағанды,
Дан эсендә бар һыныу.

Һеҙ уларҙы йәлләтмәгеҙ,
Күрһәтәм тип мәрхәмәт.
Йәшәп алып китер өсөн
Уларға намыҫ кәрәк тә,
Тиңе иткән ғәм кәрәк.

Һеҙ уларҙы тиргәтмәгеҙ,
(Әҙәмдең бар төрлөһө).
Кемегеҙ улар күргәнде
Теләр ине күргеһе?

Һеҙ уларҙы сирләтмәгеҙ
Һуғыш, һағыш сиренән.
... Уларҙың тик бер теләге -
Донъя ҡабат боларманһын,
Тынысланған еренән.

## Башҡортостан

Һин танышмы минең Илем менән?
Телем менән? Минең Ер менән?
Ялалғаны бирле был донъялар
Мөғжизәләр үрҙән сер менән.

Һин танышмы минең халҡым менән?
Кем ул башҡорт? Ҡайҙан тамыры?
Ниндәй тылсым менән рухы тере,
Нинә һаман башы юғары?

Ишеткәнең бармы ҡурай моңон?
Арбалдыңмы башҡорт йырынан?
Уйландыңмы, ниндәй илаһи моң
Ҡунып ҡалды күңел ҡылына.

Танышһыңмы?
Танышһындыр - Илем
Иң гүзәле оло Йыһанда!
Ахыры ла, Тәңре амин әйткән
Фәрештәләр теләк йыйғанда.

Илем менән гүзәл Башҡортостан!
Шағир әйткән ине - Гөлбостан!
Итәгендә күпме йылға йырлай
Ҡуйынында күпме күл боҫҡан.

Тауҙарында Урал батыр ҡаны,
Болоттарҙа Һомай ҡаурыйы,
Ҡан хәтере һаҡлап алып ҡалған
Тамырынан аҡҡан бер йырын.

Борон-борон заман еребеҙҙә
Күп халыҡтар булған, төрлөһө.
Тарих һөйләй: шулар араһында
Башҡорт булған иң-иң серлеһе.

Башҡорт яттан һыуын кистермәгән,
Тауын кисҭермәгән.
Ҡырағай?
Юҡ, ҡырағай түгел. Яттар баҫһа,
Йорт зар илар тиеп юраған.

Юраған юш килгәндәй булһа,
Күтәрелгән изге яуҙарға.
Ҡалҡан булып сыҡҡан баҫҡынсыға,
Тоғро булған һыуға, тауҙарға.

Ул әле лә тоғро...
Һүҙ әйтмәгеҙ!
Бер аҙ ғына ыуға бирешкән.
Күреренегеҙ, тертләп уяныр ҙа,
Илем, телем тиеп күтәрелер
Ҡан ҡойошһоҙ яуға, көрәшкә.

Илеккәнгә Илем - йәннәт иле,
Ереккәнгә Ерем - бәрәкәт.
Илен һөйгән, телен белгәндәргә
Тағы нимә кәрәк?
Белһәң, әйт!

Бына шундай минең тыуған илем,
Башҡортостан - изге төйәгем!
Йөрәгемдән һөйөү һурып алып
Йырым итеп күккә сөйәмен!

## Ирҙәр

Мин ирҙәрҙе кәмләмәйем,
Мин ирҙәрҙе күтәрәм.
(Кәмселеккә ҡалған иргә,
Мин - бисәнән һүҙ әрәм).

Мин баш итеп күрәм ирҙе,
Башбаштаҡ түгел үҙем.
Башлы ирҙең эргәһендә
Тыныс бит күңел үҙе.

Мин баш итеп күрәм ирҙе,
Аша бик атламайым.
Тик талабым - ир үҙе лә,
Асылын ваҡламаһын.

Асылында ирҙең - көрәш,
Иреш, баҫтырыш түгел.
Әйтһә лә, ирҙең әйткәне -
Оран. Ҡыҫтырыш түгел.

Әйтә белһен тимен, ирҙәр,
Һүҙҙең тоғро, хаҡлыһын.
Батшамы ул төбәлгәне,
Башҡамы ул - үҙ һүҙенең
Намыҫ, бәсен һаҡлаһын.

Баҙамаһын ине ирҙәр,
Түрә-ҡара ҡашында.
Ҡарашын ергә төбәргә,
Яулыҡ түгел, ир белдеге -
Аҡыл даһа башында.

Ҡаушамаһын ине ирҙәр,
Бисә ҡаушаған ерҙә.
(Аттар тулай, дилбегәһе
Ирҙең бушаған ерҙә).

Мин ирҙәрҙе кәмләмәйем.
Ирҙәр - донъя терәге.
Терәктәрҙе еректерә,
Ирмен тигән ирҙең генә
Тоғро типкән йөрәге.

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӘЗӘНЕҢ МАЛЛЫҒЫ...

## бажаның кәрҙәшлеге

Бераүгә күтәргән таяғың үҙенә төшөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Сит кешенең серен асыу - хыянат, үҙеңдең серенде асыу - ахмаҡлыҡ.

**(Ф. Вольтер).**

Көнләшеүселәренә ғазап бүләк иткең киләме - гел генә яҡшы кәйефтә бул!

**(Диоген).**

Йәл, оҙаҡ йәшәмәйбеҙ, хаталарҙан алған һабаҡтар менән файҙаланып та өлгөрмәйбеҙ хатта.

**(Ж. Лабрюйер).**

Элек бары тик ирҙәр генә яҙа белгән, шуға ла ир-авторҙар донъялағы бар бәхетһеҙлектәрҙе ҡатын-ҡыҙҙарға япһарған.

**(Самюэль Джонсон).**

Һәр төрлө үҙгәрештәр башҡа үҙгәрештәргә юл һала.

**(Николо Макиавели).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Аҡһаҡал эргәһенә килгән дә:**

**- Һеҙгә бер һорауым бар ине. Кеше бер нимә лә тоймай, бер теләкһеҙ йәшәргә мөмкинме?- тип һораған.**

**- Мөмкин, - тигән Аҡһаҡал.**

**- Улай булғас, ундайҙар кеше тип аталырға хаҡлымы һуң?- тип аптыраған был кеше.**

**- Һин тойғоноң ни икәнен аңламайһың, буғай, - тигән Аҡһаҡал. - Мин үҙенең теләктәренә ирек ҡуйып, тәнenә зыян килтермәгән кеше тураһында һөйләйем. Ундай кеше тормошто нисек бар, шулай ҡабул итә һәм йәшәйешен үҙ яйына ҡора белә...**

**- Әммә ул тормош биргәндә яҡшыртыу, камиллаштырыу менән шөғөлләнмәһә, был донъяла үҙен нисек белгертә ала һуң?**

**- Хоҙай беҙгә тән биргән, теләктәргә юл ҡуйып, ошо тәнгә зыян килтермәҫкә, тигәндә аңыбыҙға һалған. Шул ғына! Ә һин үҙеңдең рухыңды тышҡы тәьҫирҙәргә буйһондороу, эске йәшәйеш көсөндә шуның менән емереү тураһында һүҙ алып бараһың. Хоҙай нисек яратҡан, шул асылында бул. Ағастарҙы ҡосаҡла, улар менән һөйләш, ел йырына ҡушылып, көй һуҙып ебәр. Арыһаң, уйлау урын эҙләп ҡаңғырып торма, өҫтәлгә башыңды һалып, серем итеп ал. Хоҙай беҙгә тән биргән дә, уны тормош менән тултырыған, ә һин ошо тәнде кәрәкмәгән, осо-ҡырыйы күренмәгән бәхәс-талаштар һәм әңгәмәләр, бер кәрәге булмаған теләктәр менән тултырырға кәрәк, тип ныҡышаһың... Теләктәре алда йөрөгәндәр үҙен барыбер яҡшы яҡтан таныта алмай был донъяла - шуны белеү бик тә кәрәк..."**

АФАРИН!

# БАШҠОРТ БИҘӘКЛЕ...



Рәсәйҙең иң эре банкы илдең иң күп халыҡ йәшәгән милли төбәктәренең фольклор мотивтары менән карталар сығарҙы. Улар - Башҡортостан, Татарстан, Яҡутстан, Бүрәтстан һәм мәҙәни баш ҡала булараҡ Санкт-Петербургтың биҙәктәре. Был хаҡта Башҡортостандың кредит һәм финанс ойошмалары ассоциацияһынан хәбәр иттеләр.

Башҡортостан картаһы өсөн орнаментты Өфө рәссамы Нелли Аҡсурина төшөргән. "Ысын башҡорт орнаменты декоратив элемент ҡына түгел, ә визуаль код булып тора. Үҙ эшемдә мин башҡорт биҙәгенә хас геометрик һәм үҫемлек мотивтарын берләштерҙем, композициянын нигеҙендә - малсылыҡ, үләндәр һәм уңдырышлылыҡ символы булған ҡусҡар биҙәге", - тип һөйләне Нелли Аҡсурина.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҺАҘАҒАН ҠАРТ

**"Һ" өнөнә башланған һүҙҙәр башҡорт телендә бигерәк күп. Телебеҙҙең боронғолоғон раҫлай улар, үҙенсәлеген һаҡлай. Уларҙың бер нисәһен ҡабатлап, һүҙлек хәтерәнә ныҡытайыҡ. Һаумыһығыҙ! Шулай өндәшкәндә лә туған телебеҙ өндәре ҡолаҡты иркәләп ала.**

**Һаҙаған** - ул, тимәк, күп йыллыҡ, оҙаҡ һаҡланған, былтырғы. Кешегә ҡарата - оҙон ғүмерле мәғәнәһендә. *Һаҙаған бесән. Һаҙаған ҡарағайҙар. Һаҙаған ҡарт (йәғни, оҙаҡ йәшәгән).*

**Һарығат**. "Һарығат" - "Карагат"ҡа яңғыраш һүҙ. Һарығат - шул уҡ һырғанаҡ, йәғни, руссаһы "облепиха". *Һарығат - бик файҙалы емеш. Баҡсала һарығат та үҫә.*

**Һере**. Был һүҙ ҙә хәҙер һирәгерәк ишетелә шул. *Һере - көслө, ауырлыҡҡа бирешмәй торған. Һере егет. Һере булыу.* Икенсе мәғәнәһе - ныҡыш, еңмеш. *Һере холоҡло булыу. Һере ҡыланы.*

**Һереләнеү. 1.** Сыҙамлы, бирешмәүсән булыу. *Йәштәр әрме хеҙмәтендә сыныҡты, һереләнеп ҡайта.* **2.** Ныҡышыу, еңмешләнеү. *Юҡҡа ғына һереләнеү.*

**Һыҙағайым** - ул урман һыҙаты. *Баҫ нурына ҡойонған һыҙағайым ҡышҡы ҡояшта күңелле ялтырай. Һыҙағайымда саңғы шыуҙыҡ.*

**Һыҡы. 1.** Ҡарға бөйлә ҡулланылған һүҙ, "епшек" тигәндә бел-дерә. *Һыҡы ҡар ағастарға һырый.* **2.** Һыҡы "тайғаҡ булмаған" тигән мәғәнәлә лә йөрөй. *Һыҡы юл. Һыҡы һуҡмаҡтан барыу.*

**Шулай итеп, туған телде өйрәнгәндә һереләнеү ҙә урынлы.**

**НУРБИКӘ әҙерләнә.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 25025

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
26 июнь 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
26 июнь 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 1209